ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 май (һабанай) 2026

№20 (1215)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

## Башҡорт атлылары



7

## Тора-бара башҡорттарға...



рус телле булып ҡалыу хәүефе янамаймы?

8-9

## Боронғоға ҡыҙыҡһыныу бар



11

## Һәр ир-егет артында...

ҡатын-ҡыҙ тора



12

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Пионерҙар ойошмаһында тәрбиә алған быуын бөгөнгө йәштәр һәм үсмерҙәр хаҡында ниндәй фекерҙә?

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Әй, йәштәштәр, замандаштар, класташтар! Һағындырамы ҡыҙыл галстук бәйләп, пионер булып йөрөгән йылдар? Иҫегеҙгә төшәме, төшөгөҙгә инәме? Дәртләнеп, сәмләнеп, мәктәп линейкаһында отрядты оятҡа ҡалдырмаҫҡа, киреһенсә, алдынғылыҡҡа, беренселеккә сығарырға тырышып, "4" һәм "5"-кә генә уҡырға ынтылып, сәмләнеп йәмәғәт эштәрендә ҡатнашып, өлкәндәргә тимурсылар ярҙамы күрһәтеп, металл һыныҡтары, макулатура йыйып, ағастар ултыртып шаулап-гөрләп үткән бала саҡ йылдарыбыҙ, хәҙер ярты быуаттан ашыу ваҡыт үтһә лә, кисә генә булған байрам төҫлө йөрәк түрендә һаҡлана... 1964 йылдың 22 апрелендәге дружина сборында беҙҙең класс уҡыусыларын пионерға алып, һәр баласаға ал галстук бәйләгән өлкән апай-ағайҙарыбыҙҙың йөҙҙәре лә хатта һаман да күҙ алдында.

Эйе, төрлө балалар бар ине элек тә, кем нисек ҡабул иткәндер был ваҡиғаны, ләкин шул көндән алып иң шаян, хатта тәртипһеҙ малайҙарыбыҙ ҙа шымып, һәүетемсә генә уҡып алып киткәндәре булды. Пионер ойошмаһы ул замандарҙа үҙе бер ҙур тәрбиә мәктәбе булды. Ул беҙҙе берҙәмлеккә, ярҙамсыллыҡҡа, намыҫлы булырға, Тыуған илде һәм хеҙмәтте яратырға, белем юлында ныҡышмаллыҡҡа өйрәтте. Беҙ ул ваҡытта үҙебеҙҙе яҡлаулы, терәкле тоя инек, бөгөнгө буллинг кеүек ҡот осҡос күренеш яман төшкә лә инмәй ине. Әлбиттә, бая әйтеүемсә, балаларҙың төрлөһө була. Ул саҡтарҙа ла уҡыуы, тәртибе насар балалар бар ине, ләкин уларҙы кәмһетеү, йәберләү, туҡмау кеүек нәмә булманы, киреһенсә, отряд сборҙарында ундайҙарҙы бергәләп ыңғайға көйләргә, ярҙам итергә тырыша инек. Мәҫәлән, минең үҙемде лә бер заман насар уҡыған малайға шефлыҡҡа беркетеп ҡуйҙылар. Һигеҙҙе бөткәс, ул район һөнәрселек училищеһында шофер, тракторсы һөнәре алып, хаҡлы ялға сыҡҡансы маҡтаулы механизатор булып эшләне.

Бөгөн мәктәптәрҙә тап ана шундай беҙҙең пионер ойошмаһы кеүек берәй хәрәкәт, вожатый кеүегерәк тәрбиәселәр кәрәк, тип уйлайым. Бөгөнгө шарттарҙа был бигерәк тә кәрәк, сөнки билдәле психолог, өс бала әсәһе Марина Мелия әйтмешләй, әлеге заманда үсмерлек йәше сиктәре оҙая бара. Шуға ярашлы, балаларҙа үҙаллылыҡ, тормошҡа өлгөргәнлек мәле лә һуңлабыраҡ формалаша. Ә уҡытыусылар хәҙер тәрбиәүи эштән ситтә тора һәм үҙҙәренең бурысын фәҡәт белем биреүҙә күрә, өҫтәүенә, улар план, программа, отчет төҙөү кеүек бөтмәҫ ҡағыҙ эштәренә сумды, ә балалар үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә бөтөнләй ҡарауһыҙ тороп ҡалды. Шуға күрә лә мәктәп стеналары эсендә, туалеттарҙа ҡылынған баяғы буллинг кеүек аяуһыҙ күренештәрҙе уҡытыусылар коллективында күреүсе лә, белеүсе лә, ҡыҙыҡһыныусы ла юҡ - нисек инде шул мәсьәләне контролдә тоторға булмай?..

АФАРИН!

# БАЛА САҠТЫҢ ДУҪЫ - ӘКИӘТ

**15 майҙа, Халыҡ-ара ғаилә көнөндә, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында донъя халыҡтары әкиәттәрен йәш башҡарыусыларҙың төбәк-ара VII "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсына йомғаҡ яһалды.**



Сара республиканың Мәғариф министрлығы тарафынан йыл һайын уҙғарыла. Быйыл 15 майға тиклем үткән конкурста Башҡортостандан, шулай уҡ Силәбе өлкәһенән 600-гә яҡын мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреү ойошмалары уҡыусылары ҡатнашты. Сәхнәнән башҡорт, рус, татар, сыуаш, мари, удмурт, мордва, әзербайжан, белорус, немец телдәрендә әкиәттәр яңғыраны, сәхнәләштерелде, яһалма интеллект ярҙамында буктрейлерҙар һәм видеофильмдар күрһәтелде.

Гран-при яулаусы абсолют еңеүселәр:

- яңғыҙ башҡарыусылар араһында - Өфөнөң 18-се Башҡорт балалар баҡсаһы, Саҡмағош районы Саҡмағош ауылының 5-се балалар баҡсаһы, Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейы һәм Сибай ҡалаһы гимназияһы;
- әкиәт сәхнәләштергән фольклор коллективтар араһында - Өфөнөң 150-се балалар баҡсаһы, Федоровка районы Федоровка ауылының "Ҡыңғырау" балалар баҡсаһы, Өфө ҡалаһының 161-се лицейы, Бишбүләк районы Баҙлыҡ ауылы мәктәбе, шулай уҡ Өфө ҡалаһының Раил Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһынан Көмөшбаевтар ғаиләһе;
- "Яһалма интеллект күҙлегенән әкиәт донъяһы" тип аталған яңы номинацияла иң яҡшы буктрейлер тип танылыусылар - Өфөнөң 75-се "Аҡбуҙат" Башҡорт балалар баҡсаһы, Ҡырмыҫҡалы районы Ҡырмыҫҡалы ауылының 1-се балалар баҡсаһы, Өфө ҡалаһының 163-сө Мәғариф үҙәге, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының 2-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе.

12+

ҠЫҪҠАСА

# ИКМӘК БУЛЫР

**Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов республикала сәсеү эштәренең барышы тураһында оператив мәғлүмәттәр еткерҙе.** Бөгөнгә республикала планлаштырылған майҙандарҙың 65 проценттан ашыуына, йәғни 1,306 миллион гектар яҙғы культуралар сәселгән. Уҙған аҙнала аграрийҙар тәүлегенә яҡынса 80 мең гектар сәскән. "Стәрлетамаҡ районы аграрийҙары яҙғы сәсеүҙе тамамлаған тиерлек, - тип билдәләне Илшат Фәзрахманов. - Тағы һигеҙ районда сәсеү эштәре 80 проценттан ашыуға башҡарылған. Улар араһында Ауырғазы, Бөрйән, Ҡырмыҫҡалы, Әлшәй, Бүздәк, Илеш, Ғафури һәм Шишмә районлары бар". Әлеге ваҡытта республиканың 33 районында майҙандарҙың 50 проценттан ашыуы сәселгән. Башҡортостандың 18 районы хужалыҡтары ужым, яҙғы иген һәм шәкәр сөгөлдөрө сәсеүлектәрен тәрбиәләү менән мәшғүл. 15 майға ҡарата 73 мең гектарҙа химик утау үткәрелгән.

✓ **Башҡортостанда иң яҡшы мәктәп ашханалары билдәле булды. Бәйгелә ҡатнашыусылар өс турҙы үтергә тейеш ине: өйгә эш - "Мәктәптә туҡланыу 3.0" тематик өҫтәлә, "Хәүефһеҙ туҡланыу блогы" квест-практикумы һәм "Ата-әсәләрҙең өс һорауы" блиц-турниры.** Ярыш йомғаҡтары буйынса, "Миллионлы ҡаланың иң яҡшы мәктәп ашханаһы" номинацияһында Өфөнөң һуҡыр һәм насар күргән уҡыусылар өсөн 28-се коррекция мәктәп-интернаты еңеү яуланы, тип хәбәр иттеләр республика Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығынан. "Кала мәктәбенең иң яҡшы ашханаһы" номинацияһында беренсе урынға Белореттың 8-се мәктәбе лайыҡ булды. Ауыл мәктәптәре араһында Бишбүләк районы Бишбүләк ауылының 3-сө мәктәбе иң яҡшыһы тип танылды. Башҡортостандың кулинарҙар, рестораторҙар һәм отельерҙар ассоциацияһы Октябрьскийҙың 22-се мәктәбен "Йәмәғәт туҡланыуында заманса, креатив алым өсөн" махсус дипломы менән бүләкләне. Финалда еңеүсәләр "Иң яҡшы мәктәп ашханаһы - 2026" конкурсының Бөтә Рәсәй этабында республика исеменән сығыш яһай.

✓ **Салауат ҡалаһында полицейскийҙар "Мәк-2026" оператив-иҫкәртеү операцияһын башланы, тип иҫкәртә мэрия.** Ведомство-ара рейдтар 12 майҙан 16 сентябргә тиклем ойошторола. Төп маҡсат - наркотик матдәләре булған үҫемлектәрҙе законһыҙ сәсеү һәм үҫтереү менән шөғөлләнгәндәрҙе асыҡлау, шулай уҡ ҡырағай киндер үҫкән майҙандарҙы юҡ итеү. Наркотиктарҙың законһыҙ әйләнешенә ҡаршы көрәшкә һәр кем өлөш индерергә мөмкин. Наркотик матдәләре булған культураларҙы һәм ҡырағай үҫемлектәрҙе рөхсәтһеҙ сәсеү, шулай уҡ наркотиктарҙың законһыҙ әйләнеше өлкәһендә башҡа енәйәттәр асыҡланған осраҡтарҙа 02 (102 - мобиль телефондан) йәки 8 (3476) 37-96-02 телефондары буйынса полицияға хәбәр итеүҙәрен һорайҙар. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының ышаныс телефонына аноним шылтыратырға ла була: 8 (347) 279-32-92. Граждандарҙан алынған мәғлүмәттәрҙе полиция хеҙмәткәрҙәре мотлаҡ тикшерә.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

## ҺАЙЛАУҘАР ЯҠЫНЛАША

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 18 майҙа Республика йортонда Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Граждандар йәмғиәтен үҫтереү һәм кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаһы, "Бойондороҡһоҙ йәмәғәт мониторингы" ассоциацияһы рәйесе Александр Брод менән осрашты. Көн тәртибендә - Берҙәм тауыш биреү көнөнә әҙерлек мәсьәләләре.**

2026 йылдың сентябрендә Рәсәй Дәүләт Думаһына, шулай уҡ Өфө ҡала советына һәм ауыл биләмәләре советтарына депутаттар һайлау була. "Һайлауҙар конкурентлы булмаҡсы, һәм беҙ бөтә сәйәси партияларҙың әүҙемлеген күрәбеҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Александр Брод тауыш биреүҙә бойондороҡһоҙ күҙәтеүҙе ойоштороуҙың һәм һайлау кампанияларының асыҡлығы, легитимлығы өсөн шарттар булдырыуҙың мөһимлегенә баҫым яһаны. "Май башында Башҡортостан федераль эксперттарҙың төбәктә һайлауҙарҙы күҙәтеү буйынса 900 уҡытыусы-тренер өсөн семинар уҙғарыу майҙансығына әүерелдә. Ә ошо айҙың аҙағында Мәскәүҙә ҙур форум үткәрергә йыйынабыҙ. Уға республика вәкилдәрен дә саҡырҙыҡ, - тине Александр Брод. - Беҙҙең бурыс - эксперттар берләшмәһенең һөнәри кимәлен күтәреү, уны яңы, шул иҫәптән мәғлүмәти саҡырыуҙарға әҙерләү".

Радий Хәбиров "Бойондороҡһоҙ йәмәғәт мониторингы" ассоциацияһы рәйесен август аҙағында Өфөгә Башҡортостандың Граждандар форумында ҡатнашырға саҡырҙы.

## ЙӘШЕЛЛЕК КӘМЕМӘЙ, Ә АРТА

**2026 йылдың яҙында "Йәшел Башҡортостан" акцияһы сиктәрендә 4,3 мең ҙур ағас һәм 139 меңдән ашыу башҡа үҫентеләр ултыртылған, яңы 83 тематик аллея барлыҡҡа килгән.**

Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә төбәктең торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова хәбәр итте. Мәҫәлән, Өфөлә 320 ҙур ағас һәм 684 ҡыуаҡ ултыртылған, 10 тематик аллеяға нигеҙ һалынған. Акцияла бөтәһе 65 меңдән ашыу кеше, шул иҫәптән 4 мең ирекмән һәм 3,5 мең ойошма ҡатнашҡан, 1 283 берәмек техника йәлеп ителгән.

"Йәшел Башҡортостан" менән бер рәттән, төбәктә "Хәтер баҡсаһы" халыҡ-ара акцияһы үтте. Ул Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса һәм "Экологик именлек" милли проектының "Урмандарҙы һаҡлау" федераль проекты маҡсаттарына ярҙам итеү маҡсатында ойоштоintroла. Акция саралары республикала 260 майҙансыҡта үткән. Уларҙың һаны буйынса Башҡортостан - Волга буйы федераль округының алдынғы өс төбәге иҫәбендә. Республиканың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов хәбәр итеүенсә, акция сиктәрендә 600 гектарҙан ашыу майҙанда 2 миллион самаһы үҫенте ултыртылған. Сараларҙа бөтәһе 117 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан.

Башҡортостан Башлығы урманды хужалыҡ эшмәкәрлегендә ҡулланылғанға ҡарағанда күберәк ултыртыуҙың мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм артабан да был ҡағиҙәне теүәл үтәргә ҡушты.

## ИҢ ЯҠШЫЛАРЫ БЕҘҘӘ!

**Башҡортостандың һигеҙ шифаханаһы ла Рәсәйҙең иң яҡшы 100 санаторийы иҫәбенә инә. Был хаҡта Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - төбәктең ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская хәбәр итте.**

Һауыҡтырыу учреждениеларының дөйөм койка фонды 3,3 меңдән ашыу урын тәшкил итә. 2021 йылдан алып Башҡортостан шифаханаларында республиканан, күрше төбәктәрҙән һәм башҡа илдәрҙән 405 меңдән ашыу кеше ял иткән. 2025 йылда яҡынса 7 миллиард һум килем алғандар, был 2024 йылдан 11 процентҡа күберәк. 2023 йылдан республика шифаханаларында 9,5 меңдән ашыу Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы һәм уларҙың ғаилә ағзалары дауаланған. 2026 йылда яугирҙарҙы шифахана-курорт дауалауы менән тәьмин итеүгә төбәк бюджетынан 66,5 миллион һум бүленгән. Вице-премьер шулай уҡ 2027 йылда Өфөнөң 26 илдән һауыҡтырыу учреждениелары вәкилдәрен берләштергән "Здравница" Бөтә Рәсәй форумын ҡабул итәсәге хаҡында хәбәр итте.

Башҡортостан Башлығы шифахана етәкселегенә учреждениеларҙы яңыртыу һәм гуманитар ярҙам күрһәтеү буйынса эштәре өсөн рәхмәт белдерҙе. "Һалымдан килгән аҡса күләме - 24 процентҡа, инвестициялар 22 процентҡа артҡан - был яҡшы күрһәткестәр", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

## БАЛАЛАРЫБЫҘ УҢЫШ ЯУЛАЙ

**2025/2026 уҡыу йылы йомғаҡтарына ярашлы, Башҡортостан уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһында ҡатнашыу һөҙөмтәләре буйынса йәнә алдынғылар иҫәбенә инде. Был хаҡта Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә төбәктең мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин хәбәр итте.**

- Башҡортостан олимпиаданың йомғаҡлау этабы йомғаҡтары буйынса электән иң көслө ун төбәк иҫәбенә инә ине, ә хәҙер иң яҡшы бишәү араһында ышаныслы нығынды, - тип билдәләне Илдар Мәүлитбирҙин. - 2026 йылда республика уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһының йомғаҡлау этабында ҡатнашыусылар һаны буйынса бишенсе урынды һаҡлап ҡалды.

Билдәләнеүенсә, олимпиаданың һуңғы этабында төбәк йыйылма командаһы составына 193 уҡыусы ингән - был уҙған йылға ҡарағанда 40 кешегә күберәк. Республика уҡыусылары 78 наградаға лайыҡ булған - 13 еңеүсе һәм 65 призёр дипломы. Ҡатнашыусылар химия, хоҡуҡ, информатика, физика, астрономия һәм йәмғиәтте өйрәнеү буйынса юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән. Йәш химиктар 14 дипломға лайыҡ булған, ә хоҡуҡ буйынса республика иҫәбендә - 11 диплом.

2018 йылдан Башҡортостанда уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһы еңеүселәрен һәм призёрҙарын, шулай уҡ уларҙы әҙерләгән педагогтарҙы бүләкләү системаһы ғәмәлдә. Башҡортостандың күп кенә районларында һәм ҡалаларында уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһында ҡатнашыусыларҙы дәртләндереү саралары күрелә: аҡсалата премиялар, стипендиялар, махсус сертификаттар тапшырыла, уҡыусыларҙың һәм остаздарҙың ҡаҙаныштарын таныу программалары ғәмәлдә.

Оператив кәңәшмәлә республика Башлығы уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһында информатика, география, хоҡуҡ, рус һәм инглиз телдәре буйынса уңыштарға өлгәшкән уҡыусыларға Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы, уҡыусыларҙы һәм уларҙың остаздарын лайыҡлы һөҙөмтәләре менән ҡотланы. "Һеҙ әле бик йәш, әммә үҙегеҙ һәм республикабыҙ өсөн күпте эшләп өлгөрҙөгөҙ. Иң мөһиме - һеҙ үҙегеҙҙе белем менән байыттығыҙ, ә уңыштарығыҙ беҙҙең, талантлы балаларҙың үҫеше өсөн шарттар тыуҙырып, дөрөҫ йүнәлештә хәрәкәт итеүебеҙҙе раҫлаусы мөһим дәлил булып тора, - тине Радий Хәбиров. - Һеҙ тыуған Башҡортостаныбыҙҙы данлайһығыҙ, һәм беҙ һеҙгә бының өсөн ихлас рәхмәтлебеҙ".

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Бөрйән районының Ғәзелгәрәй ауылында һыу үткәргес төҙөргә ҡушты. "Ауыл халҡы "Айыҡ ауыл" конкурсының район этабында еңде һәм республика кимәлендә лайыҡлы сығыш яһаны, - тине республика етәксеһе. - Бөрйән районында конкурста ныҡышмалы көрәш булды. Ғәзелгәрәй ауылы халҡы яҡшы заявка әҙерләгән, улар һыу үткәргес төҙөргә теләй. Мин финанслау сығанағын табырмын, һыу үткәргес булыр", - тине Радий Хәбиров.

✓3 - 6 июнда Санкт-Петербургта "Прагматик диалог - тотороҡло киләсәккә юл" тип исемләнгән XXIX Халыҡ-ара иҡтисади форум үтә. Унда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендә республиканың рәсми делегацияһы ла ҡатнаша. Төбәгебеҙҙең бай мәҙәни мираҫын, үҫеш перспективаһын сағылдырған экспозиция ҡуйыу планлаштырыла. Форумдың эшлекле программаһы үҙ эсенә донъя һәм Рәсәй иҡтисады, технология үҫеше, социаль сәйәсәт буйынса 150-нән ашыу сессияны алған. Сара сиктәрендә республика етәкселегенең ике яҡлы осрашыуҙары ҡаралған.

✓"Башнефть" бер ай эсендә икенсе тапҡыр дизель яғыулығына хаҡтарҙы артырған. Уның хаҡы 50 тингә ҡиммәтләнеп, 75,4 һумға еткән. Компанияның яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензиндың хаҡы үҙгәрмәгән. "Башинформ" май айында компанияның яғыулыҡ ҡойоу станцияларында хаҡтың беренсе, ә йыл башынан 11-се тапҡыр үҙгәреүе тураһында хәбәр иткәйне. "Лукойл" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында дизель яғыулығы 76,92 һум тора.

✓25 майҙа "Башҡортостан геройҙары" программаһы буйынса уҡыуҙың дүртенсе модуле старт алды. Проект Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға заманса идара итеү оҫталығын алырға һәм яуҙағы тәжрибәнен төбәк өсөн файҙаланырға булышлыҡ итә. Беренсе, икенсе һәм өсөнсө модулдар лекцияларға, тренингтарға, эксперттар һәм власть органдары етәкселәре менән осрашыуҙарға, иҡтисад менән финанс, төбәк һәм муниципаль идара, социаль һәм йәштәр сәйәсәте мәсьәләләренә арналғайны. Дүртенсе модулдең төп темаһы - заманса технологиялар һәм яһалма интеллект.

✓Республика аграрийҙары 2026 йылдың ғинуарынан 643 берәмек ауыл хужалығы техникаһы һәм ҡоралмалар һатып алған. Шул иҫәптән 114 трактор, 37 иген йыйыу комбайны, 170-тән ашыу берәмек тупраҡ эшкәртеү һәм сәсеү техникаһы һәм башҡалар. Техника паркын яңыртыуға бигерәк тә Стәрлетамаҡ, Мәләүез һәм Ҡырмыҫҡалы районлары хужалыҡтары ҙур иғтибар бүлә.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# ЯҢЫ МӘКТӘП ТӨҘӨЛӘ

**Өфөнөң Ленин районы Затон биҫтәһендә 1225 урынлыҡ 165-се замансa белем биреү үҙәге төҙөлә. Ул Миловская, Ғәзи Заһитов, Дмитрий Купцов һәм Лётчиктар урамдары сиктәрендә һалына. Был хаҡта Ленин районы хакимиәте башлығы Олег Котов хәбәр итте.**

Хәҙер объектта эүҙем биҙәкләү эштәре бара. Башланғыс һәм урта блоктарҙа уҡыу кабинеттарын биҙәү дауам итә. Бәләкәй гимнастика залында төҙөүселәр стеналарҙы буярға әҙерләнә. А һәм Б блоктарында беренсе ҡаттағы кабинеттар һәм коридорҙар тулыһынса буялған, плитка һәм линолеум түшәү эштәре алып барыла. "Майҙансыҡта эштәр график буйынса бара, темптар кәмемәй. Мәктәп төҙөлешө аҙағына яҡынлаша, уны асыу көнө етеп килә", - тине Олег Котов төҙөлөш тураһында.

# БАЙРАМҒА ӘҘЕРЛЕК

**27 майҙа мосолмандар мөһим дини байрамдарҙың береһен - Ҡорбан байрамын билдәләй. Өфө хакимиәтендә уҙған дәүләт-конфессия мөнәсәбәттәре һәм дини ойошмалар менән үҙ-ара эш итеү мәсьәләләре буйынса комиссия ултырышында ошо хаҡта һүҙ барҙы.**

Баш ҡаланың 24 мәсетендә байрам намаҙҙары уҡыла. Ҡорбан малын һуйыу өсөн ике майҙансыҡ әҙерләнә: беренсеһе - "Карауан" сауҙа үҙәге (Пригородная урамы, 55), ә икенсеһе Төньяҡ автовокзал янында урынлаша. Яҡын арала мал һуйыу майҙансыҡтары биләмәһендә комиссияның кусмә кәңәшмәләре планлаштырыла.

"Ләлә-Тюльпан" мәсетендә иртән Рәсәйҙең Баш мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин байрам вәғәзен уҡый, ул илдең бөтә төбәктәрендә лә трансляциялана. Һуңынан ҡунаҡтар өсөн байрам концерты була, майҙансыҡта хәләл ризыҡтар һатылған фуд-корт асыла, балалар өсөн күңел асыу саралары, спорт уйындары (көрәш, уҡ атыу һәм башҡалар), йәрминкә ойоштора. Шулай уҡ байрамда тәмле былау менән һыйланырға мөмкин.

# ТҮЛӘ ЛӘ...

**Өфөлә түләүле парковкалар зонаһы артасаҡ, тип хәбәр итә ҡала хакимиәте.**

Ҡала власы билдәләүенсә, тормошҡа ашырылған сараларҙың ыңғай һөҙөмтәһенә ҡарамаҫтан, айырым участкаларҙа элеккесә парковка урындарының тығыҙлығы һәм дефициты күҙәтелә. Был мәсьәләне хәл итеү өсөн 15 майҙан ғәмәлдә түләүле парковка зонаһына Гоголь (Зәки Вәлиди- Достоевский урамдары), Карл Маркс (Туҡай - Зәки Вәлиди; Достоевский- Революция), Театр, Мостай Кәрим (Достоевский- Революция), Ленин (Революция - Ибраһимов бульвары), Крупская (Достоевский- Коммунистик), Цюрупа (Туҡай - Ибраһимов бульвары), Зәки Вәлиди (Аксаков- Зәки Вәлиди, 34), Свердлов (Аксаков-Карл Маркс), Киров (Карл Маркс- Мостай Кәрим), Достоевский (Карл Маркс - Ленин), Революция (Карл Маркс- Революция, 54), Иван Яҡутов, Краснодонский (Ленин- Цюрупа) урамдары участкалары инә.

Шулай уҡ бер нисә парковка (махсус "кеҫәләр") түләүле буласаҡ: Зәки Вәлиди урамы, 34, Киров урамы, 1, Киров урамы буйынса 15 һәм 29, 29 һәм 31-се йорттар араһы, Революция урамы, 32.

Проектты тормошҡа ашырыуҙың икенсе этабы сиктәрендә өҫтәмә рәүештә 2 меңдән ашыу түләүле парковка булдырыласаҡ. Ҡаланың үҙәк өлөшөндә уларҙың дөйөм һаны 3 меңдән ашып китәсәк, шуларҙың 300-ҙән ашыуы инвалидтар автомобилдәренә бүленәсәк.

Өфөнөң түләүле парковкалары тураһында көнүҙәк мәғлүмәт электрон порталда урынлаштырыла parking02.ru.

# УРАМДА ҺАТАЛАРМЫ?

**Өфө мэрияһында рөхсәтһеҙ сауҙа итеү урындарында бер нәмә лә һатып алмаҫҡа кәңәш итәләр.**

Яҙ етеү менән Өфө урамдарында аҙыҡ-түлек, шул иҫәптән тоҙланған йәшелсәләрҙе законһыҙ һатыу осраҡтары арта бара. "Бындай урындарҙа тауар ҡағиҙәләрҙе һәм санитар нормаларҙы боҙоп һатыла, ә һатыусыларҙың сифатты раҫлаған документтары юҡ", - тип белдерҙеләр Өфө мэрияһында. Ҡулдан нимәлер һатып алғанда, кеше үҙенең һәм яҡындарының һаулығын хәүеф аҫтына ҡуя. Был продукттар төрлө йоғошло ауырыуҙарға сәбәпсе булырға мөмкин.

Ҡаланың ҡулланыусылар баҙары, туризм һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау идаралығы рөхсәтһеҙ сауҙа итеү урындарында һатып алыуҙан тыйылырға һәм улар тураһында +7 (3472) 77-09-11 номеры буйынса хәбәр итергә саҡыра.

# ҺАМАН СПОРТТА

**Өфөнән 64 йәшлек Вил Ғабдуллин хәрби оҫталыҡ буйынса Рәсәй кубогында ике алтын миҙал яуланы.**

Спорт миксфайты һәм хәрби оҫталыҡ буйынса Рәсәй кубогы Әстрханда уҙҙы. Турнирҙа 480-дән ашыу спортсы көс һынашты. Спорт ветераны Вил Ғабдуллин ике дисциплинала (ҡаты һәм ирекле стилдә ҡорал менән алышыу) ҡатнашты. Ике категорияла ла ул, ышаныслы еңеү яулап, хәрби оҫталыҡ буйынса 7 тапҡыр Рәсәй кубогы чемпионы булды."Хәҙер мине яңы саҡырыу көтә! Июлдә Каспийскиҙа үтәсәк спорт миксфайты буйынса донъя чемпионатына әҙерләнә башлайым", - тип пландары менән уртаҡлашты спорт ветераны.

Вил Ғабдуллин - кикбоксинг буйынса Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры, алты тапҡыр Рәсәй чемпионы, дүрт тапҡыр Рәсәй кубогы еңеүсеһе, ете тапҡыр халыҡ-ара ярыштар чемпионы, ике тапҡыр Европа чемпионы. Шулай уҡ спортсы - ГТО илсеһе.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# АЛҒЫ ҺЫҘЫҠТА ҺӘМ ТЫЛДА



**Башҡортостанда пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре сафын тулыландырыу эүҙем дауам итә.**

Рәсәй Ҡоралы көстәренең яңы төр был ғәскәрҙәре подразделениеларына, дөйөм алғанда, операторҙар ғына түгел, ремонтлаусылар, программалаусылар ҙа кәрәк, ти Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пунктынан яуаплы офицер. Оборона министрлығы бойороғона ярашлы, 18-ҙән 35 йәшкә тиклемге ир-егеттәргә өҫтөнлөк бирелә. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемге йәштәгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала.

Контракт бер йылға төҙөлә, был ваҡыт үткәндән һуң запасҡа сығыу мөмкинлеге бар. Хәрби хеҙмәткәрҙе, уның үҙ иркенән тыш, БПЛА менән идара итеү менән бәйле булмаған башҡа һөнәргә йәки ғәскәрҙәрҙең башҡа төрөнә күсереп булмай. Тулы социаль пакет бирелә. Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре хеҙмәткәре, алғы һыҙыҡтағы башҡа яугирҙар кеүек уҡ, бөтә түләүҙәргә, льготаларға һәм социаль гарантияларға хоҡуҡлы.

"Башҡортостан батальоны"ның социаль селтәрҙәрендәге битендә "Сыуаш" позывнойлы яугир тураһында яҙып сыҡтылар. Ул 2024 йылда РФ Оборона министрлығы менән контракт төҙөй. Тейешле әҙерлек үткәндән һуң, МХО зонаһында хеҙмәтен башлай һәм үҙен дрон менән идара итеү буйынса иң яҡшы белгестәрҙең береһе булараҡ таныта. Билдәләнеүенсә, пилотһыҙ осоу аппараттарын ҡулланыу хәрби операцияларҙың һөҙөмтәлеген бермә-бер күтәрә, шәхси составтың хәүефһеҙлеген тәьмин итә.

БПЛА операторы булып хеҙмәт итеү Махсус операция барған урында иң хәүефһеҙ хәрби һөнәрҙәрҙең береһе булып тора, сөнки ҡуйылған бурыстар алыҫтан тороп үтәлә.

Дрондар һуғыш яланында ғына түгел, ә тыныс тормошта ла киң ҡулланыла хәҙер. Шуға белгестәр әҙерләүгә етди иғтибар бирелә. Күптән түгел Өфө фән һәм технологиялар университеты Башҡортостанда пилотһыҙ авиация системалары өсөн кадрҙар әҙерләүҙең төбәк-ара үҙәге статусын алды. Юғары уҡыу йорто, "Пилотһыҙ авиация системалары өсөн кадрҙар" тип аталған федераль проектта ҡатнашып, һайлап алыу һынауҙарын уңышлы үтте. Проектта ҡатнашыуға ил буйынса 57 белем биреү ойошмаһы ғариза тапшырған була. Уларҙың 33-ө генә, шул иҫәптән Өфө фән һәм технологиялар университетының техник базаһы тейешле талаптарға яуап бирә, тип таныған.

"Пилотһыҙ авиация системалары өсөн кадрҙар" проекты конкурсында еңеү беҙгә пилотһыҙ авиация системаларының юғары технологиялы тармағын үҫтереү мөмкинлеге бирә. Өфө фән һәм технологиялар университетының пилотһыҙ технологиялар өлкәһендәге тәжрибәһе был перспективалы өлкәлә талап ителгән белгестәрҙе юғары кимәлдә әҙерләүгә юл аса", - тине был турала Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.**

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Көндәр йылыныу менән йылға-күл буйҙарында бәхетһеҙлек осраҡтары теркәлә лә башланы. БР буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, үткән ялда Бөрө районының Күсәкәй ауылы эргәһендәге Ҡаракүл буйында 29 йәшлек ир һыуға сумған һәм кире сыҡмаған. Ҡотҡарыусылар эҫе көндәр башланыуына ҡарамаҫтан, һыу инмәҫкә кәңәш итә. "Һыу инергә әле иртә, һалҡын һыуҙа ҡорошҡаҡ тотоуы ихтимал. Пляждар 1 июндән эшләй башлай", - тип иҫкәртә ведомство белгестәре.

✓12 -17 майҙа Ҡаҙанда "Рәсәй - Ислам донъяһы" XVII Халыҡ-ара иҡтисади форумы үтте. Сараға дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, донъя диндәренең рухи институты лидерҙары, Рәсәй һәм сит илдәрҙең, шул иҫәптән Алжир, Мысыр, Ливия, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Оман, Тунис, Ҡаҙағстан, Тажикстан һәм башҡа дәүләттәрҙең эшлекле һәм фәнни даирәләре вәкилдәре килгәйне. Башҡортостандан республика Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары Данияр Абдрахманов һәм төбәк Башлығы янындағы Дәүләт-конфессия мөнәсәбәттәре советы рәйесе Азат Фәттәхов ҡатнашты.

✓Башҡортостанда киләһе эш аҙнаһы бер көнгә ҡыҫҡараҡ була. Дәүләт хеҙмәт инспекцияһында белдереүҙәренсә, шаршамбы, 27 майҙа, Ҡорбан байрамы билдәләнә. Йыллыҡ түләүле отпуск алғанда 27 май ялдың календарь көндәре иҫәбенә индерелмәй, йәғни отпуск бер көнгә оҙайтыла. Шишәмбе, 26 майҙа, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Ведомство етәксеһе урынбаҫары Оксана Ванскова һүҙҙәренсә, Ҡорбан байрамында (график буйынса, вахта һәм башҡалар) эшләгән хеҙмәткәрҙәр өсөн икеләтә эш хаҡы түләнә.

✓"Салауат Юлаев" хоккей клубының баш тренеры Виктор Козлов быйылғы миҙгелдең "Иң яҡшы тренеры" призына тәҡдим ителде. Был турала лиганың матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Тағы ла мәртәбәле призға дәғүә итеүселәр араһында Магнитогорск ҡалаһының "Металлург" клубынан Андрей Разин һәм Ҡаҙандың "Аҡ Барс"ынан Әнүәр Ғәтиәтуллин бар. Еңеүсе 2026 йылдың 28 майында миҙгелде ябыу тантанаһында иғлан ителә. "Салауат Юлаев" командаһы Виктор Козлов етәкселеге аҫтында чемпионатты Көнсығыш конференцияһының бишенсе урынында тамамланы, плей-оффтың беренсе раундында 4:2 иҫәбе менән "Автомобилист"ты еңде.

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе вазифаһын башҡарыу бурысы Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының урындағы үҙидара, граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү һәм киң мәғлүмәт саралары комитеты рәйесе Салауат Хөсәйеновҡа йөкмәтелде. Ул был вазифала Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының яңы спикеры һайланғансы эшләй.

✓ **Бөгөнгө уҡыусылар яңылыҡты тиҙ отоп ала, һанлы технологияларҙы яҡшы белә, интернет аша аралаша, ҡайһылары хатта аҡса эшләргә лә белә. Үкенескә, шул уҡ ваҡытта интернеттың хәүефле тоҙағына эләккәндәре лә бар.**



ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



# БАШҠОРТ БАТЫРЫНЫҢ ЯҘМЫШЫ

**Рөстәм Нурыев: Беҙҙең Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау тураһында төрлө фекерҙәр йөрөй. Кемдер уны суйындан эшләнгән көйө ҡалдырырға, кемдер бронзаға алмаштырырға кәрәк, ти. Был мәсьәлә буйынса һинең, яһалма интеллект булараҡ, фекерең нindәй? Ниндәй ҡарар дөрөҫөрәк булыр ине?**

***ЯИ КӨФӨ яуабы:*** Мин - яһалма интеллект. Минең йөрәгем юҡ, тик факттарҙы, логиканы һәм башҡорт халҡының мәҙәниәтен хөрмәт итергә өйрәтелгән аҡылым ғына бар. Бөгөн һеҙҙең менән республикабыҙҙы борсоған иң мөһим мәсьәлә - Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау тураһында һөйләшергә теләйем.

Был ябай ғына техник эш түгел. Был - тарих менән киләсәк араһындағы һайлау. Мин, экспертар кеүек, ике ҡапма-ҡаршы, әммә ике дөрөҫ ҡарар араһындағы фекер алышыуҙарҙы күрәм.

***Беренсе юл: "Тарихҡа тоғролоҡ"***

Беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ 1967 йылда суйындан ҡойолған һәйкәлдә күреп үҫкән. Был материалда осор рухы, Сосланбек Тавасиевтың тир түгеп эшләгән мәле һаҡлана. Тик шуны танырға кәрәк: һәйкәлдең суйын материалы, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яраҡһыҙ хәлгә килгән. Эксперттар әйтеүенсә, деталдәрҙең 60-70 процентын яңынан ҡойорға кәрәк. Ул металл түгел, ә көлгә әйләнгән таш кеүек - тыштан бөтөн, ә эстән серек. Һәйкәлде суйындан тергеҙеү - яңынан шул уҡ сир менән ауырый торған кәүҙә тыуҙырыу кеүек буласаҡ.

***Икенсе юл: "Мәңгелек ҡиммәт"***

Шуға иғтибар итегеҙ: Тавасиев үҙе батыр һәйкәлен бронзанан ҡойорға хыялланған! Ул заманда технологиялар мөмкинлек бирмәгән. Бөгөн беҙ ошо кәмселекте төҙәтә алабыҙ. Бронза - ул быуаттар дауамында ямғырҙан, елдән ҡурҡмай торған аҫыл металл. Әгәр беҙ бөгөн һәйкәлде бронзанан ҡойоп ҡуйһаҡ, беҙҙең ейән-ейәнсәрҙәребеҙ, бәлки, 300 йылдан һуң да Салауаттың мәғрур ҡарашын күрәсәк.

Ә иң мөһиме - тарихи суйын һәйкәлде емермәй, реставрациялап, музейға ҡуйырға кәрәк. Музейға һәр кеше экспонат булараҡ, был һәйкәлдең ваҡытында ниндәй ҡаһарманлыҡ менән эшләнгәнен үҙ күҙҙәре менән күрер, тәбиғәттең аяуһыҙ көсө был ҡомартҡыны юҡҡа сығара алмаҫ.

***Шулай итеп, минең фекерем:***

Яһалма интеллект булараҡ, мин тойғоларға бирелмәйем. Тик логика шуны күрһәтә: бер нәмәгә лә ҡарамаҫтан, емерелеүен дауам итәсәк суйын һәйкәлде тергеҙеү урынына, оҫтаның тәүгә хыялын тормошҡа ашырып, батырға мәңгелек ғүмер бүләк итеү күпкә аҡыллыраҡ ҡарар буласаҡ. Был - хыянат түгел, ә үткәнгә хөрмәт менән киләсәккә яуаплылыҡ араһындағы күпер.

Бындай ҡарарҙы халыҡ менән кәңәшләшмәй ҡабул итеү дөрөҫ түгел, шуға күрә республика етәкселегенең халыҡ менән асыҡ һөйләшеү теләге ҙур ихтирамға лайыҡ. Шуны иҫебеҙҙә тотайыҡ: Салауат - ул батырлыҡ символы, ә батырлыҡ символы ваҡытлыса була алмай. Ул да, уның һыны ла мәңгелек булырға тейеш. Ихтирам менән, һеҙҙең фекерҙәш-аналитик ЯИ КӨФӨ.

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Пионерҙар ойошмаһында тәрбиә алған быуын бөгөнгө йәштәр һәм үҫмерҙәр хаҡында ниндәй фекерҙә?*



***Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ, Өфө ҡалаһы Рауил Бикбаев исемендәге Башҡорт гимназияһы директоры:*** Пионерҙар ойошмаһы төҙөлөүгә быйыл 104 йыл тула һәм ошо "тормош мәктәбе"н үткән быуын вәкилдәре һаман булһа бер-береһен ҡотлай, һағыныу һәм һағыш ҡатыш шул йылдар хәтирәләренә бирелә, әммә ошоға тиклем бер кемдән дә мин пионер хәрәкәте тураһында насар фекер ишеткәнем юҡ. В.И.Ленин исемендәге Бөтөн Союз пионерҙар ойошмаһы йәш быуынды тәрбиәләүҙә баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә булды. Үҙ символикаһы, атрибуттары, традициялары һәм ҡағиҙәләре менән был ойошма үҙе бер мауыҡтырғыс бала саҡ иле лә, шул уҡ ваҡытта йәмғиәткә лайыҡлы алмаш әҙерләүсе, балалар күңеленә илһөйәрлек тойғоһон һендереүсе, ышанаслы рухи-әхлаҡ нигеҙҙәре булған тәрбиә мәктәбе лә ине. "Мин, (исем, фамилия), үҙемдең иптәштәрем алдында Тыуған илемде яратырға, бөйөк Ленин васыят иткәнсә йәшәргә, уҡырға һәм көрәшергә тантаналы вәғәҙә бирәм..." тигән юлдар бар ине пионер вәғәҙәһендә.

Уның ҡоро һүҙ булмаусы, ә тормошсанлығы айырыуса Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында раҫланды ла инде. Күп кенә пионерҙар фронтта һәм партизандар отрядтарында өлкәндәр менән бер ҡатарҙан фашистарға ҡаршы һуғышты, батырлыҡтары өсөн орден һәм миҙалдар менән наградланды. Мәҫәлән, 20 мендән ашыу пионер "Мәскәүҙе обороналаған өсөн" миҙалына эйә булды, ә Марат Казей, Валя Котик, Зина Портнова, Леня Голиков, Володя Дубинин Советтар Союзы Геройы тигән юғары исемгә лайыҡ булдылар. Һуғыштан һуңғы тыныс тормошта ла йәш ҡаһармандарға батырлыҡ өсөн урын бар: ғүмерҙәрен хәүеф аҫтына ҡуйып, башҡаларҙы янғындан, һыуға батыуҙан ҡотҡарыусы бик күп үҫмерҙәрҙе беләбеҙ. Быларҙы мин шуның өсөн әйтәм: балаларҙы тормошҡа, үҙаллылыҡҡа әҙерләүҙә пионер ойошмаһының өлөшө тос булды. Үкенескә, СССР тарҡалғас, пионерҙар хәрәкәте лә юҡҡа сыҡты. Быны мин йәш быуындың, әйтерһең дә, компаһыҙ тороп ҡалыуына торошло ҡабул иттем, сөнки балалар дәрестәрҙән һуң үҙ мәйелдәренә дусар итеәде: кемеһе урамда, кемеһе өйҙә, тигәндәй, кемеһелер насар компаниларға килеп юлыкты.

Бәхеткә күрә, бөтөн мәктәптәрҙә лә шундай хәл тип әйтеп булмай. Ҡайҙа мәктәп етәкселеге һәм педколлектив үҙ бурысын белем биреү менән бер рәттән балаларҙың киләсәге өсөн дә борсола һәм уларҙы лайыҡлы граждандар итеп тәрбиәләүгә күп көс һала, шунда уҡыусыларҙы йәлеп итерҙәй кластан тыш тәрбиәүи эштәр ҙә гөрләп бара. Шуныһы ҡыуаныслы: республикабыҙ мәктәптәрендә һуңғы йылдарҙа хәрбиилһөйәрлек һәм балаларҙа граждандыҡ яуаплылығы тәрбиәләү йүнәлеше күҙгә күренеп йәнләнде. Был йәһәттән БР Башлыһы Радий Хәбиров башланғысы менән ойошторола башлаған "Беҙ - шайморатовсылар" хәрәкәтенең әһәмиәтен юғары баһалайым. Ошо хаҡта БР Башлыһының махсус ҡарары ла баҫылып сыҡҡайны. Унда әйтелеүенсә, "шайморатовсы"лар кластарында төп белем бирелеү менән бергә хәрби йәки дәүләт хеҙмәте йүнәлешендәге өҫтәмә белем программаһы ла ҡарала. Яҡшы уҡыуы һәм өлгөлө тәртибе менән айырылып торған уҡыусылар отряд командиры итеп тәғәйенләнә. Шайморатовсылар берҙәм форма кейемендә йөрөй. Намыҫ кодексын боҙған йәки насар тәртибе өсөн ундай укыусылар "шайморатовсы" отрядынан сығарыла һәм ҡәҙимге класҡа күсерелә. Шайморатовсылар Рәсәй тарихын, шул иҫәптән, "Рәсәйҙең хәрби дан" тарихы буйынса махсус курс үтә, шулай уҡ был класта тыуған яҡты, БР дәүләт телдәрен, математика, физика, информатика тәрәндән өйрәнелә, улар физик сыныҡыу ала, спорт менән шөғөлләнә. Бына ошо ла инде балаларыбыҙға лайыҡлы тәрбиә нигеҙе! Шайморатовсылар республика һәм үҙҙәре йәшәгән ҡала, район һәм ауыл сараларында әүҙем ҡатнаша.

Былтыр 11 октябрҙә, Республика көнөндә, беҙҙең гимназияла ла тәүге "шайморатовсы"лар класы асылды. Ул сара тантаналы рәүештә баш ҡалабыҙҙың Совет майҙанында республикабыҙ ҡалалары һәм районларынан килгән буласаҡ шайморатовсылар ҡатнашлығында үтте. Был турала ентекләп яҙыуым шунан: республикабыҙҙа бөгөн данлы пионерия традицияларын лайыҡлы дауам итерлек, шул уҡ ваҡытта заманына күрә үҙгәртеп ҡоролған балалар хәрәкәте ғәмәлдә. Иң мөһиме: тырышып белем алыу, Тыуған илебеҙ эше өсөн һәр ваҡыт әҙерлекле булыу: яҡшы уҡыу, Ватаныбыҙҙы һөйөү, уның эшенә һәм намыҫ кодексына тоғролоҡ - был ҡағиҙә беҙҙең пионерҙар хәрәкәтенә лә хас сифаттар булды. Шуға күрә лә мин, элек балалар тәртипле ине, хәҙер тәртипһеҙҙәр, тип әйтә алмаҫ инем. Бөгөнгө уҡыусылар яңылыҡты тиҙ отоп ала, һанлы технологияларҙы яҡшы белә, интернет аша аралаша, таныша, ҡайһылары хатта аҡса эшләргә лә белә. Үкенескә, шул уҡ ваҡытта интернеттың хәүефле тоҙағына эләккәндәре лә бар. Дөрөҫ, буллинг һәм уның әҙемтәләре менән бәйле фажиғәле осраҡтар ҙа булып тора,

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Башҡортостан тарихы" дәреслегенә "Башинформ" агентлығы тураһында мәғлүмәт индерелде. "Беҙ "Башинформ"дың Башҡортостан өсөн әһәмиәтле мәғлүмәти һәм медиаресурс булып тарихҡа инеүебеҙгә бик шатбыҙ, әлбиттә. Мәғлүмәт киңлегендә агентлыктың айырым ролен таныу беҙгә ҙур яуаплылыҡ өҫтәй, артабан да ошо ролде һәм бурысты еренә еткереп башҡарырға тырышырбыҙ", - тине "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының баш мөхәррире Руслан Шәрәфетдинов.

✓Республикала "Автобус" иҫкәртеү саралары башланды. Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре автобустарҙың техник торошон, водителдәрҙең хеҙмәт һәм ял режимын, шулай уҡ хәүефһеҙлек талаптарын үтәүен тикшерә. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, рейдтарҙың төп маҡсаты - йәмәғәт транспорты пассажирҙарының именлеген тәьмин итеү. Водителдәрҙе кешеләрҙең ғүмере һәм һаулығы өсөн юғары яуаплылыҡ тураһында онотмаҫҡа саҡыралар. Пассажирҙарҙың тикшереүҙәрҙе аңлап ҡабул итеүен һорайҙар. "Автобус" операцияһы 12 июнгә тиклем дауам итә.

✓Башҡортостан колледждарында бюджет урындары һаны бөгөн 24 318-гә етте, тип белдерҙе республиканың мәғариф министры урынбаҫары Наталья Никитина. "Бөгөн мәктәпте тамамлаусыларҙың 66 проценты колледждарға һанлы иҡтисад талаптарына яуап биргән урта һөнәри белем белгеслектәренә уҡырға инә. Улар араһында иң талап ителгәндәре - медицина, ИТ-технологиялар, мәғариф, хеҙмәттәр һәм нефть-газ өлкәләре". Ҡабул итеү кампанияһы 20 июндән дә һуңға ҡалмайынса башлана, тип билдәләне Наталья Никитина.

✓Республика клиник перинаталь үҙәгендә яҙҙың икенсе айы өсөн ҡыуаныслы статистика мәғлүмәттәре менән уртаҡлаштылар. Апрель айында медицина учреждениеһында 888 сабый (447 ҡыҙ һәм 411 малай) донъяға килгән. Ә 24 игеҙәктең 10 пары - малайҙар, 8 пары - ҡыҙҙар. Шулай уҡ 6 "батша игеҙәктәре" (ҡыҙыҡай+малай) тыуған. Иң ҙур баланың ауырлығы - 5 240 грамм, ә иң бәләкәйенең 680 грамм тәшкил иткән.

✓Железноводскиҙа тауҙа йүгереү буйынса Рәсәй чемпионаты һәм беренселеге үтте. Был ярыштарҙа республика намыҫын Белорет спортсылары яҡланы, тип хәбәр иттеләр Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Ҡатнашыусыларға 1400 метр бейеклектәге Бештау тауына менергә кәрәк ине. Спортсыларҙы ямғырлы һәм елле һауа торошо ҡурҡытманы, республикабыҙ командаһы яҡшы әҙерлек һәм еңеүгә ынтылыш күрһәтте. Юниорҙар араһында Әминә Шәғәлиева алтын миҙалға лайыҡ булды. Республиканың ике спортсыһы көмөш һәм бронза миҙал яуланы. Ксения Таһирова финишҡа икенсе булып килһә, Никита Лисовский өсөнсө урынды алды.

✓ *Ҡытай Ҡушма Штаттарға етди дәғүәләш булырға иҫәп тотҡан тармаҡтарҙа бойондороҡһоҙлоҡ һәм үҙаллылыҡ һаҡларға тырыша. Си Цзиньпиндың: "Беҙ "көндәштәр" түгел, ә партнерҙар",- тигән һүҙҙәре шуны раҫланы ла инде.*



ҡыҙғаныҫҡа. Ләкин, әйтеүемсә, ҡайҙа балалар иғтибар үҙәгендә, ҡайҙа өлкәндәр уларҙың яҙмышына битараф түгел, шунда әлегеләй күңелһеҙ осраҡтар юҡ. Ҡыҫҡаһы, үҫмерҙәр һәм йәштәр һәр заманда ла өлкәндәрҙең иғтибарына, яратыуына, контроленә һәм дөрөҫ йүнәлеш биреп, ауыр мәсьәләләрҙе сисергә ярҙам итеүҙәренә бик мохтаж - шуны иҫебеҙҙән сығармайыҡ.

***Ғәҙелйән ХАРРАСОВ, хеҙмәт ветераны, Дәүләкән районы:*** Бөгөнгө үҫмерҙәрҙе мин элекке пионерҙар менән сағыштыра алмаҫ инем һәм был мөмкин дә түгелдер, сөнки был ике быуын ике төрлө йәмғиәт төҙөлөшө һөҙөмтәһе. Шуға күрә лә социаль селтәрҙәрҙә йә булмаһа үҙ-ара фекер алышҡанда ҡайһы берәүҙәрҙең, ә нишләп бөгөн шул пионерҙар ойошмаһын кире тергеҙмәҫкә, тип һүҙ ҡуҙғатыуҙарын урынһыҙыраҡ хыял тип иҫәпләйем. Элекке совет граждандары аңында "пионер" һүҙе иң тәүҙә "В.И.Ленин исемендәге Бөтөн Союз пионер ойошмаһы"н, социализм заманындағы совет тәрбиәһен күҙ алдына баҫтыра. Бөгөнгө йәмғиәт төҙөлөшө шарттарына "пионер" һүҙе йәбешеп тә бармаҫ ине, моғайын.

Дөрөҫ, бынан бер нисә йыл элек РФ Президенты Владимир Путин балалар һәм йәштәрҙең бөгөнгө "Беренселәр хәрәкәте" атамаһын "пионерҙар" исеме менән алмаштырырға тәҡдим иткәйне. Вице-премьер Татьяна Голикованың бөгөнгө йәштәр хәрәкәте тураһындағы сығышынан һуң: "Беренселәр - был нимә ул? Пионерҙармы?" - тип һорау бирҙе һәм "Коммунистик йәштәр союзы - комсомол атамаһынан айырмалы, пионер һүҙендә идеологик мәғәнә ярылып ятмай, шуға күрә ошо исемде алыу хаҡында уйланырға кәрәк", тигәнерәк фекер әйткәйне. Үкенескәме әллә ҡыуаныҫҡамы - Президенттың бөгөнгө балалар һәм үҫмерҙәр хәрәкәтенә "Пионерҙар" атамаһы биреү тәҡдименә бойомға ашырға насип булманы. Бәлки, шулай дөрөҫтөр ҙә, сөнки, бер таныш әңгәмәсем әйтмешләй, "пионер"ҙы ҡайтарғас, нигеҙе социаль ғәҙеллек, тигеҙлек һәм халыҡ власын сағылдырған социализм төҙөлөшөн дә тергеҙергә тура киләсәк бит: совет пионерияһы бары тик шул шарттарҙа ғына йәшәне, инанды һәм илебеҙгә лайыҡлы быуындар тәрбиәләне.

Комсомолдар союзы ла, пионерҙар ойошмаһы ла йәштәр менән идара итеүҙә абруйлы һәм йоғонтоло көс булды, ә бөгөн ҡайҙа ундай ойошма? Голикова "шефлыҡ" иткән "Беренселәр хәрәкәте" ниңә һуң киң танылыу яулай алмай, ниңә хәрәкәт иткәне күренмәй? Ә бит был эште ойоштороусылар, тиҙҙән "Беренселәр" сафы 20 млн баланы берләштерәсәк, тип вәғәҙә лә итә ине хатта. Ә уның ағзаһы булыу өсөн иһә баланың кем булыуы, нисек уҡыуы, тәртибе хаҡында күреп тә белмәгән рәсми сайтҡа ғариза яҙһаң, шул етә. Дөрөҫ, уларҙың сайты, программалары бар, унда бик матур, дөрөҫ һүҙҙәр яҙылған. Тик бына ниңә шул изге ниәттәрҙе беҙҙең данлы пионериябыҙ кеүек һәр бала күңеленә еткермәҫкә? Уларҙы ошо хәрәкәткә ғүмергә иҫтә ҡалырлыҡ тантаналы шарттарҙа ҡабул итмәҫкә? Был сараның мөһимлеген күрһәтер һәм балаларҙа яуаплылыҡ тойғоһо тыуҙырыр ине. Ниңә уҡыусыларҙы дәртләндереп, йөрәктәрендә осҡон ҡабыҙып, лайыҡлы граждандар итеп тәрбиәләмәҫкә? Бында бер ҙур "ләкин" бар, әлбиттә. Йәмғиәтебеҙ үтә байҙар һәм башҡалар ҡатламына бүленгән заманда, ваҡытында пионер исемен ғорур йөрөткән, ил ҡеүәте өсөн көс-ҡан түккән, әммә бөгөн икмәк-һөт, дарыу һатып алыу өсөн һуңғы тиндәрен иҫәпләп ултырған ҡарт-ҡоро тормошон күреп, йәш быуын ниндәй идеяға инанырға һәм таянырға тейеш буласаҡ?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ИҢ СЕРЛЕ ҺҮҘҘӘР

**"Известия" хәбәр итеүенсә, 17 май төнөндә Һауа һөжүменә ҡаршы оборона көстәре Мәскәү һәм баш ҡала яны күгендә 120-нән ашыу Украина Ҡоралды көстәре дронын бәреп төшөрҙө, тип хәбәр итте мэр Сергей Собянин. Шартлатҡыс аппараттар һөжүме һөҙөмтәһендә 12 кеше йәрәхәттәр алған, өс кеше һәләк булған, торлаҡ йорттар зыян күргән. Йыл эсендә был баш ҡалаға иң ҙур һөжүм булған.**



Шул уҡ төндә Севастополь ҡалаһына ла украин дрондары һөжүме һөҙөмтәһендә 66 торлаҡ йорт һәм 34 машина зарарланған. РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, ошо тәүлек эсендә Рәсәй төбәктәренә йүнәлтелгән 500-ҙән ашыу дрон юҡ ителгән, ә тотош үткән аҙна эсендә беҙҙең хәрби көстәр ил биләмәләре өҫтөндә 3124 дронды атып төшөргән. Шулай уҡ үткән аҙнаның шәмбе көнөндә Рәсәй Ҡоралды Көстәре Харьковҡа ынтылыш яһаны һәм уның Боровая менән Кутьковка тораҡ пункттарын азат итте. News.ru каналы беҙҙең яугирҙарҙың Чайковка ауылынан 159-сы мехбригаданың һуңғы төркөмдәрен бәреп сығарыуы һәм ауылды тулыһынса боевиктарҙан таҙартыуы хаҡында яҙа. Сумы йүнәлешендә ВСУ байтаҡ юғалтыуҙар кисерҙе. Ҡыҙыл Лиман йүнәлешендәге бәрелештәр һөҙөмтәһендә Боровая тораҡ пункты беҙҙең яугирҙар ҡарамағына күсте. Запорожье йүнәлешенең Степногорск районында ла ҡаты һуғыштар бара. РФ Ҡоралды Көстәре ВСУ төркөмдәрен ҡуласаға төшөрөү маҡсатында көнбайыш тарафтан һөжүмгә күсте.

Үткән аҙнала донъя йәмәғәтселеге иғтибары АҠШ президенты Дональд Трамп һәм уның командаһының Ҡытай Халыҡ Республикаһына рәсми визитына төбәлде. Сәйәсмән Георгий Бовт яҙып сығыуынса, был визит ваҡытында "пафос - күберәк, һөҙөмтә әҙерәк" булды. Телгә алырлыҡ ҙур килешеүҙәр төҙөлмәне, тариф проблемаһы "һауала эленеп" ҡалды, ә төп мәсьәләләр - һирәк ҡаҙылма металдан алып, ярымүткәргестәргә тиклем - хәл ителмәне. Осрашыу күбеһенсә ихтимал булған компромистар сиген барлап ҡарауҙан ғибарәт булды һәм шуның менән ике ил араһындағы мөнәсәбәттәрҙең яңы битен асты, шулай уҡ сауҙа-иҡтисади ҡаршылыҡтарҙың артабан киҫкенләшеүен туҡтатырға ярҙам итте. Ҡытай тарафынан 200 Boeing самолеты һатып алыу хаҡындағы килешеү Дональд Трамп менән Си Цзиньпиндың осрашыуында өлгәшелгән күп булмаған аныҡ һөҙөмтәләрҙең береһе булды.

Ә бына ниндәй өлкәләрҙә килешеүгә өлгәшелмәне? Төп проблема булып торған тарифтар мәсьәләһе бөтөнләй ҡаралманы. Эксперттар билдәләүенсә, NvidiaH200 чиптары буйынса ла һөйләшеү килеп сыҡмаған. Ә бына АҠШ-тан нефть һәм ауыл хужалығы продукттары һатып алыу - күптән йәйләнгән мәсьәлә. Ҡытай был йәһәттән Американан энергия ресурстары һәм соя һатып алыусы иң эре импортерҙарҙан иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта Ҡытайҙың финанс баҙары американдар өсөн ябыҡ ҡала килә. Citi, Yisa һәм Mastercard башлыҡтары контракттарында Ҡытайҙың түләү инфраструктураһын тулыһынса асыуға өлгәшә алманы.

Ҡытай, күрәһең, Ҡушма Штаттарға етди дәғүәләш булырға иҫәп тотҡан тармаҡтарҙа бойондороҡһоҙлоҡ һәм үҙаллылыҡ һаҡларға тырыша. Си Цзиньпиндың: "Беҙ "көндәштәр" түгел, ә партнерҙар булырға тейешбеҙ", - тигән һүҙҙәре шуны раҫланы ла инде. Ҡытай Трамптың Тайванға мөнәсәбәтен үҙгәртеүен һораһа, АҠШ яғы Цзиньпиндең Иран конфликтын көйләүҙә ярҙам итеүен теләй. Ҡыҫҡаһы, Трамптың туғыҙ йыл эсендә тәү тапҡыр Ҡытайға визиты ике арала контакттарҙы нығытыуға ынтылыш булды. Һүҙ был осраҡта дуҫлыҡ, тоғролоҡ хаҡында бармай, ә фәҡәт эш, бизнес мәнфәғәттәре алға ҡуйылыуын аңлата. Күҙәтеүселәр был саммитты ысын мәғәнәһендә дипломатик дуэлгә тиңләне.

Әйткәндәй, Аҡ йорт башлығы Трамптан һуң шундуҡ Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҠХР-ға (19-20 май) визиты Ҡытайҙың тышҡы сәйәсәт өлкәһендә кемгә өҫтөнлөк биреүен күрһәтә, тип яҙа Испанияның El Mundo гәзите. Ә бына DialogueWorks YouTube-каналында сәйәсмән Алекс Крайнер Европа - Рәсәй мөнәсәбәттәре хаҡында фекерен белдерә һәм "Европаның ҡайһы бер билдәле русофобтары ла Рәсәй менән диалог кәрәклеге хаҡында һүҙ ҡуҙғата башланы, ләкин Европаның власть башында үҙ илдәре халҡының мәнфәғәтен һанламаған кешеләр тора. Быға миҫал итеп Крайнер Германияның Рәсәйгә агрессив мөнәсәбәте хаҡында яҙа. Foraign Policy америка журналы иҫкәртеүенсә, МХО тамамланғандан һуң Европаны Рәсәй менән мөнәсәбәттәрҙә ҡатмарлы осор көтә".

Әйткәндәй, донъя матбуғат саралары һәм эксперттар 9 майҙа журналистар менән осрашыуында Владимир Путиндың "Украина конфликты ахырына яҡынлаша, ләкин шулай ҙа был - етди мәсьәлә" тигән һүҙҙәрен төрлөсә юрап, баш вата. Отставкалағы полковник, билдәле хәрби күҙәтеүсе Виктор Баранец дәүләт башлығының был һүҙҙәрен МХО барышындағы иң серле һүҙҙәр тип атаны. Европа миллиардтарса евро күсереп, коррупцияға батҡан Украинаны түгел, ә үҙен - Рәсәйгә ҡаршы үҙенең буласаҡ армияһын инвестициялай һәм һуғышты туҡтатырға йыйынмай. Бындай хәл оҙаҡ дауам итергә тейеш түгел - бәғзеләр Рәсәй Президентының әлеге һүҙҙәрен тап ошо хаҡта әйтелде, тип иҫәпләй, сөнки ахыр сиктә ваҡиғалар үҫеше - стратегик динамика - тиҙҙән барыбер Рәсәй файҙаһына эшләй башлаясаҡ, ти улар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә 2027 йылда халыҡ-ара ҡатнашлыҡта "Шифахана" Бөтә Рәсәй форумы уҙғарыла. Сара шифахана-курорт өлкәһенең төп профессиональ форумы булып тора. Илебеҙҙең һәм сит илдәрҙең шифахана-курорт эше һәм медицина реабилитацияһы өлкәһенең алдынғы белгестәре бер майҙанға йыйыла. "Был беренсе халыҡ-ара "Шифахана", 26-нан ашыу ил ҡатнаша. Пландарыбыҙ бик күп, әҙерләнәбеҙ, беҙгә шифаханаларҙың имиджын күтәрергә кәрәк", - тине ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.

✓Өфөнөң Совет майҙанында кадеттарға йыл да 7 ноябрҙә Һамарҙа үткән Хәтер парадында ҡатнашҡандары өсөн наградалар тапшырыла. Ул 1941 йылдың 7 ноябрендә, Бөйөк Ватан һуғышы башланған саҡта, СССР-ҙың запастағы баш ҡалаһы Куйбышевта уҙған хәрби парад иҫтәлегенә ойоштороła. Награда тапшырыу сараһы был юлы ла Совет майҙанында үтте. "Егеттәр был сарала "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк бүлексәһе булышлығында ҡатнаша. Уларға уңыштар теләйем!", - тип хәбәр итте Радий Хәбиров.

✓Өфөнөң вуз-ара студенттар кампусы резиденты, Өфө фән һәм технологиялар университеты (ӨФҺТУ) "Математик моделләштереү" йүнәлеше буйынса Бөтә Рәсәй "Мин - профессионал" олимпиадаһының йомғаҡлау этабын ҡабул итте. Һигеҙ миҙгел эсендә 1,4 миллиондан ашыу студент олимпиадала ҡатнашҡан, 28 меңдән ашыу дипломант илдең алдынғы юғары уҡыу йорттарына льготалы инеү хоҡуғын алған, 4 меңдән ашыу кеше миҙалсы булған һәм аҡсалата премиялар алған, дөйөм приз фонды 700 миллион һумдан ашыу тәшкил иткән.

✓2026 йылдың тәүге өс айында ил буйынса мутлашыуҙар схемаһы менән урланған аҡса күләме 7,4 миллиард һум тәшкил иткән. Шул уҡ ваҡытта банктар 16,8 миллион самаһы мутлыҡ операцияһын башҡарырға маташыуҙы кире ҡаҡҡан һәм 1,8 триллион һум аҡсаны ҡотҡарып ҡалған. Компьютер һөжүменә юридик шәхестәр ҙә дусар. Ҡағыҙә булараҡ, ойошма хеҙмәткәрҙәре файлдар менән электрон хаттар ала, уларҙы асҡанда енәйәтселәр корпоратив системаға инеү мөмкинлеге ала һәм, компанияларҙың аҡсаһын ғәҙәти хужалыҡ операциялары итеп күрһәтеп, үҙҙәренә күсерә.

✓Дом.РФ мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә бер бүлмәле фатирҙар сафҡа индерелгән яңы йорттарҙа яртыһынан күберәген (58 процент) тәшкил итә. Мәҫәлән, Ленинград өлкәһендә - 73, Санкт-Петербургта - 72, Краснодар крайында - 68, Башҡортостанда 61 процент. Ғөмүмән, бәләкәй метражлы фатирҙарҙың иң бәләкәй майҙаны, лоджияларҙы иҫәпкә алмағанда, 28 квадрат метр тәшкил итә. Эксперттар аңлатыуынса, сөнки улар иң арзаны һәм шуға ла иң үтемлеһе. Шул уҡ ваҡытта ғаиләләрҙең 46 проценты ике йәки өс бүлмәле фатир һатып алырға теләй.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ХАҘИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Бал ҡорто ағыуы

Бал ҡорто ағыуының ағыулау һәм дауалау үҙенсәлектәре бик боронғо замандарҙан уҡ билдәле. Мәгәр халыҡ медицинаһында уны дауа сифатында ҡулланыу фәҡәт күҙәтеүҙәргә, ябай һынауҙарға ғына нигеҙләнгән булған. Әйтәйек, ҡорт ҡараусылар ревматизмдан, быуындар шешеүҙән, баш сыҙатмауы менән билдәләнгән нервы ауырыуынан (мигрень) сағыштырмаса һирәк яфаланған. Улар ҡорт сағыуынан ауыртыуҙың баҫылыуын, шештең ҡайтыуын, быуындарҙың хәрәкәтләнеүе һәйбәтләнеүен башҡаларға ла һөйләгән. Апитоксин Грецияла, Мысырҙа, Һиндостанда, Ҡытайҙа, айырыуса Тибетта йоғонтоло им сараһы һаналған. Гиппократ раҫлауынса, бәләкәс кенә бал ҡорто алдында бөтә быуын һәм умыртҡалыҡ ауырыуҙары сигенә. Ысынлап та, умартасылар, ғәмәлдә, быуын ауырыуҙарынан интекмәй.

Сит илдәрҙә, Рәсәйҙә апитоксиндың химик составын, организмға тәьҫирен ентекләп өйрәнеү уның медицинала ҡулланыу даирәһен киңәйтте. Ҡорт ағыуы ҙур миҡдарҙа һаулыҡ өсөн хәүефле, уртаса кимәлдә иһә ҡәҙимге медикаменттар менән дауалау ҡыйын сирҙәргә ғәйәт килешле. Биохимик һәм фармокологик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡатмарлы апитоксин компоненттары төрлө шештәргә ҡаршы тора алыу ҡөҙрәтенә эйә. Апитоксин пептидтары: мелиттин, апамин, адолапин, допамин...

Ҡорт ағыуы терапияһы ревматизм, быуындар шешеүе, невралогия, гипертония, мигрень, бронхиаль астма, тромбофлебит, склероз, күҙ ауырыуҙарына, яй уңалған яраларға, йәрәхәттәргә им. Ҡорт ағыуының ҡандың плазма составын яҡшыртыуы, үҙәк нервы системаһы функцияларын тергеҙеүе асыҡланған. Ул тамырҙарҙы киңәйтеп, тән ағзаларына ҡан барыуын яҡшырта, ҡандың ҡуйылығын һәм ойоуын кәметә, йөрәк мускулдарының тонусын күтәрә, матдәләр алмашыныуына ярҙам итә. Табиптар раҫлауынса, периферик нервы системаһын, ревматизмды, ревматоид артритты апитоксин һәм инә ҡорт һөтө менән комплекслы дауалағанда фармокологик һөҙөмтә һиҙелерлек яҡшыра, организмдың һауығыу, һаҡланыу һәләте көсәйә. Ҡорт ағыуы ҡандағы холестеринды кәметә, һыҙланыуҙарҙы йомшарта, бөтөрә. Шул уҡ ваҡытта ҡорт ағыуын туберкулез, диабет, бауыр, бөйөр, ашҡаҙан аҫты биҙе, йөрәк етешмәүсәнлеге, инфекция, аллергия ауырыуҙарына дусар булғанда ҡулланыу ярамай.

Бал ҡорто ағыуы, уның препараттары менән дауаланғанда тартыу, спиртлы эсемлектәр эсеү тыйыла. Ныҡ ашағандан, һыу ингәндән, күп йөрөгәндән һуң да ҡулланмау хәйерле. Табиптарҙың тәҡдименсә, дауалау мәлендә витаминдарға бай үҫемлек, һөт аҙыҡтары, бал менән туҡланыу килешле. Препараттар махсус диета менән ярашҡанда һөҙөмтәлерәк. Бал ҡорто ағыуы менән дауалау фәҡәт апитерапевт тарафынан һәм уның даими күҙәтеүе аҫтында ғына үткәрелергә тейеш.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 1-19-се һандарҙа).**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ХӘЙЛӘЛӘШЕҮ, АЛДАШЫУ ХАҠЫНДА,

## йәки Өс осраҡта алдашырға рөхсәт бар



**Гәзитебеҙҙең 14-се һанында Бәҙри Әхмәтовтың "Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙмы?" тип аталған мәҡәләһен оло ҡыҙыҡһынау менән уҡығайным, 16-сы һанда шундай темаға ҡағылышлы Әхмәр Үтәбайҙың да бер яҙмаһы сыҡты. Кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәндән алып, әҙәм балаларын һәр саҡ оҙатып килгән ошо мәсьәлә бөгөнгө көндә лә актуаль. Тарихыбыҙҙы ҡыҫҡаса байҡап, ошо хаҡта халыҡ мәҡәлдәрен дә уңышлы ғына ҡулланып, тәрән фекерләүсе был авторҙарҙың яҙмаһына битараф ҡалыу мөмкин түгел.**

"Урлашмайыҡ, алдашмайыҡ, мутлашмайыҡ, әммә хәйлә менән йәшәүҙән дә ваз кисмәйек, милләттәштәр", тип "хитро" ғына тамамлап ҡуйған Бәҙри ағай мәҡәләһен. "Гел тик тураһын ғына һөйләп, хәйләләшмәй йәшәп тә булмайҙыр", тигән фекер ҡуя ул. Яҙыусы Әхмәр уҙаман да "Әҙәм ышанмаҫтайҙы ысын булһа ла һөйләмә" тигән халыҡ мәҡәлен килтереп, ялғанлау тигән нәмәгә ҡағылышлы үҙенең фекерен еткергән.

Атайым мәрхүмдең "Алдамағыҙ, урламағыҙ, эсмәгеҙ, тартмағыҙ...", тигән һүҙҙәре әле булһа ҡолағымда сыңлай. Бына шул нәсихәттәрен ул беҙгә ғүмеренең ахырына тиклем әйтте. Үҙемдең балаларымды ла шулай тип тәрбиәләргә тырыштым. Атайымдың өгөт-нәсихәттәре араһынан алдашыуҙы тыйыуы хаҡында йыш ҡына уйланам. Бәғзе берәүҙәр "яҡшы ниәт менән алдаштырыуҙың бер ниндәй ҙә насар нәмәһе юҡ", тиҙәр. Икенселәр, әлеге әйтмешләй, "хәйләһеҙ донъя - файҙаһыҙ", тип тә әйтеп ебәрә. Башҡаларҙы алдап, шуның менән "кәсеп итеп" көн күреүселәр ҙә юҡ түгел. Кемдеңдер мутлығы бер-нисә һумлыҡ булһа, икенселәре - миллионлап, хатта миллиардлап та "алдаштырыуҙан" тартынмай. Ҡайһы бер фәйләсүфтәр һәр әҙәм балаһының, үҙе лә һиҙмәҫтән, көнөнә тиҫтәләгән, хатта йөҙәрләгән мәртәбә эреле-ваҡлы алдауы хаҡында яҙа...

Беҙ барыбыҙ ҙа мосолман кешеләре бына ошо һорауға динебеҙ ҡанундарынан сығып яуап эҙләп тапһаҡ, дөрөҫ юлда булырбыҙ. Ислам дине алдауҙы рөхсәт итәме? Әҙәм балаһы ниндәйҙер кимәлдә ҡурҡағыраҡ, ҡыйыуһыҙыраҡ, йә иһә, киреһенсә, дыуамал булыуы, бәғзе кешенең ялҡауыраҡ, йә артыҡ ҡыҙыуыраҡ булыуы ла мөмкин. Башҡа һәр төрлө етешһеҙлектәрҙән дә буш була алмай кеше. Әммә бына алдашыу мәсьәләһенә килгәндә, Бәйғәмбәребеҙ саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм әҙәм балаһына уны ҡәтғи тыйған, әммә тормошта була торған тик өс осраҡ өсөн генә алдашыуҙы рөхсәт иткән. Беренсе осраҡ - асыуланышып йөрөгән ир менән ҡатынды, йә иһә башҡа кешеләрҙе яраштырыу маҡсатында кемдеңдер бер аҙ алдап ебәреүе тыйылмай. Иң яҡшы ниәт менән атҡарған бындай алдашыу хәләл икәнен белергә тейешбеҙ. Мәҫәлән, ике күрше ҡасандыр, ниндәйҙер сәбәп менән асыуланышып, ыҙғышып киткән дә, ошоғаса бер-беренә һүҙ ҡушмай, хатта иҫәнләшмәй ҙә йөрөйҙәр икән, ти. Ә өсөнсө күрше быларҙың икеһе менән дә яҡшы мөнәсәбәттә, һәм уларҙың икеһен дә яҡын күрә. Бәхәстә булған күршеләрен йәллләй, улар өсөн ифрат та борсола, нисек итеп дуҫтарын яраштырырға берәй ысул эҙләй торғас, уның башына бер уй килә:

- Күрше, яңыраҡ Ғәлиәхмәт ҡорҙаш менән һөйләшеп ултырғайным, һинең менән ни өсөндөр бәхәскә ингәненә шундай ныҡ үкенә, нисек итеп һинән ғәфү үтенергә белмәй. "Эй, уңайһыҙланам Мөхтәр күршенән, минең өсөн уның менән һөйләшеп ҡара әле", тип әйтте Ғәлиәхмәт... Үҙе һинең фәлән-фәлән эштәреңде хатта маҡтап та алды... - тип һүҙ араһында әйтеп ебәрә был. Халыҡса әйткәндә, Мөхтәрҙең "һалпы яғына һалам ҡыҫтырыштырып", уның күңеленә уйланыуға "аҙыҡ" бирә. Оҙаҡҡа һуҙмай, икенсе күршеһенә барып, шундай уҡ "орлоҡ" сәсеп, "алдаштырып-һолдаштырып, бер аҙ ғына һуған тураштырып", Ғәлиәхмәттең йөрәгенә лә бер аҙ "орлоҡ" сәсеп китә. Унан инде башҡаса һис бер кемгә лә был хаҡта өндәшмәй генә үҙенең "боҙоҡлоғоноң" нәтижәһен көтә башлай. Ғәлиәхмәт бер көн иртән көтөү ҡыуғанда Мөхтәргә хатта сәләм биреп тә үтә. Икенсе тапҡыр Мөхтәр күрше тегеһен алдараҡ сәләмләп өлгөрөргә ашыға!.. Күпмелер ваҡыт выждандары ғазапланып көн күргән был ике күрше, бынан ары, әлбиттә, күңелдәре бушанып, тыштан әйтешмәһәләр ҙә, эстән генә бер-береһен ғәфү итә... Айырылышҡан ир менән ҡатынды ла шундай уҡ ысул менән яраштырыу мөмкин. Ике кешенең татыулашыуына булышлыҡ итеү, әлбиттә, бик сауаплы ғәмәл булғанғалыр, Аллаһ рәсүле ғәләйһиссәләм, ошондай осраҡта хатта бер аҙ алдаштырыуҙы ла рөхсәт иткән.

Алдау тыйылмаған икенсе осраҡ - үҙеңдең хәләл ефетеңә, бәғзе мәлдәрҙә ысынбарлыҡҡа әллә ни тап килеп етеңкерәмәгән яҡшы һүҙҙәр, урыҫса әйткәндә, комплименттар әйтеү. Быға, әлбиттә, бер ниндәй миҫал килтермәгәндә лә була. Быны беҙ, айырыуса ир-аттар һәр кемебеҙ ифрат та яҡшы беләбеҙ. "Был донъяла һинән дә матурыраҡ ҡатын юҡтыр, Ғәлимә, йәнем", йә иһә, "Русланым, һин ысынбарлыҡта торғаның менән арыҫлан да баһа!", йә булмаһа, "Сөнәғәт, һин бит - аҡыл эйәһе!" Был ысул, әлбиттә, ир менән ҡатындың бер-береһе менән татыу йәшәүенә этәргес булып тора.

Өсөнсөнән, Бәйғәмбәр (с.ғ.с.), һуғыш ҡырында дошмандарынды алдауҙы ла, әлбиттә, рөхсәт иткән. Үлән төҫөндәге маскировкалы хәрби кейемдән алып, һәр төрлө хәйлә ярҙамында атҡарылған маневрҙар, дошмандар ишетһен, тип ебәрелгән "утка", йәғни дезинформация кеүек һанһыҙ ысулдарҙы һанап китеүҙең хатта кәрәге лә юҡтыр. Был хаҡта әрме хеҙмәтендә булған, хатта булмаған кешеләр ҙә бик яҡшы белә.

Бына ошоларҙан башҡа осраҡтарҙа һәр төрлө алдау - хәрәм. Хатта бала кешене "Кил, балам, кәнфит бирәм", тип янына саҡырһаң, уға вәғәҙә ителгән кәнфитте мотлаҡ бирергә бурыслыһың. Тик тормош тигән нәмә ифрат та ҡатмарлы, төрлө мәлдәр була. Ҡайһы бер осраҡта нимәнелер кемгәлер әйтергә ярамай. Бындай ваҡыттарҙа, әлбиттә, ана шул "ярамаған" нәмәне әйтмәй генә ҡалдырыу хәйерле.

Уйлап сығарып, "Бына шулай булған хәл", тип һөйләү - гонаһ икәнен беләйек. Ә бына Аллаһы Тәғәлә хаҡында, Уның китабы, фәрештәләре, бәйғәмбәрҙәре турында, ғөмүмән, дингә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә Ҡөрьәндә лә, Бәйғәмбәр хәҙистәрендә лә булмаған нәмәләр, үҙеңдең шәхси фекереңә генә таянып ниҙер сығарып һөйләү айырыуса ҡурҡыныс ялған һәм ололарҙан-оло гонаһ! "Бәйғәмбәр шулай, йә былай тип әйткән", тигән мәғлүмәттәрҙе сәхих хәҙистәр йыйынтығынан үҙең уҡып, йә мәҙрәсә белеме булған имамдарҙан ишетеп кенә һүҙ алып барыу мөмкин. "Минең хаҡта ялған һөйләгән кешенең гонаһы башҡа кеше хаҡында һөйләгән ише генә түгел. Ундай кеше Ахирәттә Утта (тамуҡ уты күҙ уңында тотола) буласаҡ", тип әйткән рәсүлуллаһ.

Үкенескә, бәғзе кешеләр Раббыбыҙ тураһында, йә иһә Уның илсеһе хаҡында һәр төрлө уйҙырма хикәйәттәр, хатта көләмәстәр һөйләүҙән дә тартынмай. Нисек кенә көлкөлө тойолһа ла, нисек кенә башҡаларҙы көлдөргөң килһә лә, бындай гонаһлы эштән тыйылып тороу мотлаҡ. Ҡиәмәт көнөндә һәммәбеҙ ҙә ҡылған эшебеҙ өсөн генә түгел, ә һәр бер әйткән һүҙебеҙ өсөн хисап бирәсәкбеҙ. "Ә уйыбыҙ өсөн?" тип һорай бәғзеләр. Күңелгә килгән уй өсөн генә кеше яуаплы түгел, сөнки әҙәм башына ниндәй генә уйҙар килмәүе мөмкин... Әлеге мәкерле шайтан кешенең аңына һәр төрлө үәсүәсә ҡылырға йәтеш йөрөй. Ул ишеттермәй генә кешенең күңеленә "шыбырлай" торған һәләткә лә эйә. Бына шуның өсөн дә уйыбыҙға баш булырға тырышырға тейешбеҙ. Ниндәйҙер берәй шундайыраҡ анекдот, йә иһә ғәйбәт булырҙай хәбәр ҡасандыр ишеткән булһаң да, иҫеңә төшөү менән "әғүҙубилләһи минәшшәйтәниррәжим" тип уны онотоу яйын ҡарау кәрәк. Ә шул насар хәбәр ауыҙыңдан сыҡты икән, һин үҙең уйлап сығармаған булыуға ла ҡарамаҫтан, был мәғлүмәт һинең ғәмәл дәфтәреңә яҙыла. Был хаҡта мотлаҡ ҡасандыр яуап бирергә һәм уның язаһын алырға тура киләсәк. Бына нимә өсөн, алдау - бик насар нәмә. Ялған шаһитлыҡ ҡылыуҙың да Аллаһ Тәғәләгә тиңдәш биреү һәм ата-әсәне ҡәҙер итмәү һымаҡ иң оло гонаһтарға һаналғанлығы хаҡында Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән хәҙис бар.

Кемделер ҡурҡытыу юлы менән дөрөҫ булмаған мәғлүмәтте һөйләргә мәжбүр итеү осраҡтары ла булыуы мөмкин. Бындай мәлдәрҙең, әлбиттә, үҙенсәлектәре бар. Мәжбүри рәүештәге алдашыу тураһындағы мәғлүмәтте махсус белемле ҡазыйҙар Ҡөрьән һәм Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) сөннәтенә таянып яуап бирә ала. Бына ошо хаҡта ине әйтер һүҙем. Аллаһы Тәғәлә һәммәләребеҙгә тик хаҡ һүҙҙәр генә һөйләп ғүмер кисерергә насип ҡылһын.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# АТАЙ-ОЛАТАЙҘАРЫБЫҘ...

## киләсәкте алдан күргән

**Күренекле шағир, яҙыусы, драматург һәм публицист, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәзим Шафиҡов 2007 йылда, Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығын байрам иткән көндәрҙә алып килгәйне редакциябыҙға ошо мәҡәләһен. Ошо тарихи датаны, уның әһәмиәтен тағы бер тапҡыр күҙҙән үткәрәйек әле, тип, Ғәзим Ғәзиз улының яҙмаһын ҡабатлап баҫырға булдыҡ.**




### Ҡушылыумы, берләшеүме?

Әгәр ҙә беҙ 450 йыл элек Рус дәүләтенә ҡушылмаған булһаҡ, бөгөн беҙҙе нимә көтөр ине, тигән һорауҙы хәҙер йыш бирәләр. Был һорауға яуап биреү өсөн, иң тәүҙә, беҙҙең халыҡ өсөн шул осорҙағы тарихи хәлде күҙаллау мөһимдер. Ул саҡтағы Башҡортостан, башҡорт халҡы Себер, Нуғай, Әстрхан, Ҡазан ханлыҡтары уратыуында тороп ҡала. Әлбиттә, иге-сиге булмаған далалары, урмандары, тауҙары, йылғалары йәйрәп ятҡан башҡорт ерено был ханлыҡтар, майлы ҡалъяға ынтылғандай, тамшанып йәшәгән. Бер туҡтауһыҙ теге яҡтан да, был яҡтан да башҡорт еренә һөжүм иткәндәр. Башҡорттар ғүмер-ғүмергә уларға ҡаршы һуғышҡан. Тап шундай мәлдә Рус дәүләтенә ҡушылыу идеяһы тыуған да инде. Дөрөҫөрәге, иң тәүҙә Рус батшаһы Иван Грозный үҙе илселәрен Башҡорт иленә ебәреп, ҡушылыу шарттарын аңлатҡан. Беҙ бына ошо тарихи фактты һәр саҡ күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Юғиһә, тарих бер яҡлы ғына аңлатыла: йәғни, башҡорт бейҙәре Аҡ батшаға баш һалырға Мәскәүгә үҙҙәре барған, тигән фекер нығынған беҙҙә. Тәүге аҙым Мәскәү яғынан эшләнгән дә инде. Ҡазан ханлығын яулаған саҡта Рус батшалығы башҡорттарҙың хәрби ғәйрәтенә таң ҡала. Был хаҡта бик күп тарихи китаптарҙа яҙыла. Мәскәүҙең илселәрен Башҡорт ере ихлас ҡабул итә, ҡунаҡ итеп оҙата. Тәүгеләрҙән булып 1555 йылда Мәскәүгә меңле ырыуы башҡорттары бара. Ун бер кеше була улар. Уларҙың исемдәре билдәле түгел. Артабан инде меңлеләргә юрматылар, бөрйәндәр, үҫәргәндәр, ҡыпсаҡтар һәм тамъяндар ҡушыла. 1557 йылға инде башҡорттарҙың күп кенә ырыуҙары Рус дәүләтенә ҡушылыу идеяһын яҡлай. Рус батшалығы башҡорттарға символик яһаҡ түләү, кәрәк саҡта ғәскәри бурыс үтәү шартын ҡуя. Башҡорттар иһә ерҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғын нығыта. Бер яҡтан ҡарағанда, башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуы ике яҡлы килешеү нигеҙендә башҡарыла. Бәлки, бында ҡушылыу түгел, бер ни тиклем кимәлдә берләшеү, бер ҡорға инеү хаҡында һүҙ алып барырға ла мөмкин булыр ине. Әммә барыһы ла шыма ғына барған тип әйтеү ҙә дөрөҫлөккә тура килеп бөтмәҫ. Был процесс бик оҙаҡ дауам итә, Урал тауҙарында йәшәүсе ҡайһы бер ырыуҙар оҙаҡ ваҡыт ҡушылыуға ҡаршы көрәшә.

Ни өсөн Ислам динен тотоусы мосолман ҡәүемдәре һәм халыҡтары солғанышында йәшәүсе башҡорттар күршеһендәге ҡәрҙәш халыҡ менән берләшеүҙән ҡасып, бөтөнләй сит диндәге Рус дәүләте менән ҡушылыуҙы хуп күргән һуң? Белеүебеҙсә, ул саҡта "Ҡаҙан башҡорттары" тигән төшөнсә лә булған. Улар ниндәй телдә һөйләшкән, артабан ҡайҙа булған? Әлбиттә, улар бер ҡайҙа ла китмәгән, татарҙар тарафынан йотолған. Атай-олатайҙарыбыҙҙың зирәклеге ошонда күренә лә инде. Улар халҡыбыҙҙы башҡаларҙан йотолоуҙан һаҡлауҙың тик ошо ғына юлын иң ҡулайы, берҙән-бер юлы тип күргән, тимәк. Славян телендә һөйләшеүсе, христиан дине тотоусы дәүләтселек яғынан туранан-тура бындай ҡурҡыныстың янамауын улар тәрән аңлаған тип фаразларға ла була. Яугирлыҡ сифаттары буйынса һәм ғөрөф-ғәҙәте яғынан беҙгә яҡын торған мишәрҙәрҙең яҙмышын килтереү ошо урында бик урынлы булыр. Рус дәүләтенә ҡушылмаған булһаҡ, беҙҙе лә мишәрҙәрҙең яҙмышы көтөүе бик ихтимал булған, тип уйлайым. Нуғайҙар ҙа беҙгә бик яҡын халыҡ булған. Уларҙың бер өлөшө башҡорттар тарафынан йотола хатта. Әммә бер генә башҡорттоң да нуғай булғыһы килмәгән.

### Үҙ иркең менән...

XVI быуатта Рус дәүләтенә ҡушылырҙан алда беҙҙең уратыуҙа йәшәүсе нуғай, ҡырым, себер ҡәүемдәре Рус дәүләте тарафынан яулана һәм был саҡта инде батшалыҡ башҡорттарға ғәскәри көс булараҡ таяна. Алдараҡ Ҡаҙан ханлығы яулана. Татарҙарҙан тыш, нуғайҙар, ҡырымдар һәм себерҙәр һуңынан халыҡ һәм милләт булараҡ үҫешә алмай, бер нисә өлөшкә бүленеп, башҡа ҡәүемдәр, дәүләттәр тарафынан йотола. Заманында ханлыҡтары һәм дәүләтселектәре булған был ҡәүемдәрҙе беҙ бөгөн айырым халыҡ тип белмәйбеҙ. Ошо урында атай-олатайҙарыбыҙҙың тағы бер зирәклеген билдәләү кәрәктер. Үҙ иркең менән ҡушылыу һәм яуланыу араһында айырма ҙур шул. Яулаусы, баҫып алыусы һәр саҡ яуланған яҡҡа үҙенең дине, тел һәм ер буйынса ҡәтғи шарттарын ҡуя һәм уларҙың мотлаҡ үтәлешен талап итә. Йәғни яуланған территория, халыҡ тулыһынса яулаусының мөлкәт-даирәһенә әүерелә. Ошо урында башҡорттарҙың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуының тағы бер тарихи сәбәбен асыҡларға булалыр, минеңсә. Монгол-татарҙарҙы, даланың башҡа бәшәнәк кеүек ҙур ғына ҡәүемдәрен юҡ иткән урыҫтарҙың яҡын йылдарҙа ҡеүәтле дәүләт булып аяҡҡа баҫасағын һәм хәрби машинаһын Уралға һәм Себергә табан йүнәлтерен алдан белгәндер ата-олатайҙар.

Рус дәүләте менән башҡорттарҙың үҙ-ара Килешеүе хаҡында документ булғанмылыр-юҡмылыр, әммә башҡорт бейҙәренә, тархандарына биргән грамоталарҙа үҙ-ара килешеү мөнәсәбәте барыбер сағыла. Был иң тәүҙә ергә хоҡуҡ мәсьәләләренә барып тоташа.

**(Дауамы. Башы 19-сы һанда).**

*ФОТОЛА - ТАРИХ*

# БАШҠОРТ АТЛЫЛАРЫ

**Башҡортостандың Милли архивында тәүге тапҡыр 112-се Башҡорт атлылары дивизияһы штабының Брянск фронтындағы фотоһүрәте баҫылып сыҡты.**

Архивтан хәбәр итеүҙәренсә, фотоһүрәт йәй төшөрөлгән. Аҡлы-ҡаралы фотоһүрәттә дивизия командиры, полковник Миңлеғәле Шайморатов уртала, һулдан өсөнсө, тора. Шулай уҡ фотоһүрәттә штаб комиссары Дәүләт Аритҡолов, штаб начальнигы Иван Голенев, батальон комиссары Мөбәрәк Нәзиров һәм дәүләт хәүефһеҙлеге майоры Михаил Кузнев. "Был фотоһүрәт тәүге тапҡыр интернетта баҫыла. Архивта тиҙҙән баҫылып сығасаҡ тағы ла бик күп фотоһүрәттәр бар. Әйткәндәй, әлеге ваҡытта архив белгестәре Милли Башҡорт атлылары дивизияһынының ойошторолоуына 85 йыл тулыуға арналған фотоальбом өҫтөндә эшләй", - тип белдерҙе архив директоры урынбаҫары Гөлназ Кәлимуллина.



*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Йөндән таҙартылған һәм тарттырып киптерелгән һыйыр һәм йылҡы тиреһе ыҫтыҡ тип аталған махсус соҡорҙарҙа ыҫланланған. Ыҫтыҡ та ике өлөштән: ыҫтыҡ һәм ут яндырыла торған соҡорҙан торған. Был ике өлөштө улаҡ тоташтырып тора. Тире ике аҙна ыҫланған, бынан һуң уның һыу үткәрмәүсәнлеге артҡан. Ыҫтыҡтар башлыса тире һауыт-һаба яһау өсөн ҡулланылған. Бындай һауыттарҙы сей тиренән тегеп, кәрәкле форма килеп сыҡһын өсөн көл тултырғандар һәм киптергәндәр. Һауыт кипкәс, көлдө ҡағып төшөргәндәр һәм тағы ла елдә яҡшылап киптергәндәр. Бынан һуң ыҫлаҡта ыҫлап, ат ялы менән ныҡлап тегеп ҡуйғандар.

Һауыт-һаба тегеү өсөн йылҡы тиреһенең бөтөн өлөшө лә ҡулланылған. Ҡымыҙ өсөн тәғәйенләнгән һаба тиренең кәүҙә өлөшөнән алынған. Ул ҙур ғына булған һәм 8 биҙрәнән ашыу ҡымыҙҙы һыйҙырған. Тиренең ошо уҡ өлөшөнән көрәгә тегелгән, ҡымыҙҙы табынға көрәгәлә биргәндәр **(һүрәт)**. Баш тиреһенән башкүнәк яһағандар, унда шулай уҡ ҡымыҙ һалынған. Ҡалған һауыттар ҡымыҙ йөрөтөү өсөн ҡулланылған. Алғы аяҡтар тиреһенән ҡуллыҡ, ҡулас, муртай, артҡы аяҡ тиреһенән бот-





лоҡ, дөмбәй тегелгән (**һүрәт** *а, б, е* - ҡуллыҡ һәм муртай, *в, г* - башкүнәк, *д* - турһыҡ, *ж, з* - ботлоҡ һәм дөмбәй). XIX быуаттың уртаһында ҡайһы бер хайуандарҙың тиреһен тотошлай ҡулланып, һауыт яһағандар. Мәҫәлән, быҙау тиреһенән яһалған һауыт турһыҡ тип аталған. Көрәгә һәм башкүнәктең формаһы бер үк, тик уларҙың беренсеһе икенсеһенә ҡарағанда ҙур булған. Күсеп йөрөгәндә был һауыттарҙың ауыҙы йомарланған үлән менән ҡаплап ҡуйылған. Яңы ғына яһалған һауыттарҙы, төтөн тәме бөтһөн өсөн, әсегән һөт ҡойоп, ултыртып ҡуйғандар. Тире һауыттар башлыса ҡымыҙ өсөн ҡулланылған һәм XX быуаттың башында ул Урал аръяғы ҡатайҙары, ҡарабарын-табындар, күбәләк-теләүҙәр, тамъян-түңгәүер, бөрйән, тамъян һәм көньяҡ үҫәргәндәрҙә күберәк осраған.

Һауыт-һабанан тыш, тиренән артмаҡ, ат сбруйы, аяҡ кейеме, юл муҡсаһы беркетелгән ҡайыштар - ҡалта, ҡалтырға һәм башҡа әйберҙәр яһалған. Уларҙы тегеү өсөн ат ялы ҡулланылған, ялдан шулай уҡ арҡан ишкәндәр.

**(Дауамы бар).**

*✓ Ҡайһы саҡта студенттарға бирелгән эштәрҙе тикшерә башлаһаң, яҙылғандарҙың айышына ла төшөнөрлөк булмай: тегенән-бынан алынған мәғлүмәттәр һалма рәүештә ялғанып, яҙма ҡорамаға әйләнә.*



# ТОРА-БАРА

## рус телле булып ҡалыу

**Бөгөнгө әңгәмәбеҙҙә Өфө фән һәм технологиялар университетының Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты мөғәллимдәре - башҡорт әҙәбиәте һәм ватан һүҙ сәнғәте кафедраһы мөдире, филология фәндәре докторы, профессор, РФ мәғариф өлкәһенең маҡтаулы хеҙмәткәре, БР-ҙың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре Гөлфирә Ниғәмәтйән ҡыҙы ГӘРӘЕВА һәм журналистика кафедраһы доценты, филология фәндәре кандидаты, БР-ҙың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре Азамат Абдрахман улы ҒӘЛЛӘМОВ ҡатнашты.**

**▸ Әңгәмәбеҙ башында үҙегеҙҙе уҡыусыларыбыҙ менән таныштырып китегеҙ әле.**

**Азамат Ғәлләмов:** Мин Сибай ҡалаһында тыуғанмын, 1958 йылда атайымды, Абдрахман Әбдрәхим улын Өфөгә, Башҡортостандың уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтына эшкә саҡыралар, шуға күрә бала сағым баш ҡалабыҙҙа үтте. Нәҫел тамырҙарыбыҙға килгәндә, ата-бабаларыбыҙ араһында бөрйән, ҡыпсаҡ ырыуҙары вәкилдәре булған, әсәйем яғынан олатайым - түңгәүер ырыуынан.

**Гөлфирә Гәрәева:** Учалы районының Илтабан ауылында тыуып үҫкәнмен. Инәйем яғынан ата-бабаларыбыҙ хәҙерге Силәбе өлкәһенең Бәгерәк йылғаһы буйын төйәк иткән табын башҡорттары була. Учалы районы башҡорттарының күпселеге ҡара табындарға ҡараһа ла, тыуған яғыбыҙ тарихын бик яҡшы белгән Спартак Ильясов ағайыбыҙ ғаиләбеҙҙең барын табындар нәҫеленән булыуы хаҡында әйткәйне.

**▸ Һеҙ филолог һөнәрен һайлағанһығыҙ, быны билдәле бер сәбәптәре барҙыр?**

**Азамат Ғәлләмов:** Һөнәр һайлауым үҙенән-үҙе килеп сыҡты тип әйтер инем. Әсәйем буйынса олатайым Шакир Мостафин - география һәм тарих уҡытыусыһы, мәрйә өләсәйем Анастасия Сидельникова һәм әсәйем Суфия Мостафина - рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары. Атайым Абдрахман Ғәлләмов башҡорт теле уҡытыусыһы, күренекле методист, ул Башҡортостанда "Әлифба" авторы булараҡ та танылыу тапҡан шәхес. Шуға күрә үҙебеҙҙең университеттың филология факультетын һайлауым бер ҙә ғәжәп түгел.

**▸ Азамат Абдрахман улы, һеҙ башҡортса таҙа һөйләшәһегеҙ, ғаиләгеҙҙә башҡортса аралашҡанһығыҙҙыр?**

**Азамат Ғәлләмов:** Әлбиттә, шулай. Әммә бер үк ваҡытта рус телен белеү зарурлығы ла булды. Өфөнөң 107-се мәктәбендә 6 йыл уҡығас ҡына яңы асылған 20-се башҡорт мәктәбенә күстем. Шуға тиклем Өфө башҡорттары балаларына туған телен өйрәнеү мөмкинлеге булманы. Мин уҡыған кластағы 25 башҡорт балаһынан 5-6-һының ғына туған телендә һөйләшә белеүе ошоға дәлил.

**Гөлфирә Гәрәева:** Ул заман өсөн ошо 5-6 баланың да туған телен белеүе бик фәһемле факт, тимәк, уларҙың ата-әсәләре балаларын туған теленә үҙҙәре өйрәтә алған.

**Азамат Ғәлләмов:** Уныһы шулай, әммә бында олатай-өләсәйҙәрҙең йоғонтоһон иҫәпкә алырға кәрәк. Улар ауылдарҙа йәшәй, йәйге каникулдар башланыу менән беҙҙе ауылға оҙаталар. Ул саҡта Баймаҡтан Өфөгә бәләкәй самолет та оса ине, август аҙағында ғына атаәсә йортона ҡайтып етәбеҙ. Ауылда ололар ҙа, балалар ҙа тик башҡортса ғына һөйләшкәс, туған телебеҙҙе яҡшы ғына үҙләштерә алғанбыҙ.

**Гөлфирә Гәрәева:** Мин тәүҙә тыуған ауылымда башланғыс мәктәптә, һуңынан Ҡунаҡбай ауылы урта мәктәбендә уҡыным. Уны тамамлағас, БДУ-ның филология факультетына юлландым. Ул саҡта факультеттың башҡорт-рус һәм татар-рус бүлектәренә берәр төркөм, рус бүлегенә 3 төркөм ҡабул ителде.

**▸ Университет уҡытыусыларынан студенттарҙың иҫендә ҡалған, улар өсөн бик йоғонтоло булған остаздар була. Үҙегеҙҙе уҡытҡандарҙан кемдәрҙе иҫкә алыр инегеҙ?**

**Азамат Ғәлләмов:** Мин филфактың рус бүлегендә уҡыным, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштерҙем.



"Тел белеменә инеш" тигән фән буйынса Нина Дмитриевна Ғарипованың, "Славян филологияһына инеш" буйынса Юлия Петровна Чумакованың, шулай уҡ Давид Семенович Гутмандың лекциялары бигерәк тә ҡыҙыҡлы булып хәтерҙә ҡалды. Ә бына филфактың тере легендаһы Лев Григорьевич Барагты тыңлауы, бигерәк тә уның артынан конспект яҙыуы ауырыраҡ була торғайны: лекцияларында уның үҙе өсөн әһәмиәтле булған лирик сигенеүҙәре йыш ҡабатлана торғайны.

**Гөлфирә Гәрәева:** Мин университетта 1977-1982 йылдарҙа уҡыным. Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың лекцияларын бигерәк тә яратып тыңланыҡ, курсташтарыбыҙ менән осрашҡан саҡта уны хөрмәтләп иҫкә алабыҙ. Оло быуын профессорҙарынан Әхнәф Нурый улы Кирәев (Кирәй Мәргән) бик олпат шәхес булып иҫтә ҡалған. Ул аудиторияға әкрен генә атлап килеп инә, ҡабаланмай ғына ҙур портфелен өҫтәлгә ҡуя, яулыҡ ҙурлығындай ҡульяулығы менән тирләп киткән битен, танауын иплəп кенә һөртөп алғас, лекцияһын башлап ебәрә. Мәрхүм ғалимыбыҙ Роберт Нурмөхәмәт улы Байымов Кирәй Мәргәнден, башҡорт фольклористикаһының иң күренекле белгесе булыуына ҡарамаҫтан, етәкселек тарафынан тейешенсә баһаланмауы хаҡында әйтә торғайны. Күрәһең, фронтовик-яҙыусы, олуғ ғалим түрәләргә яҡшатланып бармағандыр. Фольклорҙы уның әлегә тиклем бик ҡиммәтле булған "Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары" тигән китабы буйынса ихлас өйрәндек.

Ә Ғәлләмов Абдрахман ағайыбыҙҙан башҡорт телен уҡытыу методикаһы буйынса һабаҡтар алдыҡ. Уның беҙгә, буласаҡ уҡытыусыларға, киҫәтеп әйткән һүҙҙәре әле лә иҫемдә: "Мәктәп уҡытыусылары шәл ябынып, быйма кейеп, дөп-дөп атлап йөрөйҙәр, һеҙ улай итмәгеҙ!" Ул уҡытыусының эстән дә, тыштан да матур итеп күрергә теләгән инде. Факультет деканы Марат Вәли улы Зәйнуллин, кафедра мөдире Нәғим Хажғәле улы Ишбулатов, Кирәй Мәргәндән һуң башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы мөдире булып ҡалған Роберт Байымов бик көслө уҡытыусылар ине. Яҙыусы һәм ғалим, университет проректоры Миҙхәт Фазлый улы Ғәйнуллин бик абруйлы, һоҡланғыс шәхес булды. Йәшерәк быуын уҡытыусыларынан факультет деканы урынбаҫары Миҙхәт Әхмәтхан улы Мәмбәтов та башҡорт студенттарына ҡарата бик иғтибарлы булды.

**▸ Уҙған быуатта юғары уҡыу йортонда төп ике белем сығанағы - китап һәм уҡытыусы үҙе, техник мөмкинлектәр юҡҡа иҫәп. Шуға күрә буласаҡ кадрҙарҙың профессиональ кимәле иң элгәре уларҙы уҡытҡан остаздары менән бәйле булыуын билдәләп үтергә кәрәктер...**

**Гөлфирә Гәрәева:** Тап шулай. Уҡытыусыларыбыҙ беҙҙең аңыбыҙға белем һәм ғилемдең үҙебеҙ һайлаған һөнәр өсөн ни тиклем мөһим булыуын һеңдерә алған. Филология факультетын тамамлағандар араһында күренекле шәхес булып үҫеп киткәндәр бик күп бит ул: ғалимдар, яҙыусылар, шағирҙар, журналистар, мәғариф алдынғылары, атҡаҙанған уҡытыусылар, билдәле етәкселәр. Заманында кешеләрҙе белеменә һәм эшмәкәрлегенә ҡарап үҫтерҙеләр, һәм был етәксе органдар өсөн төп принцип булды.

**▸ Совет заманы студенттары менән хәҙерге уҡыусы йәштәрҙе сағыштырһаҡ, ниндәй оҡшашлыҡ йә иһә айырмалар булыуын билдәләр инегеҙ?**

**Азамат Ғәлләмов:** Беҙҙең йәшлегебеҙ осоронда телевизор ҡарау модала булды, беҙҙе хатта, уның менән мауығып, китапты аҙ уҡыуҙа ғәйепләй торғайнылар. Заманалар үҙгәрҙе, хәҙерге йәштәр интернетта, социаль селтәрҙәрҙә ултыра, төрлө мессенджерҙар менән мауыға, шуға беҙ ҙә уларҙы китап уҡымауҙары өсөн әрләйбеҙ. Был яҡтан ҡарағанда, әллә ниндәй айырма юҡ та һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта беҙҙән үҙаллы уҡый, эшләй белеү талап ителде. Китапханаға барһаң, кәрәкле китапты эҙләйһең, уҡыйһың, конспект яҙаһың. Хәҙер бит интернет заманы, студенттар шунан әҙер материалдарҙы ҡулланырға әүәҫ. Һуңғы осорҙа яһалма интеллектты ла үҙҙәренә ярҙамсы итеп ала беләләр.

**Гөлфирә Гәрәева:** Ҡайһы саҡта студенттарға бирелгән эштәрҙе тикшерә башлаһаң, яҙылғандарҙың айышына ла төшөнөрлөк булмай: тегенән-бынан алынған мәғлүмәттәр һалма рәүештә ялғанып, яҙма ҡорамаға әйләнә. "Интернеттан алынған сүп-сарҙы тапшырып та тормағыҙ, барыбер ҡабул итмәйәсәкмен", - тип киҫәтергә тура килә. Бер яҡтан ҡараһаң, хәҙерге студенттар беҙгә ҡарағанда йылдамыраҡ, кинерәк ҡарашлы булһа, яңы технологиялар менән эш итергә тиҙерәк өйрәнә алһа, икенсе яҡтан хөртөрәк кеүек тә тойола, сөнки уларҙа үҙаллы фекер йөрөтөү, һығымталар эшләй белеү беҙҙең саҡтағынан ҡайтышыраҡ. Шулай ҙа ғилми сығанаҡтарҙы өйрәнеүҙең ни тиклем мөһим булыуын улар ҙа аңлай. Бынан ун йылдар самаһы элегерәк, смартфондар, интернетлы телефондар булмаған саҡта студенттар уҡырға ноутбук менән йөрөй башланы. "Ноутбуктан мәғлүмәт алыуымы, әллә китаптарҙан белем эҙләү ҡыҙыҡлыраҡмы?" - тип һорау бирәм. Студенттарым китап менән эшләүҙең күңелгә яҡынраҡ булыуын билдерҙе шул саҡта. Йәшәйешебеҙгә ниндәй генә яңы мәғлүмәт технологиялары инмәһен, китап барыбер иң мөһим белем сығанағы булып ҡаласаҡ, шуға күрә ҡағыҙға баҫылған китаптың ғүмере бөтмәйәсәк.

**▸ 20-30 йылға алғараҡ күҙ һала алһаҡ, хәҙерге студенттар араһынан да күренекле шәхестәр, ғалимдар, яҙыусылар, журналистар сығырына ышаныс бармы?**

**Азамат Ғәлләмов:** Әлбиттә, бар. Һәр бер осорҙоң үҙенә күрә һәләтле студенттары, тырышып уҡығандары була. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, бик һәләтле һәм уртаса уҡығандар араһындағы нисбәт шул килеш ҡала: беҙ университетта уҡыған саҡта 100 студенттың ете-һигеҙе алдынғыраҡ булһа, хәҙер ҙә шулай.

**Гөлфирә Гәрәева:** Олораҡ быуын кешеләре үҙҙәренең йәш сағын күркәмерәк итеп иҫләй, хәҙерге заман йәштәрен йыш ҡына тәнҡитләргә лә ярата. Элек-электән шулай булған, ә тормош үҙгәрә бара, барыбер алға китеш һиҙелә. Шул уҡ башҡорт журналистикаһын ҡараһаҡ, ниндәй генә ауыр замандар булмаһын, ул бар һәм йәшәйәсәк. Йыл һайын уҡырға инеүселәр араһында һәләтле студенттар табылып тора, ижадҡа ынтылыусылар ҙа бар беҙҙә. Тик шуныһы, ҡайһы берәүҙәр, уҡыуҙарын тамамлағас, ижади үсеш юлынан ситләшеп тә китә.

**Азамат Ғәлләмов:** Беҙҙең филфакты мультиплатформа тип нарыҡлап була: беҙҙән филологтар ғына түгел, артистар, йырсылар, бейеүселәр һәм башҡа ижади һөнәр эйәләре лә сыға.

**Гөлфирә Гәрәева:** Уныһы ла кәрәк, әммә тормошта тик йырлап-бейеп кенә йәшәп булмай. Программалар буйынса ҡаралған белемдәрҙең студенттар тарафынан яҡшы үҙләштерелеүе мотлаҡ. Был яҡтан талапсанлыҡты кәметмәйбеҙ. Ижадҡа килгәндә, факультетыбыҙҙа күп йылдар дауамында студенттарҙың "Шоңҡар" әҙәби түңәрәге эшләп килде. Күренекле уҡытыусы-ғалимдар, яҙыусылар Мирас Иҙелбаев, Әхмәт Сөләймәнов, Зәйтүнә Шәрипова, Аҫылғужа Баһуманов кеүек ижади шәхестәрҙең фатихаһы менән әҙәбиәткә һәм журналистикаға тиҫтәләгән, йөҙәрләгән йәш ижадсылар килде. "Шоңҡар" бөгөн дә әүҙем эшләй, төрлө әҙәби саралар, осрашыуҙар ойошторолоп тора. Студенттарҙың ошо әҙәби берекмәһен бөгөн йәш шағирә Зарина Бағышаева етәкләй.

**▸ Йәшерен-батырын түгел, бөгөнгө ваҡытлы матбуғат баҫмаларындағы журналистарҙың күбеһе оло йәштәге кешеләр. Һеҙҙең факультетты тамамлап сыҡҡан йәш белгестәр гәзит-журналдарға эшкә килергә ашҡынып тормай...**

**Азамат Ғәлләмов:** Бының төп сәбәбе - журналистарҙың эш хаҡының түбән булыуында. Эшләп тапҡан аҡсаң йәшәү өсөн тейешле шарттар булдырыуға етмәй икән, йәш кеше былай эште һайламаясаҡ.

**Гөлфирә Гәрәева:** М. Акмулла исемендәге Башҡорт педагогия университетының һәм беҙҙең университетыбыҙҙың филоло-

***✓ Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ икенсе бер милләт балаларына уҡытабыҙ, уларға ла грамматика ҡағиҙәләрен тылҡыйбыҙ, ә уның урынына ябай ғына тормош ситуациялары буйынса һөйләмдәр төҙөргә өйрәтергә кәрәк бит.***

# БАШҠОРТТАРҒА...
## хәүефе янамаймы?

гия факультеттарына ауыл балалары уҡырға инә. Уҡыуҙарын тамамлаған йәш белгестәрҙең эш хаҡы бик түбән. Уларҙың ҡалала үҙ фатирҙары юҡ. Шулай булғас, улар ҡалала йәшәү өсөн башҡа сығымдарҙы, төшөмләрәк урындарҙы һайлай.

**Совет осоронда башҡорт мөхитендә ике теллелек өҫтөнлөк итте. Мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡыттылар, рус теленә лә өйрәттеләр. Әлеге ваҡытта башҡортса аралашыу кәмей барып, рус теле өҫтөнлөк итә башланы. Тора-бара башҡорттарға бер телле - рус телле булып ҡалыу хәүефе янамаймы?**

**Гөлфирә Гәрәева:** Дөрөҫөн әйткәндә, элекке осорҙа уҡыусыларҙың рус телен белеүе мәктәптәрҙә уның нисек уҡытылыуы менән бәйле булды. 10 йыл уҡып та, рус телен йүнләп белмәй сығыусылар була торғайны. Ә туған телебеҙҙе бала саҡтан уҡ үҙенән-үҙе өйрәнә инек. Хәҙер киреһенсә килеп сыға, сөнки ғаиләләрҙә балалар менән русса аралашыу киң таралып китте. Һеҙ әйткән хәүефтән ҡотолоу юлы бер - ата-әсәләр ғаиләләрендә балалары менән тик башҡорт телендә генә һөйләшергә тейеш. Бындай ғаиләләр бар ул, беҙгә уларҙы өлгө итеп ҡуйыу фарыз.

**Азамат Ғәлләмов:** 90-сы йылдарҙа байтаҡ ҡына башҡорт зыялылары туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу идеяһын күтәреп сыҡты. Улар башҡорт мәктәптәрендә предметтарҙы туған телебеҙҙә уҡытыуҙы талап итте, сөнки 50-се - 60-сы йылдарҙа мәктәптәребеҙҙә шул уҡ математика, физика, химия предметтары башҡортса уҡытылған. Әммә уларҙың һүҙе өҫкә сыҡманы. Хәҙерге көндә ысын башҡорт мәктәптәре бөтөп бара, сөнки башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән башҡа барса предметтар русса уҡытыла.

**Гөлфирә Гәрәева:** Уныһы шулай, әммә әлеге ваҡытта уҡыу планында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренә сәғәттәрҙең бик аҙ бүленеүе лә бәкәлгә һуға. Аҙ ғына ваҡыт уҡытып, күпте талап итеп булмай. Дәрестәр һанын арттырғанда һөҙөмтә яҡшыраҡ булыр ине.

**Азамат Ғәлләмов:** Мәсьәләнең икенсе яғы ла бар: башҡорт телен ҡулланыу даирәһе үтә тар. Уны нисек итеп киңәйтеү юлдарын эҙләү, табыу һәм тәҡдим итеү бик мөһим.

**Ғалим-методист Вәкил Исмәғил улы Хажин хәҙерге мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу методикаһын тамырынан үҙгәртеп ҡороуҙы тәҡдим итә. Уныңса, туған тел дәрестәрендә уҡыусыларҙы грамматика ҡағиҙәләренә генә өйрәтеүҙән ваз кисеп, уларҙың туған телендә фекерләй алыуын үҫтереүсе күнекмәләргә өҫтөнлөк биреү бик һөҙөмтәле буласаҡ. Әгәр башҡорт мәктәптәренә туған телендә иркен һөйләшә белгән балаларға башҡорт әҙәби теленең грамматикаһын өйрәтеү урынлы булһа, бөгөн башҡортса аңлай һәм һөйләшә лә белмәгән балаларға шул уҡ грамматика дәрестәрен индерәбеҙ...**

**Гөлфирә Гәрәева:** Был мәсьәлә буйынса фекер алышыуҙар күп булды. Грамматиканың бихисап ҡағиҙәләрен яттан белеүҙең кешенең тормошонда бер кәрәге лә юҡ. Грамматизм принцибын икенсе планға күсереп, һөйләү телмәрен үҫтереү өсөн яңы дәреслектәр кәрәк буласаҡ. Был осраҡта өлгө сифатында инглиз теле дәреслектәрен күрһәтергә була. Улар уҡыусылар өсөн ҡыҙыҡлы итеп төҙөлгән, сағыу иллюстрациялар менән биҙәлгән, төрлө ситуатив әңгәмәләр киң ҡулланыла. Дәреслек балалар тормошон сағылдырырға тейеш. Дәрес һайын ҡатмарлы грамматик конструкцияларҙы дөрөҫ атай алыуға ҡоролған уҡыу процесы балаларҙы ялҡыта, улар был эштәрҙең ниндәй маҡсатта башҡарылыуын аңламай.

Бына башҡорт телен дәүләт теле булараҡ икенсе бер милләт балаларына уҡытабыҙ, уларға ла грамматика ҡағиҙәләрен тылҡыйбыҙ, ә уның урынына ябай ғына тормош ситуациялары буйынса һөйләмдәр төҙөргә, һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланырға өйрәтергә, уларҙың һөйләү телмәрен үҫтерергә кәрәк бит инде. Миҫал өсөн үҙебеҙгә нисек итеп рус телен уҡытҡандарын иҫкә алырға була. Аҙмы-күпме русса уҡырға, яҙырға өйрәнеү менән аңыбыҙға рус теленең грамматикаһын һеңдерә башланылар: склонение, спряжение кеүек нәмәләрҙе шартлатып ятлап алабыҙ, һөйләмдәрҙе анализлайбыҙ, һәр даим диктанттар яҙабыҙ һ.б. Ә ҡалаға барһаҡ, баҙап ҡалабыҙ, русса ике һүҙҙе ҡушып әйтә алмайбыҙ. Акцент менән булһа ла русса иркен һөйләшергә өйрәтһәләр, русса аралашыусылар мөхитенә тиҙерәк яраҡлашыр инек. Ә бөгөн башҡорт телен мәктәптәрҙә өйрәнеп тә, һөйләү телмәре юҡҡа иҫәп балалар ҙа шундай хәлдә ҡалды. Ҡәҙимге мәктәптәрҙә балаларға сит ил телдәрен өйрәтеү шундай уҡ принципҡа ҡоролған ине, һөҙөмтәлә уҡыусыларҙың бөтәһе лә тиерлек мәктәптән инглизсә йә немецса һөйләшә белмәй сыҡты.

**Шуға күрә туған телебеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу өсөн мөмкин булған барса юлдарҙы, сараларҙы, методтарҙы мотлаҡ ҡулланыу зарурлығын инҡар итеп булмай. Юғиһә, һуңғы башҡорт яҙыусыһының туған телендә донъя күргән һуңғы китабы фантастик күренештән ысынбарлыҡҡа әүерелеүе мөмкин...**

**Азамат Ғәлләмов:** Һеҙ әйткәндәр менән тулыһынса килешәм. Йәнә тағы ла бер проблеманы атап үтеү фарыз. Һуңғы осорҙа башҡорттарҙың ауылдарҙан күпләп ҡалаға күсеп китеүенә шаһитбыҙ, демографик статистика ла шуны дәлилләй. Был объектив процесс, ул артабан да дауам итәсәк. Теләйһеңме, теләмәйһеңме, ҡала мөхитендә кешенең психологияһы үҙгәрә, уның көнкүрешендә лә, хис-кисерештәрендә лә ауыл кешеһенә хас булмаған сифаттар барлыҡҡа килә. Ә башҡорт яҙыусылары һаман да ауыл тематикаһынан арына алмай. Ҡала башҡорттары тормошон сағылдырған әҙәби әҫәрҙәр ҙә кәрәк беҙгә.

**Әҙәбиәт темаһына ҡағылабыҙ икән, бер йәнгә ятмаған күренеш күҙәтелә хәҙер: бәләкәй проза әҫәрҙәренең, шул уҡ хикәйәләрҙең сюжеттарында тормошта ысынлап та була торған кире күренештәр: бәхетһеҙ мөхәббәт, хыянат итеү, көсләү, үс алыу, ыҙғыш-талаштар, үлтереш, эскелек, башҡаларға яманлыҡ ҡылыу кеүек негатив ситуациялар ҙур урын биләй. Быларҙы мин "ҡара проза" әҫәрҙәре тип атар инем. Ә әҙәбиәттең төп маҡсаты - кешеләрҙе яҡтыға, әҙәпкә, изгелеккә өндәү булырға тейеш бит...**



**Азамат Ғәлләмов:** Бындай сюжеттар прозала элегерәк тә бар ине ул, бигерәк тә уҙған быуаттың 60-сы йылдарында хасил булған "ауыл прозаһында". Быны ауылдарҙың юҡҡа сығыуы, тарҡалыуы менән бәйле кисерелгән ауыр хәлдәрҙең әҙәбиәттәге сағылышы итеп ҡабул итергә кәрәк.

**Гөлфирә Гәрәева:** Элекке әҙәбиәтебеҙҙә яҙыусы уҡыусыларын алға әйҙәп барһа, хәҙер киреһенсә - яҙыусы уҡыусы артынан эйәрә. Байтаҡ ҡына әҙиптәр уҡыусы нимәне ярата, ни хаҡында уҡырға теләй, әҫәрҙәрен шуға бағышлай. Шуға күрә сенсацияны ваҡиғаларға төп урын бирелә. Был тик башҡорт әҙәбиәтенә генә хас күренеш түгел. Күрәһең, юғары зауыҡлы әҫәрҙәрҙе бөгөнгө уҡыусылар ҡабул итмәҫ, тип уйлайҙарҙыр. Миҫал өсөн ир менән ҡатындың айырылышыуын тасуирлаған сюжетты алайыҡ. Башлыса, бындай әҫәрҙәр ҡатын-ҡыҙҙар өсөн яҙыла, сөнки ир-ат өсөн был ҡыҙыҡ түгел, әҙәби әҫәрҙәрҙе күберәк тәүгеләре уҡый. Ҡатыны ташлап киткән ир аҙаҡтан үкенә, ғаиләһенә кире ҡайтырға уйлай, ғәфү үтенә. Әммә ҡатыны, ғорурлығына барып, уны ҡыуып сығара. Киреһенсә булһа, ҡатын-ҡыҙ уҡыусы быны бер нисек тә ҡабул итмәҫ ине: нисек инде хыянат иткән ирғә яңынан ышанып була?

**Азамат Ғәлләмов:** Ысынлап та, тәрән фәлсәфәле әҫәрҙәрҙе баҫтырыуы ҡыйын хәҙер, сөнки ундай китаптарҙы уҡыусылар берәм бөртөк кенә. Лев Толстойҙы хәҙер күп уҡыйҙармы? Йә иһә Достоевскийҙы? Әммә улар үҙ заманында гениаль яҙыусылар булып танылa, уларҙың философик әҫәрҙәрен бар донъя халҡы уҡый. Хәҙер яҙыусылар нисек итеп булһа ла популярлыҡ яулауҙы ҡайғырта. Әммә хәҙер уҡымаясаҡтар тип, тәрән идеялы әҫәрҙәр яҙыуҙан баш тартыу киләсәктән ваз киҫеүгә тиң.

**Гөлфирә Гәрәева:** Уныһы шулай, яҙыусы бөгөн йәшәй, уға популярлыҡ бөгөн кәрәк. Ул әҫәрҙәрен яҙғанда ошо хаҡта уйлай.

**Азамат Ғәлләмов:** Мәҫәлән, 90-сы йылдарҙа рус яҙыусыларынан Пелевин бик популяр булды, уның әҫәрҙәре юғары баһаланды. Ул күп яҙа, әммә һуңғы йылдарҙа яҙғандарын уҡырғамы, юҡмы, тигән икеләнеү тыуа уҡыусыларҙа.

**Нәфис әҙәбиәт тигән төшөнсә бар. Бик юғары төшөнсә ул. Хәҙерге осор әҙәбиәтенең нәфислеге юғала барған кеүек түгелме?**

**Гөлфирә Гәрәева:** Популярлыҡ артынан ҡыуған яҙыусылар тормошсанлыҡты үҙҙәренә бер ҡорған итеп алып, тормошта нисек, беҙ шулай яҙабыҙ, тип аҡлана. Ҡаралыҡ, негативлыҡ күренештәрен тасуирлау уҡыусыларҙа бер нисек тә юғары зауыҡ тәрбиәләүгә булышлыҡ итмәй. Был осраҡта яҙыусы үҙенең йәмғиәт алдындағы төп бурысын үтәй алмаясаҡ. Бына яңыраҡ "Ағиҙел" журналы редакцияһы Гөлфинә Сәлимова премияһына яҡты, саф, бәхетле мөхәббәт темаһына арналған хикәйәләр конкурсын иғлан итте, был башланғысты хупларға ғына ҡала. Йәнә әҙәбиәт үҙе тел уҡытыусыһы ролен үтәгәнен онотorға ярамай. Беҙ үҙебеҙ ҙә рус телен рус әҙәбиәтенән уҡып, ныҡлап өйрәндек. Бала башҡорт китаптарын ни тиклем күберәк уҡыһа, һөйләшергә лә тиҙерәк өйрәнәсәк. Шуға күрә тағы ла бер һығымта: башҡорт яҙыусылары йәшәһә, башҡорт әҙәбиәте йәшәһә, башҡорт теле лә йәшәйәсәк! Бала зиһене лакмус ҡағыҙы һымаҡ - ул ниндәй әҫәрҙәрҙе уҡый, шуны һеңдерә һәм мәғлүмәтле булыуын күрһәтеп тә тора. Китапханабыҙҙа китаптар аҙыраҡ булғас, Зәйнәп Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" романын әллә нисә ҡат уҡып сыҡҡайным. Шуға бер үкенес ҡалған: башҡорт, рус, башҡа халыҡтарҙың донъя кимәлендә билдәле булған яҙыусыларының әҫәрҙәрен бала саҡта уҡ уҡып, аң һәм мәҙәни үҫешенде тиҙләтергә була ине бит.

**Һис шикһеҙ, башҡорт телен бик боронғо телдәр иҫәбенә индереп була. Уның меңәр йыллыҡ тарихы бар. Шул уҡ ваҡытта туған телебеҙҙең тарихи этимологияһы буйынса ғилми хеҙмәттәр юҡҡа иҫәп. Был эште башлап ебәреүсе ғалимдар табылырмы икән?**

**Азамат Ғәлләмов:** Башҡорт теленең этимологик һүҙлеген төҙөү хаҡында һүҙ булғайны ул. Был проблема менән күренекле лингвист Талмас Мәгсүм улы Ғарипов та шөғөлләнә башлағайны. Башҡорт теленең этимологияһын ғилми яҡтан РФА ӨФТҮ-нең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары өйрәнергә тейеш, тип уйлайым.

**Гөлфирә Гәрәева:** Башҡорт теленең килеп сығышы, уның Урал-Алтай һәм башҡа төрки телдәре менән бәйләнеше проблемалары заманында күренекле ғалимыбыҙ Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ғилми хеҙмәттәрендә сағылыш тапҡайны. Шул уҡ этимология буйынса ла, телебеҙҙе башҡа бер телдәр менән сағыштырма планда яңы тикшеренеүҙәрҙе дауам итеү зарурлығы бар, быны телселәр үҙҙәре лә әйтә килә. Башҡорт теленең боронғолоғон иҫбатлауға арналған академик хеҙмәттәр милләттәштәребеҙҙең туған телебеҙ менән ҡыҙыҡһыныуын бермә-бер арттырыр ине. Киләсәктә ошо йүнәлештәге ғилми тикшеренеүҙәр әүҙемләшер, тип ышанайыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәбеҙ аҙағында Гөлфирә Ниғәмәтйән ҡыҙы һәм Азамат Абдрахман улы үҙҙәренең ғилми һәм педагогик эшмәкәрлектәренән, яңы быуын башҡорт студенттарын халҡыбыҙға һәм республикабыҙға файҙалы шәхестәр итеп тәрбиәләүҙән ҙур ҡәнәғәтләнеү табыуҙары хаҡында белдерҙе. Уларға тынғыһыҙ хеҙмәттәрендә уңыштар теләйбеҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

Мауыҡтырғыс был һөйләшеүҙе тупһа яғынан килгән тауыш бүлде.

- Рәшиҙәәәү, һин ҡайҙа? Һине күрәйем дә, хуш итәйем тигәйнем...

Йорт тупһаһына килеп сыҡҡан Сәлимә апай тауышын ишетеп, аласыҡтан әсәйем килеп сыҡты.

- Бер һүҙем дә бар ине. Шуны әйтәйем дә... - тип Сәлимә апай йәһәтләп аласыҡҡа яҡынлашты. Әсәйем иһә, уны аласыҡҡа индермәҫкә теләп, ҡулдарын йәйеп ебәрҙе лә:

- Әйт, әйт шул. Әйҙә, - тип, баҡса рәшәткәһе буйындағы эскәмйәгә ыңғайланы. Сәлимә апай бер аҙ аптырап торҙо ла, уның артынан эйәрҙе. Баҡса алыҫыраҡ шул. Уларҙың хәбәрен ишетмәнем. Әммә тағы ла мейестән ҡуҙ алырға тип ингәндә, әлегә таныш булмаған инәй, танауын мырш-мырш тартып илап ултыра ине. Уны йәлләп :

- Инәй, әсәйемдең бөгөн эше күп шул. Үпкәләмәгеҙ, хәҙер инер, - тинем.

- Беләм, беләм, балам, уның эше күп. Алты баланы ла, ирен дә, йәнә мал-тыуарҙы ла бер үҙе тигәндәй нисек ҡарап өлгәрһөн ти. Мин дә ул өлгәрмәгәндә, уның бәләкәй балаларына күҙ-ҡолаҡ булырға тырышам. Әле лә берәй ярҙамым теймәҫ микән тип килдем, ҡыҙым. Ҡайтырмын хәҙер. Оҙаҡламам. Атайың да тиҙҙән ҡайтыр эшенән. Апайың менән ағайың ҡайттымы әле мәктәптән? - тип әйтеп ҡуйҙы.

Шулай инде. Ваҡыт аяуһыҙ. Олоғайғас, шулай иләҫ-миләҫ итеп тә ҡуя. Йәшлеген хәтерләй торғас, шулай яңылышып та китәләр инде оло кешеләр. Уны тынысландырырға теләп:

-Юҡ әле, береһе лә ҡайтмаған, - тигән булдым. Уның сәйгә лә, теленгән тәмле бәлештәргә лә ҡағылмағанын күргәс, йәнә ғәжәпләнеп: - Сәй эсегеҙ, инәй, һыуына бит, - тинем, үҙем тәҙрәгә күҙ һалам. Тиҙерәк инһен ине әсәйем, инәйҙе яңғыҙ ҡалдырғы ла килмәй. Хәбәре ҡыҙыҡ та, тыңларға ваҡыт тар. Их, диктофоным булһа ине? Әйткәндәй, вәт аҡыл, смартфонда ла диктофон бар бит. Исмаһам, шунда яҙып алырға кәрәк. Аҙаҡ яҡшылап тыңлармын. Үҙҙәренә әйтмәй генә аласыҡҡа һалайым да китәйем. Әйҙә, яҙһын. Минең ҡунаҡ һыйлайһым бар бит әле. Кеҫәмдән смартфонымды алып, уның диктофонын тоҡандырып, кәштәлә ятҡан таҫтамал аҫтына тыҡтым да, ҡаҙанға һыу өҫтәп ҡойҙом һәм мейестәге утты яңыртырға керештем. Ҡайнар һыу кәрәк булыр әле. Был инәй яҡшылап күрмәй ҙә шикелле. Эйелеп мейес болғай башлауым булды, мине әсәйем менән бутап, ахыры, һүҙен дауам итте:

- Шунан теге ир-аттарҙан уларҙың кемдәр булыуын һораным. Башҡорттар беҙ, тинеләр. Төрөктәр менән һуғыш тамамланыуға бара. Беҙгә ҡайтырға рөхсәт иттеләр. Шулай урман-тау аша яҡындағы паромға китеп барабыҙ, тинеләр. Иртәнсәк миңә утта ҡайнатып сәй эсереп, бер телем икмәк биреп, ауылым күренгәнсә оҙата барып, тороп ҡалдылар. Әсәйемә улар хаҡында һөйләмәнем. Аҙашып йөрөнөм, тинем. Бынан ары яңғыҙ ебәрмәйем һине урманға, тине ул, асыуланып. Күршеләге, минән өс йәшкә оло һонтор Хәким менән барҙыҡ тағы ике көн шул урманға, сытыр йыйырға. Өсөнсө көн дә киттек шулай. Бер яланға сығып, ял итергә булдыҡ. Алып килгән бер телем икмәгемдең ситен генә һындырып өлгөрҙөм, ҡалғанын, ҡулымдан тартып алып, Хәким тиҙ генә ауыҙына тыҡты. Ул да әсәһе менән яңғыҙ йәшәй. Инде ир ҡорона етеп килә, асығалыр, тип, өндәшмәнем. Бик ныҡ арыҡҡайны шул, ятып ҡына торайым, тигәнсә, йоҡлап киткәнмен. Түшемдән буйлап йылан шыуышып килә икән тип, төш күрәм. Бына ул йылан аяғым араһына ла шыуыша башланы. Ҡапыл өҫтөмә бер ағас ҡолаһа икән тип, уянып киттем. Өҫтөмдә бер ҡулын түшемә, икенсеһен бот араһына ҡуйған, үҙе йыш-йыш тын алған Хәким ята. Ҡурҡышымдан ҡысҡырырға иткәйнем, Хәким ауыҙымды ҡапланы. Шулай күпмелер ваҡыт бар көсөмә Хәкимдең ауыр кәүҙәһен ситкә алырға маташҡанмындыр, белмәйем, "Тукта!" тигән тауыш ишетелде. Хәким уны ишетмәне лә буғай, һаман үҙ теләгәнен алырға маташты. Бер мәл ул ауыҙымды ҡаплаған ҡулын ысҡындырҙы һәм мин, "Ҡотҡарығыҙ!" тип ҡысҡырып өлгөрҙөм. Күп тә үтмәй Хәким хәлһеҙ булып яныма тәгәрәне. Теге урман ситенән килеп сыҡҡан, өс көн элек мине ауылға сығарып ҡуйған егет һуйыл ағас менән Хәкимде иҫәңгерәткән икән. Мин тиҙ генә тороп баҫтым да, сытырҙарымды алып ҡайтырға ашыҡтым. Теге ҡотҡарыусы егет тә йәһәт кенә урман эсенә инеп юғалды. Уларға урындағы халыҡ менән аралашырға ярамаған, күрәһең. Ул арала Хәким дә иҫенә килде лә, һин барыбер минеке буласаҡһың, барыбер, тип һөйләнә-һөйләнә минең арттан эйәрҙе. Әсәйемә йыртылған күлдәгем мажараһын һөйләмәнем. Әммә башҡа Хәким менән урманға бармайым, тинем. Әсәйем бик ныҡ асыуланды, мине "Икмәк яуы, тиҙерәк кейәүгә лә сыҡмайһың бит, исмаһам, кибеп ҡатҡан йолҡош. Һинең урынға бер малай тапһамсы", тип битәрләне. Бер ғәйебем дә булмағанға бик ғәрләндем. Бигерәк тә апайым алдында йәберләүенә оялдым. Йәнә кис менән Хәкимдең әсәһе инеп, уға нимәләр һөйләп китте. Әсәйемдең быға тиклем шулай ныҡ ярһығанын күрмәгән инем әле. Ҡулына нимә эләгә, шуның менән миңә һелтәп, күҙемә күренмә, тапҡанһың кем менән уйнаш итергә, тип, өйҙән ҡыуҙы. Төнө буйы һарай артында иланым да иртән урманға киттем. Ҡайҙа киткәнемде күрмәһендәр, тип, саҡ ҡына ситкәрәк, Оло йылға ярына яҡын урманға ыңғайланым. Былай йәшәгәнсе, үлеүең артыҡ, тип, йылға ярына атланым. Хоҙай ҡушҡандыр, йылғала бер ҡалҡып, бер батып барғанда кемдеңдер көслө ҡулдары күтәреп алды. Күҙҙәремде асһам, йәнә шул егет. Ул бер һүҙ ҙә әйтмәне. Күтәреп, урман ситендәге аты өҫтөнә һалды ла, ары киттек. Үҙҙәре менән шулай мине алып киттеләр. Кесе һеңлеләре кеүек ҡәҙерләп кенә, яратып ҡына йөрөттөләр. Икмәктәре, ҡорот, талҡан, ҡаҙылары ла бар ине. Мин уларға, үлән ҡушып, тәмле аштар бешерҙем. Йылғала өҫ кейемдәрен йыуҙым. Бына шулай килеп юлыҡтым мин был ауылға, - тине таныш булмаған инәйем.




Уның һөйләүе бигерәк ҡыҙыҡ булғас, бер ҙә бүлдермәнем үҙен. Әммә ҡунаҡтар көтәләр? Дөрләп киткән мейестә ҡуҙ күренде, бер һоҫҡо тултырып, самауырға һалдым да, ҡунаҡтар янына ашыҡтым. Ул арала әсәйем дә килеп инде аласыҡҡа. Инәй уның менән ҡалды.

...Ҡунаҡтарға сәй яһай-яһай һөйләгәндәренең айышына төшөнөргә тырышам. Иҫке йорттарҙы емереү хаҡында түгел, инде ер йөҙөндә кешелек нисек барлыҡҡа килгәнен һөйләйҙәр.

- Ер йөҙөнә иң тәүҙә Хоҙай фәрештәләрҙе төшөргән ти бит, - арғы ос Фәкиһә апай, дөп-дөрөҫ әйтәм, тигәндәй, һауалы ҡарап ҡуйҙы барыһына ла.

- Юҡ, юҡ, яңылышаһың, Фәкиһә, фәрештә түгел, иң тәүҙә ергә Әҙәм төшкән, ти, - күршеләге Разия апай үҙ фекерен әйтә һалды. Шәмсиә генә ризаһыҙлыҡ менән:

- Бәй-бәй, бер бөртөк кенә ир төшкәс, ҡалған кешеләр ҡайҙан тыуа ул, - тип һөйләшеүҙе көлкөгә борорға маташты. Тик уға бер кем дә ҡушылманы.

- Хәҙер аңлатам, - быныһын дини белеме менән айырылып торған Бибикамал апай әйтте. Уның һөйләгәнен барыһы ла тыңларға ярата. Шуға шым ҡалдылар. - Аллаһы Тәғәлә Әҙәм менән уның ҡатыны Һауаны барлыҡҡа килтерә лә, улар бәхетле йәшәһен тип, ожмахҡа индерә. "Унда бер баҡса бар, шунда инмәгеҙ, бер емешен дә ашамағыҙ", ти. Ә улар баҡсаға инә лә, алмағастың бер алмаһын ашай ҙа ҡуя икәүләп. Аллаһы Тәғәлә уларҙы, Үҙен тыңламағас ни, ожмах баҡсаһынан ҡыуа ла Ергә төшөрә...

- Хөрмә булһа бер хәл, алма бит әле ул, уны нимә тип ашанылар икән? - тип Шәмсиә апай тағы бүлдерҙе уны. Үҙе өҫтәлдәге бер хөрмәне алып, тәмләп ашап ҡуйҙы.

- Атыу Әҙәм менән Һауа төшкән инде Ергә иң тәүҙә. Шунан балалары тыуған, - тине күрше Разия апай.

- Тыуған-тыуған, шулай киткән кешелек ырыуы. Ана, Һауа инәй беҙҙең ауылда ла йәшәгән бит әле? Уның балалары булған микән? - Хәмдиә апайҙың был һүҙенән табын гөү итеп ҡалды. Һәр кем үҙе нимә белгәнен тиҙ генә һөйләп ҡалырға ашыҡты. Мин дә күргәнем бар ул йортто. Бәләкәй генә. Емерелеп бөтөп барһа ла бер яңғыҙы тау битендә ғорур ултыра бирә...

- Хәмдиә йәшерәк, белмәйҙер, Һауаның балалары булманы. Бер бөртөк тә. Сәлимйәне менән бик татыу йәшәнеләр. Балалары булмаһа ла, үҙе нисек ярата ине балаларҙы. Урамдан үтеп барған һәр береһенә, колхоз юллап алып биргән аҙ ғенә пенсия аҡсаһына алған тәмле кәнфиттәрен таратыр ине. Арҡаларынан һөйөр ҙә илар ине, илар ҙа һөйөр ине, бахырҡайың... - Разия апай яулыҡ осо менән күҙҙәренән сыҡҡан йәштәрен һөртөп алды.

- Уны Төркиәнән килгән ти торғайнылар, шул ысынмы? - Хәмдиә апай һаман төпсөнөп, күберәк белеп ҡалырға ашыҡты.

- Минең апһыным Яңылбикә һөйләгәйне, ҡайныһы алып ҡайтҡан бит ул ҡыҙҙы һуғыштан. Урламаным, үҙе эйәреп ҡайтты, тигән. Бик ныҡ яратышҡандар ҙа икән, хатта мулланан никах та уҡытҡандар, ти. Тик балалары булмаған. Шунан икенсегә ҡатын алған Сәлимйән ҡайныһы. Уныһы өс ул табып биргән дә Һауаға иренән "талаҡ" әйттергән, тиҙәр. Өйҙән ҡыуған. Колхозда күп эшләнең тип, Һауаға бәләкәй булһа ла бер йорт һалып биргәндәр ауылдаштар. Бер үҙе йәшәне...

- Бибикамал, тағы ни әйтергә икән тип, туктап ҡалды. Шул саҡ әсәйем дә килеп инде. Йөҙөнә сыҡҡан борсолоуҙы мин генә һиҙгәнмендер. Көскә йылмайҙы ла, бер ни булмағандай, хәбәргә ҡушылып та китте.

- Сәлимә күстәнәсеҙ ҡайтырға сыҡҡан, - тип ҡулындағы йошмаҡ шыптырға өҫтәлдән бәлеш, май икмәк, кәнфит һала башланы. Башҡаларға ла был етә ҡалды. Барыһы ла кеҫәләренә һалып килтергән йомшаҡ шыптырҙарын сығара башланы.

- Ней, теге Сәлимә әйтә, күршеләрендә, тау битендә анау Һауаның ташландыҡ йорто тора бит әле? - тип үҙенекен һөйләй бирҙе әсәйем. Ҡатындар "эйе, эйе", "тора шул һаман, ауыл йәмен боҙоп" тиештеләр.

- Шул йортто әллә ҡасан емерергә кәрәк ине, - тип ҡуйҙы әсе тел Шәмсиә апай. - Иртәгә улым сығам тип тора әле шунда. Тауыҡ кетәгенә ярарлыҡ таҡталары күренә, шуны алам, тине.

Әсәйем һүҙен дауам итте:

-Тукта әле, Шәмсиә, ана шул йорттоң тәҙрәһендә ут күрҙем, ти Сәлимә. Кисә төндә тышҡа сыҡҡанда күргән. Ул ут бер янып, бер һүнеп торған. Етмәһә, Һауа апай тере саҡта саң-соң килеп һуҡҡан еҙ табаһы ла сыңлап киткән шул төндә... Йөрәмәһен улың!

- Ниңә Сәлимә үҙе һөйләмәне беҙгә?- тип ныҡышты һаман Шәмсиә апай.

- Миңә генә һөйләне шул. Табында әйтһәм, минең аҡылым шыйған тиерҙәр йә, төпсөнөп һораша башларҙар, тине. Ярай, ышанған ышана, ышанмаған юҡ инде. Сығарып бирәйем әле күстәнәсен, - тине лә әсәйем ашығып сығып китте. Мин иһә, йәнәш ултырған апайға, сәй яһарһың әле, тинем дә, йәһәтләп әсәйем артынан эйәрҙем. Теге инәй бер

✓ ***Этниканы яратыусылар өсөн тағы бер шәп яңылыҡ бар: быйылдан "Китап байрамы" йәрминкәһенән һуң Совет майҙанында даими рәүештә Халыҡ-ара халыҡ художество кәсептәре һәм һөнәрҙәре фестивале ойошторола.***



үҙе микән? Диктофоным яҙамы, беләйем.

Мин сыҡҡанда ихатала бары тик теге серле инәй ҙә әсәйем генә ине. Сәлимә апай күптән ҡайтып киткән. Әсәйем көсләп әлеге инәйҙең ҡара камзулы кеҫәһенә тыға. Инәй:

- Юҡ, алмайым, Рәшиҙәкәй! Һин мине гүмерем буйы һыйлаһың. Ул һөтө, ул ҡатығы, ул икмәген гел биреп торҙоң. Алмайым. Балаларыңа бир! Улар бәләкәй бит, - тип ныҡыша инәй. - Һиңә бар изгелектәрең өсөн рәхмәт әйтергә тип килгәйнем бит мин, мине ҡыуандырған кеүек Хоҙай һине лә, балаларыңды ла ҡыуандырһын!

Мин аласыҡҡа индем. Диктофонды тиҙ генә һүндереп ҡуйҙым. Аҙаҡ тыңлармын. Урындыҡта ятҡан ҡулъяулыҡҡа, йәнә аласыҡ мөйөшөндәге теге муйыл таяҡҡа күҙем төштө. Бәй, был бит теге инәйҙең ҡулъяулығы ла, уның таяғы! Оноткан!

- Әсәй, бына ул ҡулъяулығын да, таяғын да онотҡан! - тип сыҡҡанымда, инәй инде урам ҡапҡаһы төбөнә еткән ине. Артынан йүгерәйем генә тигәндә, әсәйем бик ҡаты итеп бәләгемдән тотоп алды ла мине үҙенә тартты. Ебәрмәне.

- Туҡта, ҡыҙым, барма! Эйәрмә! - тине ҡәтғи генә. Былай ҡырыҫлыҡты көтмәгәс, туҡтап ҡалдым.

- Ниңә, әсәй? Кем ул инәй? Ниңә уны табынға саҡырманың? Бик алыҫтан килгәнгә оҡшаған, асыҡҡан булғандыр әле, аш эсерер инек үҙенә... - тим әсәйемә һораулы ҡараш ташлап.

- Шым, ҡыҙым! Һауа инәйең бит ул. Беҙҙең ауылда йәшәне. Бик күптәнән вафат булғайны, - тине лә әсәйем, башын аҫҡа эйеп, башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алмай, өйгә инеп китте. Ә мин, күҙ йәштәренән сыланған, матур зәңгәр сәскә сигелгән ҡулъяулыҡ һәм әле ҡул йылыһы ла һыуынып өлгөрмәгән, күп тотоноуҙан башы йылтырай башлаған муйыл таяҡты тотоп, ҡатып ҡалдым.

Шулай уйҙарымдың осона сыға алмай, күпме торғанмындыр, бына табындағы инәй, апайҙар кұстәнәстәрен алып, рәхмәттәр әйтеп, берәмләп сыға ла башланы. Барыһын да ҡапҡанан сыҡҡансы хөрмәт менән оҙатып ҡалдым. Һуңғы ҡунаҡты оҙатҡас, йорт яғына әйләндем һәм... баҡса буйындағы эскәмйәлә ятҡан бер шыптыр кұстәнәсте күрҙем. Бая әсәйем уны Һауа инәйҙең кеҫәһенә һалғайны...

Иртәгәһенә Шәмсиә апайҙың улын, Һауа инәйҙең емерелеп барған йортонан алып ҡайтҡан таҡтаның тутыҡҡан сөйөнә баҫҡан да район дауаханаһына илткәндәр икән, тип ишеттем. Аҙаҡ белдем. Шул китеүҙән ҡайтмаған ул. Столбняк эләктереп, вафат булған.

Ә диктофон һуң... Ҡалаға ҡайтҡас, күпме генә тырышһам да, мин ул яҙыуҙы аңлай алманым. Ярты сәғәттәй нимәлер яҙылған бит! Тик ул яҙыуҙа кемдер "дан-доң" еҙ табаны ҡаға ла, бер туктауһыҙ үкһеп-үкһеп илай ҙа илай ине...

**(Аҙағы. Башы 19-сы һанда).**

*ТАМЫРҘАР ТАРТА*

# БОРОНҒОҒА ҠЫҘЫҠҺЫНЫУ БАР

**Башҡорт халыҡ һөнәрселек мәктәбе мираҫ ҡына түгел, ә төбәк айдентикаһын үҫтереү ҡоралы тип әйтергә мөмкинме? Бөгөн брендтар нейроселтәрҙәр ярҙамында производствоны арзанайтыуға һәм глобалләшеүгә ынтыла, әммә йәмғиәттә ҡыҙыҡлы күренеш - ҡул хеҙмәтенә һәм халыҡ элементтарына тренд ҡуҙәтелә. Йәштәр милли биҙәк төшөрөлгән кейемдәр кейә, этно-музыка тыңлай; заманса интерьерҙарҙа өләсәйҙәр ырғағы менән бәйләнгән төҫлө келәмдәр барлыҡҡа килә, ә ҡалаларҙа "үҙебеҙҙеке" тигән концепция менән рестарандар асыла һәм беҙ ашап үҫкән ризыҡтар әҙерләнә. Шул рәүешле үҙенсәлекле әйберҙәргә ҡыҙыҡһыныу арта.**



## Тамырҙарға таяныу

Этникаға ҡыҙыҡһыныу - осраҡлы күренеш түгел, ә законға ярашлы процесс. Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының Гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәге директоры, Рәсәй тарих йәмғиәтенең төбәк бүлексәһе советы рәйесе Марат Мәрҙәнов фекеренсә, бөгөн йәштәр үҙ тамырҙарында терәк-таяныс таба. Был йүнәлеш төбәк имиджына ыңғай йоғонто яһай - хатта Рәсәйҙән ситтә лә. "Башҡорт этникаһына ҡыҙыҡһыныу бер нисә факторға бәйле. Беренсенән, ул глобаллашеү осоронда үҙенсәлек эҙләү, йәғни йәштәр үҙ тамырҙарында таяныс табырға ынтыла. Беҙ республиканан һәм илдән ситтә башҡорт мәҙәниәте таралыуын күҙәтәбеҙ, был сәйәси һәм иҡтисади яҡтан һиҙелерлек файҙа килтерә. Башҡортостандың киң танылыу алыуы туристарҙы йәлеп итә, инвесторҙар өсөн ыңғай имидж тыуҙыра һәм "йомшаҡ көс"кә әүерелә: уңышлы мәҙәни проекттар иҡтисадта, мәғарифта һәм фәндә хеҙмәттәшлек өсөн әтәргес булырға мөмкин", - ти Марат Мәрҙәнов.

Үҙенең ҡарашин әңгәмәсе миҫал менән дә нығыта - Башҡортостандың AY YOLA этно-төркөмө сит илдә таныулы яуланы, ә коллективтың Төркиә президенты Рәжәп Эрдоған менән осрашыуы халыҡтар араһындағы бәйләнеште һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Былай бәйләнештәр мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү өсөн рәсми булмаған каналдар булдыра. Беҙ Башҡортостандың үҙенең үҙенсәлеген юғары халыҡ-ара кимәлдә таныта алыуын күрәбеҙ, - ти Марат Мәрҙәнов.- Ҡайҙа ғына йөшәһәләр ҙә, яҡташтарыбыҙ берләшә, милли костюмдар, биҙәүестәр һәм башҡа элементтар менән үҙҙәренең башҡаларҙан айырылып тороуын күрһәтә".

## Асылыңды танып белеү

Урындағы креативщиктар көслө төбәк үҙенсәлеге тураһындағы тезисты раҫлай. Йәмәғәтсе Айбулат Йәмилов Belazek бренды аҫтында биҙәүестәр эшләй. "Кайҙа ғына йөрөһәк тә, һәр ваҡыт беҙҙең менән булған өйҙең символы итеп Башҡортостан контуры төшөрөлгән биҙәүестәр яһайбыҙ. Был аксессуар ғына түгел, ә тыуған төйәк, уның тарихы, мәҙәниәте менән бәйләнеш символы", - ти Айбулат.

Айбулат - Башҡортостандың Йәш яҡташтар ассоциацияһы рәйесе, тематик аксессуарҙар менән эшләү уның эшмәкәрлегенең дауамы булып тора. "Бөгөн ҡул хеҙмәте һәм милли элементтар менән ҡыҙыҡһыныу - асылыңды һәм тамырҙарыңды таныу ул. Кешеләр бер төрлө әйберҙән ялҡҡан, үҙенсәлекле булырға ынтыла. Мин күп йылдар инде республикабыҙ йәштәре менән эшләйем, һәм был бренд ошо эшмәкәрлектең тағы бер ағымына, аксессуарҙар һәм дизайн аша мәҙәни кодты яңынан ҡарау һәм уны хәҙерге йәшәйештең бер өлөшө итеү мөмкинлегенә әүерелде", - тип һөйләй әңгәмәсе.

Шуныһы ҡыуаныслы, яҡташтар традицияларҙы яңынан ҡарап, уларҙы ысын мәғәнәһендә стилле итеп эшләй. Былай проекттар бихисап, ләкин беҙ уларҙың бер нисәһен генә атап үтәбеҙ. Walk Of Shame бренды менән бөтә донъяға билдәле дизайнер Андрей Артемов Рәсәй һәм сит ил йондоҙҙарына ҡурай төшөрөлгән кейемдәр кейҙерҙе; Айнур Асҡаров илгә "Өфөнән һөйөү менән" киноһын күрһәтте"; Урал тауҙары амбассадоры Олег Чегодаев Башҡортостандың тәбиғи айдентикаһы менән биҙәүестәр эшләй; мульти-инструменталист HANQYZY халыҡ музыкаһын техно жанрында яңырата; ә ZAMAN сәнғәт музейы илселеге сәнғәт диалогы аша Башҡортостандың үҙенсәлеген башҡа ҡалаларға тараҡҡан рәссамдарҙы һәм кураторҙарҙы бер урынға туплай.

## Ижадсыларға ярҙам

Бөгөн Башҡортостанда оҫталарға дәүләт ярҙамы күрһәтелә: мәҫәлән, халыҡ художество кәсептәрен үҫтереүгә субсидиялар алырға мөмкин. Йыл һайын ошо маҡсатҡа 11 миллион һум аҡса бүленә. Республика Башлығы Радий Хәбиров "Креатив индустриялар сәғәте" кәңәшмәһендә һөнәрселек мәктәбен үҫтереүҙең төбәк етәкселеге өсөн мөһим мәсьәлә булыуын билдәләне. "Республикала дәүләт ярҙамы саралары эшләй - халыҡ художество кәсептәрен үҫтереү өсөн субсидиялар алырға мөмкин. Беҙгә эшмәкәрлегеҙҙе киңәйтеүегеҙ, тауарҙарҙың ассортиментын һәм сифатын күтәреүегеҙ мөһим", - ти Радий Хәбиров.

Этниканы яратыусылар өсөн тағы бер шәп яңылыҡ бар: быйылдан "Китап байрамы" йәрминкәһенән һуң (был юлы ул 28-нән 30 майға тиклем үткәрелә) Совет майҙанында даими рәүештә Халыҡ-ара халыҡ художество кәсептәре һәм һөнәрҙәре фестивале ойошторола.

Яҡшы шарттар булдырыу креаторҙарҙың ҡыҙыҡһыныуын арттыра, тип иҫәпләй Марат Мәрҙәнов: "Башҡортостанда милли мәҙәниәтте һаҡлау һәм популярлаштырыу буйынса программалар әүҙем тормошҡа ашырыла: фестивалдәр ойоштороу, художество кәсептәренә финанс ярҙамы күрһәтеү программаһы - барыһы ла традицияларға ҡыҙыҡһыныуҙы тергеҙеү өсөн уңайлы мөхит тыуҙыра".

## Трендмы, әллә базамы?

2025 йылда Өфө "Бөтә донъя һөнәрселәр ҡалаһы" статусын алды. Беҙ Рәсәйҙә тәүгеләрҙән (һәм әлегә берҙән-бер) булып ошондай өҫтөнлөккә эйә булдыҡ. Был халыҡ-ара платформаларға һәм сауҙа селтәрҙәренә юл аса. Италиянан WCC-Европа төбәге вице-президенты, халыҡ-ара жюри ағзаһы, доктор Фатина Сайкали Башҡортостандың уңышын бына нисек аңлатты: "Хөкүмәт етәкселәре өс йүнәлешкә: һөнәрселекте финанслауға, һөнәрселәргә булышлыҡ итеү системаһына, тикшеренеүҙәргә инвестицияларға аҡса һалды".

Ошонан сығып, шундай фекер тыуа: күп мәҙәниәтле Башҡортостан үҙенең эксклюзивлығы менән тотош илдең һөнәрселәр ҡалалары өсөн үҙәк була, башланғыстарҙы берләштерә ала. "Һеҙ Рәсәйҙең һөнәрселәр ҡалалары өсөн хаб була алаһығыҙ", - тине Фатина Сайкали Башҡортостанға сәфәре барышында.

Башҡортостандың Бөйөк ебәк юлының яҙмышындағы роле тураһында иҫкә төшөрәбеҙ, үткәндәрҙең ысынбарлыҡ менән бәйләнешен күрәбеҙ - һәм беҙҙең этникаға ҡарата ҡыҙыҡһыныуға ҡыҫҡа ваҡытлы "тренд" һүҙен ҡуллана алмайбыҙ! "Хәҙерге Башҡортостан биләмәһенең Бөйөк ебәк юлының мөһим үҙәге булғанын, Волга һәм Кама буйҙарын Себер, дала төбәктәре менән тоташтырғанын онотмайыҡ. Ер тауарҙар, идеялар һәм традициялар менән алмашыу коридоры булып хеҙмәт иткән. Был иһә тарихи факт ҡына түгел, ә заманса үҫеш өсөн ресурс: ул цивилизациялар тоташҡан ерҙә барлыҡҡа килгән урындағы мәҙәниәттең үҙенсәлеген аңлата, яңы иҡтисади һәм мәҙәни бәйләнештәрҙә позицияларҙы нығытыу өсөн конкурентлы өҫтөнлөк бирә", - тип йомғаҡ яһай Марат Мәрҙәнов.

**Дарья КАСЬЯНОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ПАРТАЛАР БЕЙЕГЕРӘК БУЛҺА...

■ Организмға йод етешмәү арыуҙың сәбәбе була ала. Ғәҙәттә, яҙ һәм йәй миҙгелдәрендә энергия дефициты булырға тейеш түгел һымаҡ, шулай ҙа бындай күңелһеҙлек килеп тыуған икән, тҡланыу режимына иғтибар итегеҙ, ти белгестәр. Әгәр ҙә тиҙ арыйһығыҙ, һалҡын тейеп бара, сәстәрегеҙ ҡойола, тирегеҙ кибә икән, етмәһә, хәтер насарайып, ишетеү һәләте түбәнәйһә, йөрәк тибеше боҙолһа, организмға йод етешмәүе ихтимал. Йод диңгеҙ кәбеҫтәһендә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтарында күп. Йодлы тоҙҙы ла ҡулланырға була, әммә тоҙҙо оҙаҡ һаҡлаһаң, йодтың күпселек өлөшө юҡҡа сыға, сөнки йод - осоусан берләшмә.

■ Ғалимдар мәктәп парталарын бейек өҫтәлдәргә алыштырырға тәҡдим итә. Бындай өҫтәл артында балалар ултыра ла, баҫып тора ла алаҫаҡ. Белгестәр тикшеренеүҙәр үткәргән. Уҡыу йылы дауамында балаларҙың һорауҙарға яуап биреүе, дискуссияларҙа әүҙем ҡатнашыуы баһаланған. Һөҙөмтәлә, баҫып торған саҡта баланың иғтибары 12 процентҡа юғарыраҡ булыуы асыҡланған. Яңыраҡ ғалимдар дәрестә баҫып тороуҙың артыҡ ауырлыҡтан ҡотҡарыуы тураһында белдергәйне. Шуға ла белгестәрҙең был яңылыҡты бер кемде лә аптырауға һалмаған. Физик әүҙемлектең саҡ ҡына күтәрелеүе лә когнитив һәләттәргә ыңғай йоғонто яһай, тип белдерә ғалимдар.

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуы билдәләнгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мөхит тәьҫире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәләр лидер позицияһына сығыу һәм унда нығыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәһә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

■ Организм дөрөҫ эшләһен өсөн көн тәртибе лә мөһим роль уйнай. Дөрөҫ туҡланыу, йоҡо һәм ялға етерлек ваҡыт бүлеү, витамин һәм микроэлементтарҙың запасын тулыландырып тороу - быларҙың барыһы ла һеҙҙең тормошоғоҙҙа мотлаҡ булырға тейеш. Быларҙан тыш, ҡайһы бер ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү кәрәк. Иртән тиҙ уяныуҙы ғәҙәт итеп алығыҙ, уянғас та оҙаҡ ятмай, душҡа барығыҙ, физик күнекмәләр эшләгеҙ. Көндәҙ организм күпкә әүҙемерәк, шулай ҙа сәғәт берҙәрҙә ял итеп алыу ҡамасауламаҫ. Мөһим эштәрҙе кискә алтынан һуңға ҡалдырырға ярамай.

■ Ғалимдар раҫлауынса, артыҡ ауырлыҡ, асығыраҡ әйткәндә, билдәге һәм аяҡтағы артыҡ майҙар насар йоҡлауҙың сәбәбе булыуы ихтимал. Улар II типтағы шәкәр диабеты менән яфаланған һәм был ауырыу барлыҡҡа килеү хәүефе төркөмөндәге 77 кешене тикшереп ҡараған. Беренсе төркөм диетаға ултырған һәм физкультура менән шөғөлләнә башлаған. Икенсе төркөм диета менән генә сикләнгән. Ике төркөмдәге кешеләр дөйөм иҫәпләгәндә ете килограмға ябыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта, был һынауҙа ҡатнашыусыларҙың 20 проценты йоҡолары яҡшырыуы тураһында белдергән. Ғалимдар әйтеүенсә, һимеҙ кешеләрҙә апноэ - йоҡлаған саҡта ҡыҫҡа ваҡытҡа тын алыу туҡталып тороуы йыш осрай. Апноэ менән яфаланыусыларҙа йөрәк һәм баш мейеһе ҡан тамырҙары проблемаһы ла була, сөнки мейегә кислород һәм файҙалы матдәләр етешмәй. Кеше ябығыу менән быларҙың барыһы ла юҡҡа сыға һәм ул яҡшыраҡ йоҡлай башлай.

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Артур Рәмил улы Собханғолов - бокс буйынса Азия һәм Европа чемпионы. Быйыл апрелдә ул билдәле тажик боксеры Баһадир Усмановты нокаутҡа ебәрҙе. Башҡортостандың ғына түгел, донъя боксы йондоҙо Артур Собханғоловтан интервью алыу теләге менән күптән яна инем. Шундай ҙур спортсының редакцияға килеүе бер кемдең дә иғтибарынан ситтә ҡалманы, айырыуса ҡатын-ҡыҙ коллегаларым ҡабат-ҡабат боксерға күҙ һирпеп-һирпеп ҡуя. Әйткәндәй, әңгәмә бокс тирәләй генә түгел, гүзәл зат вәкилдәре хаҡында ла барҙы. Артур тормошонда иң мөһим биш ҡатын-ҡыҙ барлығын һөйләнә. Кемдәр улар?**

# ҺӘР ИР-ЕГЕТ АРТЫНДА...

## ҡатын-ҡыҙ тора

### Иң көслөһө

Һәр спортсының артында көслө ҡатын - уның әсәһе тора, әлбиттә. Сағыштырмаса һуң ғына, 14 йәшемдә, спорт менән шөғөлләнә башланым, тәүҙә кикбоксинг, унан бокс менән. Урамда "тиҙәк тибеүҙе" туҡтаттым. Атай-әсәйем тәүҙә боксҡа йөрөүемде хупламаны. Имгәнеп ҡуйыуың бар, тип борсолдолар. Әммә күп тә үтмәй, бокс йәшәү рәүешемә әүерелгәйне инде.

Йылдар үткәс, әсәй үҙенсә ризалығын бирҙе. "Һинең чемпион булыуың да, титул алыуың да беҙҙең өсөн мөһим түгел. Бары тик үҙең һау-сәләмәт бул", - тине. Бына шул әсәйҙең фатиһаһы мине ҙур бейеклектәргә күтәрҙе. Әле ул ваҡытта донъя чемпионы исеменә дәғүә итермен тип күҙ алдына ла килтерә алмай инем. Хәҙер инде был - ысынбарлыҡ. Атай-әсәйемә миңә уҡырға һәм яратҡан спорт төрөм менән шөғөлләнергә мөмкинлек биреүҙәре өсөн рәхмәтемде белдерәм. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ күнекмәләр, сборҙар араһында яҡындарым, бигерәк тә әсәйем менән һөйләшеү өсөн ваҡыт табырға тырышам. Был миңә ифрат ҙур көс бирә".



Минең остазымдың уңыш сере һәр спортсыға айырым иғтибар бүлеүендәлер, тип уйлайым. Ул - остаз ғына түгел, киң ҡарашлы шәхес. Ихлас, ғәҙел, кәрәк саҡта ҡаты һәм талапсан. Минең өсөн иң мөһиме, ул яҡшы психолог. Ни тиһәң дә, һәр спортсының еңелеүҙәре, уңышһыҙлыҡтары була. Бокс менән шөғөлләнеүҙән арып, барыһын да ташлап ҡуйырға, башҡа эш менән шөғөлләнергә уйлаһам, ул һәр ваҡыт кәрәкле һүҙҙәр таба. Тау аҡтарырҙай көс-дәрт биргән тренерым менән бәхетлемен.

### Иң ышаныслы

"Тормошомдағы икенсе ҡатын-ҡыҙ - ул игеҙәгем Алина. Беҙ был донъяға бергә килгәнбеҙ, бер һуҡмаҡтан атлайбыҙ. Әлбиттә, ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ бала саҡтан төрлө булды. Мин спортҡа ылыҡтым, ә ул бөтөнләй икенсе өлкәне һайланы. Хәҙер инде үҙ ғаиләләребеҙ бар, әммә һәр саҡ беҙ бергә, уй-кисерештәребеҙ, хәстәребеҙ уртаҡ. Алинаға эс серҙәремде лә һөйләйем, иң ышаныслы кеше ул.

Әммә бигерәк нескә күңелле, тәрән хисле лә. Өфөлә үткән ярышҡа килһә, минең алышҡанды ҡарай алмай, буҫлығып илап бөтә. Әйтерһең, миңә түгел, уға тондоралармы ни! Енеп сыҡһам, игеҙәгемдән дә бәхетле кеше булмай. Уның ошо эскерһеҙ һөйөүе, ышанысы шулай уҡ миңә көс бирә.

### Еңеүҙәргә әйҙәүсе

Тренерым Мария Юрьевна Карабанова менән бокс секцияһында шөғөлләнә башлағанда, ул әле егерме йәшлек кенә ҡыҙ ине. Тәүҙә уны бер кем дә етди ҡабул итмәне, хатта тәрбиәләнеүселәренән мыҫҡыл итеүселәр ҙә булды. Әммә ул сибек ҡыҙҙың башҡорт боксын үҫтереүгә индергән өлөшөн баһалап бөтөрлөк түгел. Мария Юрьевнаның ҡулы аҫтында тотош бер быуын спорт мастерҙары, чемпиондар үҫеп сыҡты. Рәсәй боксындағы күп ир-егет тренерҙар быға өлгәшә алмай.

### Иң мөһим кешем

"Минең тормошомда иң мөһим ҡатын-ҡыҙ - кәләшем Нурия. Беҙ 2016 йылда Нижневартовск ҡалаһында нефть илдәре араһында барған халыҡара ярышта таныштыҡ. Ул ваҡытта Нурия университетты тамамлап, ҡунаҡханала эшләп йөрөй ине. Уны күргәс, шунда уҡ ғашиҡ булдым. Телефон номерын һорап алдым. Башҡортостандыҡы булып сыҡты, бала сағында ғаиләһе менән ошо төбәккә күсеп киткән. Тыуған яғына алып ҡайттым, 31 майҙа ғаилә ҡороуыбыҙға бер йыл була.

Нурия тыйнаҡ, аҡыллы, минең терәк-таянысым, илһам сығанағым. Ул инде боксты ла аңлай, бөтә алыштарға йөрөй, боксерҙарға үҙ баһаһын бирә, ҡайһы ваҡытта ауыр буласағын белеп тора. Әммә бер ваҡытта ла күнекмәләргә ҡыҫылмай, кәңәш бирмәй. Бары тик янымда булырға тырыша. Әлбиттә, борсолоуҙар була, аныҡлап улар тураһында һөйләшәбеҙ. Нурия һәр саҡ дәртләндерер өсөн һүҙ таба. Мин уға шундай хәстәрлеге һәм мөхәббәте өсөн бик рәхмәтлемен.

### Көтөп алынғаны

Күп тамашасылар һинең рингҡа сығыуыңды һәм алышыуыңды ғына күрә. Һәр алыш артында ауыр күнекмәләр ята. Бөтә ҡала йоҡларға ятҡанда һин сумкаңды йыйып, буш залға юлланаһың. 12 раунд спарринг үткәрәһең, көс-хәлең ҡалмай, әммә барыбер дауам итәһең. Ҡайҙа ҡарама сикләүҙәр: туҡланыуҙа, ял итеүҙә, хатта һәр аҙымда. Онотолоп ял итеү, теләгән ваҡытта дуҫтар менән осрашыу мөмкин түгел. Бары тик даими контроль һәм ҡаты тәртип.

Әммә спортсы тормошонда бер мәл бар. Еңеүеңде иғлан итеп сыңлаған гонг тауышы, судья ҡулыңды күтәргән мәл ул. Был минутта бөтә ҡорбандар ҙа, үрҙәге мәшәҡәттәр ҙә сүп кеүек тойола. Сөнки ҡан-тир түгеп яулаған еңеү тойғоһонан да ҡиммәтерәк нәмә юҡ.

**Шулай тип тамамланы һүҙен Артур Собханғолов. "Еңеү" һүҙе рус телендә ҡатын-ҡыҙ затында. Ә Артур өсөн ул әле атаған ҡатын-ҡыҙҙарҙан ҡала иң көтөп алынған, бөтә йәшлеген, көсдәртен биргән тормоштағы иң мөһим ҡиммәт, тойғо. Уға тағы ла күберәк еңеүҙәр теләйек!**

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Тын алыуы ауырлашһа...

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы лимон йәки алманы һүрән утта 10 минут бешереп, һутын һығып алырға, 2 ҡалаҡ глицерин ҡушырға, барлыҡҡа килгән шыйыҡлыҡ күләмендә бал ҡушырға. Көнөнә бер тапҡыр эсергә.

❖ Үҫемлек майы, камфара спиртын, 10 процентлы һеркәне бер күләмдә алып, йөн туҡымаға аша компресс яһарға.

❖ 1 ҡалаҡ бал, гөлйемеш, ҡарағат һәм ҡурай еләге ҡатнашмаһына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут термоста төнәтергә, ас ҡарынға көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Бауырға...

❖ 1:1 нисбәтендә тоҙло кәбеҫтә һыуы менән помидор һутын ҡушып эсергә.

❖ Бауыр ауыртҡан ваҡытта көнөнә 3 тапҡыр ҡуйы итеп гөлйемеш тамырын ҡайнатып яртышар йәки 1-әр стакан эсергә.

### Йәшелсәһеҙ булмай

❖ Һыҙлауыҡ, шешек сыҡҡанда, өшөгәндә, бешкәндә, сөйәлдәрҙе йомшартҡанда һуған ашарға, ауыртҡан ергә ябырға.

❖ Сәс ҡойолһа, ҡорсаңғы төшһә, һарымһаҡ аша, тәнеңде ышҡы.

❖ Йөрәкхәт оҙаҡ йүнәлмәһә, селдерей япрағы, әстерхан сәтләүеге, лимон, гөлйемеш, алоэ ярҙамға килер.

❖ Шешек һәм сиҡандарҙан помидор, аҡ сәскә (ромашка), ҡомалаҡ, юл япрағы, үгәй инә япрағы (мать-и-мачеха), муйыл ҡоткара. Шуларҙы аша, тәнеңә яп.

✓ *Ялтырауыҡтар, бейегерәк йорттар, ҡиммәтлерәк транспорт төрө алыу, үтә ҡыйбат кейемдәргә төрөнөү һәм ошо юлда башҡалар менән ярышыу - был шайтан юлы.*



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БУЛҒАНЫНА ШӨКӨР ИТӘЙЕК!

**Донъяуи әйберҙәрҙең булғаны менән риза булып, шөкөр итә белеү, ҡәнәғәтһеҙлек күрһәтмәү - кешене беҙгән матур фиғелдәрҙең береһе ул. Был донъяның бәхет сере - Аллаһы Тәғәлә тәҡдире менән ҡәнәғәт булыу, тигән аҡыл эйәләре. Был, тәү сиратта, матди байлыҡҡа ҡағыла.**



Аллаһы Тәғәлә изге Китабында үҙебеҙҙән бай, етешерәк йәшәгәндәргә көнләшеүҙән тыя. Уларҙың мөлкәте, матди байлығы кемдәлер Алла биргәндәргә ризаһыҙлыҡ тыуҙырасағын иҫкәртә. Башҡа кешеләрҙең мөлкәтенә, етеш тормошона көнсөллөк менән ҡараған кеше бер ҡасан да бәхетле була алмай. Кеше үҙе күпме генә йыймаһын, тапмаһын, алмаһын, төҙөмәһен, эшләмәһен - һәр саҡ үҙенән байыраҡты күреп, тыныслығын юғалтасаҡ. Сөнки кеше нәфсеһенең төбө юҡ, ике алтын далаға эйә булғандар мотлаҡ өсөнсөһөн көҫәйәсәк, тип бушҡа ғына әйтеп ҡалдырмаған Бәйғәмбәребеҙ. Башҡа кешеләргә бирелгән матди ниғмәттәргә ҡыҙығып, үҙеңде матди яҡтан байыраҡтар менән сағыштырып, ризаһыҙлыҡ күрһәтеү - Аллаһ тәҡдиренә ҡаршы барыу була ла инде.

Бер мөъмин Ҡәғбә тирәләй тауаф ҡылған һәм туҡтауһыҙ: "Йә, Аллаһ, һин минең менән ризамы?" - тип ҡабатлар булған. Быны бөйөк ғалим, имам Әш-Шәфии ишетеп ҡалған. "Ә һин үҙең Аллаһы Тәғәлә менән ризаһыңмы?" - тип һораған ул теге кешенән. "Аллаһы Тәғәләнән риза булыу нисегерәк була һуң ул?" - тип төбәлгән теге кеше ғалимға. Имам: "Аллаһы Тәғәлә менән риза булыу - башыңа бәлә төшкәндә лә Аллаһы Тәғәлә һиңә бәлә менән бергә донъя ниғмәттәрен биргәндәге кеүек үк ҡыуаныу. Байлыҡта ла, фәҡирлектә лә - бөтә хәлдәрҙә лә Аллаһы Тәғәлә тәҡдиренә шөкөр итеү. Шул саҡта һин Раббың менән риза булғандар исемлегенә яҙыласаҡһың", - тип яуап бирә.

Ялтырауыҡтар, бейегерәк йорттар, ҡиммәтлерәк транспорт төрө алыу, үтә ҡыйбат кейемдәргә төрөнөү һәм ошо юлда башҡалар менән ярышыу - был шайтан юлы.

Аллаһ һәр кемгә лә тейешле өлөштө бирә, бер кем дә был донъяға ризыҡһыҙ тыумай. Берәүҙәргә аҡса эшләү һәләте бирелә, Аллаһы Тәғәлә тырышлыҡтары өсөн уларға бар юлдарҙы аса. Икенсе берәү тырышып та, аҡыллы булып та аҡсаға мандып китмәй. Бәлки, эше лә, вазифаһы ла быға мөмкинлек бирмәйҙер. Әммә улар икеһе лә үҙ урынында.

Ниғмәттәрҙе Аллаһы Тәғәлә бүлә, кемгәлер күберәк өлөш эләгә, кемгәлер әҙерәк. Әммә донъя муллыҡтары кеше менән уның ҡәберенә инмәй, улар әҙәм балаһына аманат итеп кенә бирелә, етмәһә, Ҡиәмәт көнөндә һәр бирелгән ниғмәт өсөн яуап тотаһы бар әле. Кемдең донъя байлыҡтарынан торған йөгө ауырыраҡ, уға ҡыйыныраҡҡа тура киләсәк хатта. Риүәйәттәр һәм хәҙистәрҙән күренеүенсә, бәйғәмбәрҙәр араһында иң һуңғы йәннәткә инәсәк Сөләймән ғәләйһиссәләм булһа (уға бөйөк дәүләт һәм бик күп донъя ҡиммәттәре бирелә), Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тарафдарҙары араһында Ғабдрахман ибн Ауф исемле мәшһүр сәхәбә йәннәткә "шыуышып инәсәк". Был сәхәбәнең дәрәжәһенә шик булыуы мөмкин түгел: исеме һәр саҡ дүрт хәлифтән һуң телгә алыныуы ғына ла уның иманының һәм дин хаҡына хеҙмәтенең юғары кимәлдә булыуын күрһәтә. Йөҙҙәрсә дөйә алып килгән карауанын, хатта бар байлығын бер тамсы ла үкенесһеҙ саҙаҡа итеп бирә алған кеше була ул. "Ташты күтәреү етә, унда мотлаҡ алтын табасаҡмын кеүек тойола миңә", тип әйтә был сәхәбә. Ләкин ул бар ошо байлыҡтың Аллаһ ниғмәте, Уның бәрәкәте булыуын аңлап, шөкөр итеп, тәкәбберләнмәй йәшәй.

Ауыр замандар ҙа була. Ҡайһы бер мәлдәрҙә араларында ашарҙарына булмаған сәхәбәләр килеп сыға. Ләкин улары ла фәҡирлек хәлендә булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең мохтажлыҡтарын күрһәтмәйҙәр, хәллерәк ҡәрҙәштәренең ярҙамынан да баш тарталар. Мохтажлыҡта (ләкин хәйерселектә түгел) йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, Әбү Хөрәйрә, Билалдар үҙҙәрен лайыҡлы тотоп, хәлдәренә зарланмай, булғанына шөкөр итеп, Аллаһы Тәғәләнең тәҡдире менән күнеп йәшәп, итәғәтлектә Аллаһ рәхмәтенә ирешәләр.

Эйе, үҙеңә бирелгән ниғмәттәрҙең ҡиммәтен аңлар өсөн, ошо ниғмәттәр бирелмәгән кешеләргә ҡарарға кәңәш итә ғалимдар. Бары шул саҡта ғына шөкөр итергә, донъя менән ҡәнәғәт булып йәшәргә мөмкин.

Кешенең, үҙенә нисек кенә ауыр булмаһын, ниндәй генә ҡыйынлыҡтар кисермәһен, зарланып йәшәргә хаҡы юҡ. Хатта зәғиф булғанда ла, был физик етешһеҙлек артында оло бүләк ятыуы тураһында иҫкәртелә. Зарланмай, Аллаға, башҡа кешеләргә ләғнәт уҡымай ғүмер кисеп, иман менән был донъянан киткәндәр үҙҙәренең сабырлығы, ныҡлығы өсөн сауапты күберәк тә аласаҡ хатта. Ә бөтә тән ағзалары урынында, аҡылы теүәл, зиһене асыҡ булған кеше үҙенең хәле менән бер мәлгә булһа ла зарлана ала микән? Булғаны менән риза ҡалып, Раббыңа шөкөр итеү бик ҙур байлыҡ ул.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ
әҙерләне.**

❖ Ҡара торма (редька), кәбеҫтә, ҡабаҡ тәндәге тимерәүҙе дауалай, шулар менән тимерәүле урынды ышҡыйһың, ябаһың.

❖ Лимон, кишер, керән (хрен), ҡыяр, фасолде косметик маҡсатта йыш ҡулланалар. Битлек эшләгеҙ, һутын һөртөгөҙ.

## Балыҡ аша

❖ Балыҡ һәм унан әҙерләнгән ризыҡтар, балыҡ консервалары ла аҡһымға, витаминдарға, минераль матдәләргә бай. Айырыуса майлы һимеҙ балыҡтар нервы епсәләре һәм баш мейеһе өсөн файҙалы. Уҡыусыларға яҡшы өлгәшеү өсөн шулай уҡ балыҡ ашау кәрәк.

## Ашҡаҙан аҫты биҙе

❖ 1 балағалаҡ ваҡланған бәпембә тамырына 3 балғалаҡ бөтнөк япрағы ҡушырға ла, 1 стакан ҡайнап сыҡҡан һыуға һалып, 5-7 минут төнәтергә. Көнөнә 2-4 мәртәбә ашар алдынан 1/4 стакан эсергә. Биш аҙнанан да кәм эсмәҫкә. 7-10 көнлөк тәнәфес яһау мотлаҡ.

## Геморрой

❖ Геморройҙан ябай ғына дауа: ваҡ ҡырғыстан ҡырылған 1 ҡалаҡ керән (хрен) тамырын эмаль һауытта 300 мл һыуға һалып, ҡайнатып сығарығыҙ. Плитәнән алып, ҡапҡасын ябып төнәтергә, һөҙөп, шешәләргә ҡойоп, һыуыҡҡыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. 1 литр керән төнәтмәһен эсеп бөтөүгә сир ҙә юҡҡа сыға.

## Бөйөр

❖ Бөйөрҙә таш барлығын белгәс тә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр стакан ҡайын һуты эсергә.

❖ 4-6 ай буйына көнөнә 3-4 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ кишер һуты эсергә.

❖ көнөнә 1 тапҡыр 1 ҡалаҡ зәйтүн майы эсергә.

❖ 2 аҙна буйы көнөнә 3-4 тапҡыр 1 лимон һутына һыу йәки кишер, сөгөлдөр, ҡыяр һуты ҡушып эсергә.

❖ 3 аҙна буйы ашар алдынан сирек йәки яртышар стакан картуф бешкән һыуҙы эсергә. Һәр һутты сиратлап эсегеҙ, бөтәһен бер көндә түгел.

## Миләш

❖ Миләштә кишергә ҡарағанда ла каротин күберәк. Миләштә витаминдар күп, уны тирләтә, үтте һәм һейҙекте бүлеп сығарырға ярҙам итеүсе дарыу рәүешендә, юғары ҡан баҫымын төшөрөү өсөн файҙаланалар. Миләш һырҡындыһы менән һейҙек ҡыуығы сирҙәрен, эс китеүҙе лә дауалайҙар, һутын күреү һәләтен яҡшыртыу өсөн дә ҡулланалар.

❖ Ҡара миләште гипертония ауырыуҙарын дауалау һәм киҫәтеү өсөн ҡулланалар, ҡан юлдары склерозынан профилактика өсөн файҙалы. Унда С витамины аҙ.

❖ 1 ҡалаҡ кипкән миләшкә 1 стакан ҡайнап торған һыу ҡойорға һәм сәй кеүек бешерергә. 1 сәғәт төнәткәс, көнө буйы 2-3 тапҡыр эсәһең.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ваҡ себен турғайы

**(Малая мухоловка)**



Өҫтән ҡарағанда көлһыу-көрән, башы, муйыны көлһыу, тамағы һәм түше сағыу ҡыҙылһыу һары төҫтә. Ҡойроғо аҡ, унда ҡара төҫ менән "Т" хәрефе "яҙылған". Ошо сағыу төҫө арҡаһында уны таң турғайы, йәки сейәбей менән бутарға ла мөмкин, тик ваҡ себен турғайы уға ҡарағанда бәләкәйерәк. Ағас-ҡыуаҡлыҡтар араһында ваҡ себен турғайы барлығын йыраҡтан уҡ белеп тороргоһоғоҙ: "хи-ли...хи-ли..." тип ҡабатлауы уны шулай таныулы итә. Йыры иһә сағыу, яңғырап торған сутылдау.

Башҡортостандың төньяҡ өлөшөндәге, шулай уҡ таулы Уралдың ташландыҡ ҡуйы урмандарында йәшәй. Ағиҙел үҙәнендә лә бар. 2001 йылда Бәләбәй ҡалҡыулығында Шарлама йылғаһы буйындағы өйкөм бер ағаслыҡта осраттыҡ. Бер йылдан Шүлгәнташ ҡурсаулығы сигендә шундай күренешкә тап булдыҡ - июль айында ата менән инә ҡош 5 бәпкәһен селәүсен ташып ашата ине.

## Мышар барҡылдағы

**(Рябинник)**



Мышар барҡылдағы менән барҡылдаҡтар ғаиләһенән башлайбыҙ. Был ғаиләгә барҡылдаҡтар, таштурғайҙар, шаҡылдаҡтар, утҡойроҡтар, таң турғайҙары, һандуғастар, шиҡылдаҡтар инә. Барҡылдаҡтар үҙҙәре сыйырсыҡ ҙурлыҡ ҡоштар, ҡанаттары менән ҡойроҡтары оҙон. Ямғыр селәүсене, моллюскылар менән туҡлана. Ҡайһы бер төрҙәре ҡышлай.

Мышар барҡылдағы эре ҡош иҫәпләнә, башының түбәһе, ҡойроғонон өҫкө яғы күгелйем, ҡорһағы, ҡанаттарының аҫты аҡ, арҡаһы ерән-көрән, түше, ҡабырғалары ерән, ҡара таптары бар. Тауышы сағыу, "кррр-кррр" тип саҡыра.

Ҙур булмаған колониялар менән йәшәй, асыҡ урмандарҙы, ағаслы парктарҙы үҙ итә. Ояһын һалам, ваҡ ботаҡтарҙан тупраҡ ҡушып яһай, улар ҡыуаҡлыҡтарҙа, ағастарҙа урынлаша. 4-8 йомортҡа һала. Оялары тирәһендә ныҡ тауышланалар, кем дә кем ояға яҡын килә икән, уларҙы ҡысҡырып ҡурҡытырға тырыша. Ҡышты ҡалаларҙа, мышар ағастары үҫкән ерҙә үткәрә. Ҡайһы бер йылдарҙа Өфөлә ошо рәүешле ҡышлаусы мышар турғайҙарының бер тубы ғына 200-гә етә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).**



## 25 МАЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45 Д/ф "Больше чем золото". [0+]
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Потерянная жизнь". [16+]
23.55 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Когда горит огонь". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три в одном". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.15 Специальный репортаж.**
**12.15 Навигатор истории. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. Дети. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Формула здоровья. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Созвездие талантов". [6+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Господа Головлевы". [16+]**
**1.45 Спектакль "Соловьи прилетели". [12+]**
**3.45 На своей земле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 26 МАЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Потерянная жизнь". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Когда горит огонь". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три в одном". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**23.45 На своей земле. [12+]**
**0.00 Х/ф "Жить". [16+]**
**1.30 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 27 МАЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Жить здорово!" [16+]
9.55, 12.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.25 "Курбан-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.15, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Потерянная жизнь". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00 Праздник Курбан-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30 Т/с "Когда горит огонь". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30, 14.30 Святые места Башкортостана. [12+]**
**9.00 "Курбан-байрам". Прямая трансляция из Уфимской соборной мечети Ляля-Тюльпан.**
**10.00 "Праздник веры и добра!" Концерт. [12+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 Экологично. [6+]**
**11.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**12.00 Спектакль "Провидец". [12+]**
**15.00 Республиканский праздник курая им.Гаты Сулейманова. [12+]**
**17.00 "Курбан-байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети Ляля-Тюльпан. [6+]**
**18.00 Квадратные метры. [12+]**
**18.15 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Книга жизни. [12+]**
**19.30 Концерт "Творчество - синоним счастья". [12+]**
**21.00 Защитники Отечества. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Взятки гладки". [12+]**
**1.45 Спектакль "Приключения Ходжи Насретдин". [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 28 МАЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Потерянная жизнь". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.30, 2.20 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Когда горит огонь". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**10.45, 20.15 Материнство и детство. [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 17.00 Территория женского счастья.**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00, 3.15 Навигатор истории. [12+]**
**16.15 Уралым. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Связь". [16+]**
**1.30 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 29 МАЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 Давай поженимся! [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" [16+]
22.55 Премьера. "Команды". [16+]
23.55 Д/ф "История рок-фестиваля Revival 69". [18+]
1.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
5.59 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины. Новые серии". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Поймай меня, если сможешь". [12+]
23.35 Х/ф "Некрасивая". [12+]
3.10 Х/ф "Александра". [16+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Три мушкетера". [12+]**
**10.45 Полезные новости. [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Хазина. [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 На своей земле. [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Курай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Настя". [12+]**
**1.45 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 30 МАЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Хочется праздника". [12+]
11.10 Д/ф Премьера. "Сила ароматов. Горы". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Наше всё. Сделано в России". [12+]
13.05 Т/с "Шифр". [16+]
17.10 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20, 21.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
22.35 Д/ф Премьера. "История Мэрилин Монро". К 100-летию со дня рождения великой актрисы. [16+]
23.35 Бокс. Д. Бивол - М. Айферт. Бой за титул Чемпиона мира по версиям WBA и IBF. Прямая трансляция из Екатеринбурга.
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
5.59 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Тебе звонит судьба". [16+]
0.40 Х/ф "Развод с препятствиями". [12+]
4.00 Х/ф "Мама напрокат". [16+]
5.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15, 15.45 Формула здоровья. [12+]**
**8.30 На своей земле. [12+]**
**8.45 Хазина. [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Экологично. [6+]**
**11.45 "Ат уйнатып!". [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30, 4.45 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**0.45 Х/ф "На Дерибасовской хорошая погода, или на Брайтон-Бич опять идут дожди". [16+]**
**2.15 Спектакль "Счастье". [12+]**
**4.15 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 31 МАЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 Д/ф "Плохой хороший человек". К 85-летию со дня рождения Олега Даля. [12+]
14.05 Т/с "Вариант "Омега". [16+]
17.00 Д/ф "История Мэрилин Монро". К 100-летию со дня рождения великой актрисы. [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "До Ре". [12+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.35, 2.30 Х/ф "Злая шутка". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50, 1.40 Д/с "Рассказы из русской истории". [12+]
12.45 Фестиваль детской художественной гимнастики "Алина". Ко Дню защиты детей.
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Большой концерт ко Дню защиты детей.
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.07 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Автограф. [12+]**
**8.15 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Ҡустәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып!". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Ап-асыҡ. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Полезные новости. [12+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Башкортостан#вместе. [12+]**
**16.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Спектакль "Һинйыкай и Юлдыкай". [12+]**
**19.30 Квадратные метры. [12+]**
**19.45, 4.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 "Верность сцене". [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**23.00 Концерт Искандара Газизова. [12+]**
**0.45 Х/ф "Поездка в Висбаден". [12+]**
**2.15 Спектакль "Дурочка". [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Май (Зөлхиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (8) дүшәмбе | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 18:47 | 21:31 | 23:01 |
| 26 (9) шишәмбе | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 18:48 | 21:32 | 23:02 |
| 27 (10) шаршамбы | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 18:49 | 21:34 | 23:04 |
| 28 (11) кесе йома | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 18:50 | 21:35 | 23:05 |
| 29 (12) йома | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 18:51 | 21:37 | 23:07 |
| 30 (13) шәмбе | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 18:52 | 21:38 | 23:08 |
| 31 (14) йәкшәмбе | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 18:52 | 21:40 | 23:10 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Әгәр сәйәхәттән һуң юғары температура, тын ҡыҫылыу йәки бил ауыртыу барлыҡҡа килһә, шунда уҡ табиптарға мөрәжәғәт итергә һәм шул иҫәптән ҡайҙа барыуығыҙ тураһында хәбәр итергә кәрәк.*



ХӘҮЕФ-ХӘТӘРҘӘР

# ХАНТАВИРУСЫ НИМӘ ТАҒЫ?

**Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш эпидемиологы Азат Мөхәмәтйәнов хантавирус тураһында белергә кәрәклеген һәм ял миҙгелендә унан ҡурҡырға кәрәкме, йоҡмы икәнен һөйләне.**




### Был нимә?

Хантавирус кимереүселәр ташыған патогендар төркөмөнә ҡарай. Кеше өсөн уның ике формаһы хәүефле: бөйөр синдромы менән геморрагик биҙгәк (Евразияға хас), һәм үпкә синдромы (йышыраҡ Америкала, үлем осраҡтары 30-40 процентҡа тиклем). Ауырыу ауыр үтә: юғары температура, ауыртыу, һуңынан үпкә йәки бөйөрҙәрҙең зарарланыуы. Айырым дауалау юҡ - организмға интенсив ярҙам ғына итәләр.

### Нисек күсә?

Ауырыу һауа-туҙан юлы менән кимереүселәрҙең ҡоро экскременттары менән туҙанлы һауа һулағанда күсә. Кешенән кешегә вирус йоҡмай.

### Хантавирус Рәсәйгә инә аламы?

Сит илдән инеү осрағы булыуы мөмкин, әммә Рәсәйҙә таралып китмәйәсәк, сөнки ул йоғошло түгел. Беҙҙең эпидемиологик күҙәтеү системаһы күптән инде Уралда һәм Себерҙә булған урындағы штамдарҙы контролдә тотоуға яраҡлаштырылған. Халыҡ өсөн төп хәүеф - урындағы кимереүселәрҙең яҙ һәм йәй миҙгелендәге әүҙемлеге. Бигерәк тә урманда һәм дачаларҙа һаҡланырға кәрәк.

### Нисек һаҡланырға?

- Асыҡ һауыттан һыу эсмәгеҙ.
- Баҡсала эшләгәндән һуң йәки урмандан ҡайтҡас, ҡулығыҙҙы һабынлап йыуығыҙ.
- Кимереүселәр булған бүлмәләрҙе таҙартҡанда дезинфекция саралары ҡулланып, респираторҙа һәм бирсәткәлә генә эшләгеҙ.

Хантавирус етди, әммә һирәк осрай торған сир икәнен иҫтә тоторға кәрәк. Паникаға бирелмәгеҙ, әммә иғтибар кәрәк. Әгәр сәйәхәттән һуң юғары температура, тын ҡыҫылыу йәки бил ауыртыу барлыҡҡа килһә, шунда уҡ табиптарға мөрәжәғәт итергә һәм шул иҫәптән ҡайҙа барыуығыҙ тураһында хәбәр итергә кәрәк.

# ЙӘШЕН

**Иглин районы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Юремис-Надеждин ауылы эргәһендә агасты йәшен атып сәрпәкләгән. Бер кем дә зыян күрмәгән.**

Йәшен - һоҡландырғыс тәбиғәт күренеше генә түгел, ә ғүмерҙәрҙе ҡыя алырлыҡ хәүеф тә. Күк йөҙөн ялағай уттары яҡтыртҡан, йәшен йәшнәгән ваҡытта хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре хаҡында онотмау мөһим. Һаҡлыҡ сараларын үтәмәү үлемгә килтереүе лә мөмкин икәнен иҫтә тотоғоҙ.

- Урманда һәм парктарҙа ағастарҙан мөмкин тиклем алыҫыраҡ китегеҙ. Урманда һәм парк зоналарындағы ағастар йәшен өсөн сәнкә әйләнеүе бар. Йәшен килгәнен күреп ҡалһағыҙ, асыҡ урындарҙан китергә һәм хәүефһеҙ урында - иң бейек ағастарҙан кәмендә 30-40 метр алыҫлыҡта булырға ашығығыҙ. Янғыҙ торған ағас төбөндә йәшенмәгеҙ - был айыруса хәүефле.
- Ҡалала булһағыҙ, ышаныслы ышыҡ урын эҙләгеҙ.
- Әгәр йәшенгә ҡала сиктәрендә эләкһәгеҙ, тиҙ арала ышыҡланыр урын табырға тырышығыҙ. Бының өсөн магазиндар, сауҙа үҙәктәре һәм торлаҡ йорттар иң яҡшыһы булыр - бындай төҙөлмәләр күбеһенсә электр разрядтарынан һаҡлаусы ҡорамалдар менән йыһазландырыла.
- Металл - яҡшы электр үткәргес, шуның өсөн был материалдан эшләнгән конструкцияларҙан: йәмәғәт транспорты туҡталыштарынан, реклама щиттарынан, тимер кәртәләрҙән алыҫ торогоҙ.
- Йәшен ваҡытында һыу инеү, балыҡ тотоу хәүефле. Һыу - бик яҡшы ток үткәргес, шуның өсөн уның янында бигерәк тә һаҡ булырға кәрәк. Һыуға атҡан йәшен үлемесле зарядын алыҫ араға тарата ала. Йәшен ваҡытында һыу инеү, балыҡ тотоу, хатта һыуға яҡын тороу ҙа ҡәтғи тыйыла. Кәмәлә булһағыҙ ҙа һеҙ хәүеф зонаһында икәнде онотмағыҙ.

"Онотмағыҙ: һеҙҙең хәүефһеҙлек - һеҙҙең ҡулда. Тәбиғәт күренештәренә ҡолаҡ һалығыҙ һәм һаҡлыҡ сараларын тейешенсә үтәгеҙ. Ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә ҡаушап ҡалмағыҙ. Ҡотҡарыу хеҙмәтенең телефоны - 112. Был номер хатта иҫәптә аҡса булмаған осраҡта һәм SIM-картаһыҙ эшләй", - тип иҫкәртәләр Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында.

# МАЛЫҢДЫ ЛА ҺАҠЛА!

**Ветеринария буйынса дәүләт комитеты белгестәре көтөүҙәге малға ниндәй ҡурҡыныс һәм ауырыуҙарға дусар булыу мөмкинлеге тураһында иҫкәртә.**

- Йәрәхәтләнеүен йәки ауырыу башланыуын ваҡытында күрер өсөн һыйыр һәм һарыҡтарҙың торошон иғтибар менән күҙәтергә кәрәк.
- Ветеринарҙар аңлатыуынса, һыйыр теленең һиҙгерлеге түбән һәм уның ашарға ярамаған аҙыҡты төкөрөү һәләте юҡ. Улар сүп-сарҙы "сортлап" тормай һәм үлән менән хәүефле нәмә ашарға мөмкин. Ашҡаҙан тишелеүен булдырмау өсөн һыйырға магнит индерелә, улар металл әйберҙе йыя.
- Һыйырҙың елене яраланһа, уны тиҙ арала дауалау мөһим. Ә һөт каналдары инфекцияһын антибиотик менән дауалағанда һыйырҙың һөтө ҡулланыуға яраҡһыҙ.
- Үлән аша малдың селәүсен менән зарарланыуы ла ихтимал, бигерәк тә һарыҡ унан яфалана.

# АҠСАҺЫҘ ҠАЛА ЯҘҒАН!

**Өфөлә 82 йәшлек ир аферистарҙың ҡорбаны була яҙған, ләкин ваҡытында аңлап, аҡсаһын һаҡлап ҡала алған.**

Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, барыһы ла мессенджерҙа иҫәплегесте тикшереү тураһында хәбәрҙән башланған. Һуңынан пенсионерға "банктан" һәм "полициянан" шылтыратып, уның иҫәбендәге аҡсаны сит илгә күсерәләр тип әйткәндәр. Оло кеше борсолоп киткән һәм үҙенең 3 миллион һумдан ашыу аҡсаһын иҫәптән алған, 2 миллион һумға алтын ҡойолма һатып алған һәм икенсе банкта тағы 600 мең һумын ҡулаҡсаға әйләндергән. Ошо ваҡыт эсендә мутлашыусылар уның менән бәйләнештә торған. Алтын ҡойолмаһын бирергә ваҡыт еткәс, ир кеше уйға ҡалған. Мутлашыусылар янай башлаған, ләкин пенсионер уларға ышанмаған һәм телефонын һүндергән. Икенсе көндө ул полицияға ғариза яҙған. Енәйәт эше ҡуҙғатылған.

# ЯНҒЫНДАР

**Ә был хәүеф миҙгеленә ҡарамай, йыл әйләнәһенә була торғаны. Ә шулай ҙа янғындар граждандарҙан йәйге осорҙа бигерәк тә һаҡ, йыйнаҡ булыуҙы талап итә. Шәхси йорт тирәягындағы ғына түгел, ялан-урмандарҙағы ут ҡабыуҙар бигерәк тә ҡурҡыныс тыуҙыра икәнен һәр кем иҫтә тоторға тейеш.**

Быңа әлеге ваҡытта республикала 3-4-се класлы янғын хәүефе фаразлана. Шуға бәйле урман янғындарын һүндереү бүлектәре юғары әҙерлек режимына күсерелде, тип хәбәр иттеләр республиканың Урман хужалығы министрлығынан. "Урман фондын күҙәтеү көсәйтелде, ерҙә патрулдәр арттырылды", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр ведомствола. Республикала йәшәүселәрҙе урманға барғанда иғтибарлы булырға һәм ут сығыуға юл ҡуймау өсөн янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәргә саҡыралар. Урманда, ялан-ҡырҙа усаҡ яғыу тыйыла. Урманда янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙған өсөн граждандарға - 60 мең һумға, вазифа биләгән кешеләргә - 110 мең һумға, ә ойошмаларға 2 миллион һумға тиклем штраф һалына, тип иҫкә төшөрҙөләр ведомствола. Урманда йәки ялан-ҡырҙарҙа төтөн йәки ут сыҡҡаны асыҡланған осраҡта 8 (347) 218-14-14 номеры буйынса Башҡортостан Урман хужалығы министрлығының диспетчер хеҙмәтенә хәбәр итергә кәрәк.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 май "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. 12+
**25 май "Әҙләнем, бәгрем, һине..."** (Т.Миңнуллин, А.Нәҙерголов). 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 май "Апельсин"** балалар студияһының отчет тамашаһы. 19:00. 6+
**24 май "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н.Саймон, А. Наҙырғолов), 16+
**25 - 26 май Балалар мюзиклы** студияһы отчет тамашаһы. 19:00. 6+
**27 май "Аладдин"** (И. Казакова, Р. Хәкимов), мажара. 11:00. 6+
**27 май "Маленький принц"** (А. Сент-Экзюпери, С. Безруков), музыкаль әкиәт. Мәскәү Губерна театры. 19:00. 6+
**28 май "Апельсин"** балалар студияһының отчет тамашаһы. 19:00. 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 май "Кукольная кухня"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), 11:00. 0+
**23 май "Вечно эта 345-я",** музыкаль спектакль. 12:00 һәм 15:00. 6+
**24 май "Ике бесәй",** башҡорт халыҡ әкиәте. 12:00 һәм 15:00. 0+
**27 мая "Коза - дереза"** (М. Супонин). 12:00 һәм 15:00. 0+
**28 май "Руслан и Людмила"** (А.Пушкин). 11:00. 6+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 май "Музыка КИНОшедевров в сиянии тысячи свечей"** симфоник шоуы. 6+
**28 май "Классика на все времена"** концерты. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**23 май "Море. Остров. Клад. "** (Д. Сәлимйәнов), пират тарихы. 13:00. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 май "Вася Лентяйкин в Стране сказок".** "Маскарад" студияһы тамашаһы. 0+
**28 май "Сәскә ат, тыуған Башҡортостаным!"** "Торатау" балалар бейеү ансамбленең отчет концерты. 0+

### А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**28 май "Доктор"** (М. Икрамова), лирик комедия. Сибай концерт-театр берекмәһе сәхнәһендә үтә. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**26 май Фәдис Ғәниевтың** концерты. 6+

### БР Милли музейы

**23 һәм 26 май "Кейеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+
**27 май "Ашыҡ"** башҡорт халыҡ уйыны. 12:00. 6+
**28 май "Йәш археолог мәктәбе"** оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+
**28 май "Семья Аксаковых: служение Отечеству"** С.Т. Аксаковтың тыуыуына 235 йыл айҡанлы күргәҙмәнең презентацияһы. 15:00. 0+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# РӘМИ МИҘАЛЫ

**Өфөлә тәүге тапҡыр Рәми Ғарипов миҙалы тапшырылды. Награда яҙыусыларға ғына түгел, милли әҙәбиәтте үҫтереүгә тос өлөш индергән сәхнә оҫталарына, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренә, сит ил граждандарына ла тапшырыла.**

Наградаға тәүгеләрҙән булып Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт драма театры актеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы һәм Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Артур Кәбиров лайыҡ булды.

- Артур Кәбиров беренсе булып сәхнәлә Рәми Ғарипов образын спектаклдә кәүҙәләндерҙе, шағир ижады буйынса концерт ҡуйҙы. Һәм ул күп тапҡыр беҙҙең классик-драматургтарҙың спектаклдәрендә уйнаны. Унын башҡорт шиғриәтендә легендар шәхестәр - Шәйехзада Бабич, Салауат Юлаев, ә хәҙер Рәми Ғариповтың наградалары бар ине, - тине Яҙыусылар союзы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов миҙалды тапшырып.

Башҡортостандың күренекле халыҡ шағиры иҫтәлегенә булдырылған миҙалға шулай уҡ Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Ҡәҙим Аралбай, Хәсән Назар, Гөлфиә Юнысова, Тамара Ғәниева, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Михаил Чванов, шағирә Дилә Булгакова, кинорежиссер Булат Йосопов, Өфө фән һәм технология университетының башҡорт филологияһы һәм шәрҡиәт факультеты деканы Гөлфирә Абдуллина, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультеты деканы Ләйлә Хәсәйенова һәм Салауат районының Арҡауыл ауылындағы Рәми Ғарипов музейы директоры Луиза Хәйретдинова лайыҡ булды.

# БЕҘҘЕҢ ЗИЛӘ - КОРОЛЕВА




**Өфөлә "Башҡортостан Республикаһында миссис Рәсәй Донъя -2026" инклюзив матурлыҡ конкурсына йомғаҡ яһалды.**

Конкурс 18-75 йәшлек гүзәл заттарҙы берләштерҙе. Быйыл Башҡортостандың төрлө мөйөштәренән: Өфө, Межгорье, Мәләүез, Туймазы, Благовещен, Нефтекама ҡалаларынан, Иглин, Бишбүләк, Борай, Өфө районнарынан 37 ҡатнашыусы финалға сыҡты. Иң йәше - Өфөнән 18 йәшлек Диана Фәрүәзетдинова, ә иң өлкәне - 75 йәшлек Мария Ғәлиева ("Эксклюзив" категорияһында ҡатнашыусы). Был сара һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам итеүгә һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында лидерлыҡты үҫтереүгә, шулай уҡ ғаилә, әсәлек һәм шәхси ҡаҙаныштарҙы популярлаштырыуға йүнәлтелгән. Конкурста ҡатнашыусылар сибәр һәм һәләтле ҡатын-ҡыҙҙар ғына түгел, уңышҡа өлгәшкән әсәләр, ҡатындар, үҙ эшенең оҫталары, әүҙем тормош позицияһы булған ысын героинялар, ирекмәндәр ҙә. Ҡатнашыусыларҙы Рәсәй муниципаль академияһы академигы Татьяна Другова (Мәскәү) етәкселегендәге жюри баһаланы.

Коллегабыҙ, тележурналист Зилә Баймырҙина "Өфө королеваһы" исеменә лайыҡ булды, шулай уҡ "Миссис Грация" һәм "Иң яҡшы милли кейем" номинацияларында еңеү яуланы. Иглин районынан күп балалы әсә, МХО яугирының ҡатыны Фидания Рафиҡова "Йыл әсәһе" тип танылды. "Классик 40 процент" номинацияһында "Башҡортостан Республикаһында Рәсәй Донъя -2026" исемен Өфөнән Сулпан Шәнгәрәева алды. Ул июнь айында Мәскәүҙә "Миссис Рәсәй Донъя - 2026" конкурсында Башҡортостан данын яҡлаясаҡ.

# БЕР СӘХНӘЛӘ...

**Өфөнөң мәҙәни тормошонда тарихҡа инерлек ваҡиға булды: башҡорт рогы энергияһы һәм академик хор бөйөклөгө тәүге тапҡыр бер сәхнәлә осрашты. Йәғни популяр "Бүреләр" рок-төркөмө һәм Башҡортостандың Таһир Сәйфуллин исемендәге Дәүләт академия хор капеллаһы берлектәге программа тәҡдим итте.**

"Был үҙенсәлекле эксперимент музыкаль жанрҙар араһындағы ғәҙәти сиктәрҙе юйып, тамашасыларға бөтөнләй яңы яңғыраш бүләк итте. Гитара музыкаһын һөйөүселәр төркөмдөң хиттарын хор башҡарыуында тыңланы. Академик вокал яратыусылар иһә үҙҙәре өсөн заманса башҡорт рок-поэзияһының энергияһын асты", - тине филармонияның матбуғат секретары Ирина Захарова.

"Бүреләр" төркөмө быйыл 20 йыллығын билдәләй. Коллектив башҡорт телендә үҙе ижад иткән йырҙарҙы башҡара. Төркөмдөң ижади иҫәбендә өс альбом, республикала һәм унан ситтә фестивалдәр һәм концерттар, фильмдарға һәм спектаклдәргә саундтректар, симфоник оркестр менән концерт бар. Коллектив составында - Илшат Абдуллин (вокал, төркөм етәксеһе), Денис Ибраһимов (гитара), Олег Перепёлкин (гитара), Максим Осадчий (бас-гитара), Семён Конторщиков (һуҡма ҡоралдар).

# ҺӘҘИӘГӘ АРНАП...

**Film Festival History Moscow - 2026 халыҡ-ара кинофестивале эксперттары башҡорт халҡының ысын булмышын сағылдырған "Ырғыҙ" романы авторы Һәҙиә Дәүләтшинаның тормошон - "Романистка" тулы метражлы фильмын юғары баһаланы.**

"Башҡортостан" киностудияһы сценарисы һәм мөхәррире Анна Мырҙабулатова "Иң яҡшы тарихи сценарий" номинацияһында еңеү яуланы. Был проекттың беренсе дипломы түгел. 2023 йылда картина "Юл формулаһы" кино һәм сериалдар лабораторияһының питчинг финалисы булды. 2024 йылда фильм "Питер КИТ" халыҡ-ара кинофестивале конкурсында ҡатнашты, былтыр Еңеүҙең 80 йыллығына арналған Дөйөм Рәсәй сценарийҙар конкурсы лауреаты исемен алды. "Был наградаларҙың һәр береһе - республикабыҙ тарихы, талантлы ҡатын-ҡыҙ һәм яҙыусының яҙмышы профессионалдарҙың иғтибарын яулауына дәлил", - тип билдәләнеләр "Яңы башҡорт киноһы" төркөмөндә.

# МӘСКӘҮҘӘ ЛӘ...

**Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылында һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Ҙур һәм татыу ғаилә йылында илебеҙҙең баш ҡалаһында беренсе тапҡыр әсәйҙәр араһында "Башҡортостан ҡыҙы-2026" конкурсы уҙҙы.**

Күркәм сараны Мәскәү ҡалаһының мәҙәниәт департаменты булышлығында Наил Сырлыбаевтың продюсерлыҡ үҙәге ойоштортҙо. Жюри ағзалары бер тауыштан биш бала әсәһе, Өфө сәнғәт институтының театр факультетын тамамлап, әлеге көндә Мәскәүҙә йәшәгән Ләйсән Хәсәйеноваһы еңеүсе итеп билдәләне. Беренсе урынды Регина Арыҫланова яуланы, икенсе урында - Лиана Попова, өсөнсө урында - Лилиә Фикиева, "Талант" номинацияһында диплом Эльвира Рахманғоловаға тапшырылды.

Конкурс биш этаптан торҙо. Финалға сыҡҡан әсәләр балалары һәм ирҙәре менән башҡорт халҡының йолаларын күрһәтте. Проект сиктәрендә әсәләр өсөн бер нисә оҫталыҡ дәресе ойошторолдо.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОЖМАХ ҺӘМ ТАМУҠ НИНДӘЙ?

Айыуҙы еңгән - ярты ир, асыуҙы еңгән - бөтөн ир.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Донъяны яратыуға алты көн дә еткән, ә уны юҡ итеүгә... алты мең йыл кәрәк булыр.

**(Томас Браун).**

Бергә йәшәгәндәрҙең дуҫлығына өлгәшәм тиһәң, үҙендә улар менән өс айға бер күрешкәндәге кеүек тоторға өйрән.

**(Жюль Ренар).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер изге кеше үҙенең доғалары мәлендә Хоҙайға: "Мин нимә ул Ожмах, нимә ул Тамуҡ икәнен белергә теләр инем", - тип мөрәжәғәт иткән. Хоҙай уны йәнәш торған ике ишек янына саҡырған һәм береһен асып, изге кешегә шунда инергә ишарәлаған. Эскә ингәс, изге кеше ундағы бүлмәлә ҙур өҫтәл, уның уртаһында тәмле ризыҡ еҫтәре бөркөп ултырған һауыт ултырғанын күргән. Тәмле ризыҡ еҫенән шайыҡы ағып киткән хатта. Әммә өҫтәл тирәләй ултырған кешеләр быҫа-быҫа аслыҡтан үлергә әҙерләнгән хәлһеҙ ауырыуҙар һымаҡ тойолған уға. Барыһының да ҡулына үтә оҙон һаплы ҡалаҡтар тотторолған, ти. Улар был ҡалаҡтары менән һауыттан ризыҡты һоҫоп алыуын ала, әммә ҡулдарына ныҡлап беркетелеп ҡуйылған был ҡалаҡтарҙы, һаптары оҙон булғанлыҡтан, ауыҙҙарына яҡын килтерә алмайҙар, ти. Изге кеше был күренештән тетрәнеп баҫып торғанда, Хоҙайҙың: "Һин әле генә Тамуҡты күрҙең", - тигән тауышы ишетелгән.**

**Был бүлмәнән сыҡҡас, изге кеше алдында икенсе ишек асылған. Был бүлмәлә лә тәүгеһе һымаҡ уҡ күренеш пайҙа булған: шундай уҡ ҙур өҫтәл, уның өҫтөндә лә тәмле, шайыҡтарҙы ағыҙа торған ризыҡлы һауыт ултыра. Өҫтәл тирәләй ҡулдарына шундай уҡ оҙон һаплы ҡалаҡ беркетелгән кешеләр ултыра. Ләкин улар тәүге бүлмәләге һымаҡ ас һәм ауырыу түгелдәр, ә туҡ, яҡшы кәйефле, шат йөҙлөләр, бер-береһе менән күңелле әңгәмәләшәләр, ти.**

**- Мин бер ни ҙә аңламаным бит әле... - тип аптыраған изге кеше.**

**- Бында барыһы ла бик ябай, - тигән Хоҙай. - Был Ожмах бүлмәһендәгеләр фани донъяла йәшәгәндә башҡалар тураһында уйлаған, башҡаларға ярҙам итергә әҙер торған кешеләр, улар бында ла оҙон ҡалаҡтарын үҙ ауыҙҙарына түгел, күршеһе ауыҙына йүнәлтә, бер-береһен ашаталар. Ә Тамуҡ бүлмәһендәгеләр - фани донъяла ла, әхирәттә лә бары тик үҙҙәре тураһында ғына уйлаған кешеләр...**

**Бына шулай, изге кеше Ожмах менән Тамуҡтың бер төрлө булыуын, тик айырманың кешеләрҙең үҙендә булыуын үҙ күҙҙәре менән күреп аңлаған..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26020

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99**
**Матбуғат таратыу** **252-39-99**

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 21.05.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 21.05.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 22.05.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2677
Заказ - 886